Был сәсте мин алдым арыштан,
Теләһәң, ал һис тә ҡарышмам,
Бармағыңа мөмкин урарға,
Мин әҙермен һиңә йырларға.
Ай аҫтында арыш бешкәнен
Бөҙрә сәстәремдән минең бел,
Ҡәҙерлем, һин шаяр, йылмай, көл,
Тик иҫләтмә, иҫкә төшмәһен
Ай аҫтында арыш бешкәне.
Шәһәнәм һин минең, Шәһәнәм,
Төньяҡта бер һылыу ҡыҙ ҡалған,
Иҫ киткес ул һиңә оҡшаған,
Көнләшәлер, бәлки, ул һинән...
Шәһәнәм һин минең, Шәһәнәм!

* * *

Һин әйтәһең, Сәғәҙи, тип,
Үпкән, имеш, гел түштән.
Сабыр итсе, мин дә бер көн
Ситтә ҡалмам был эштән!..

«Гөлдәр Евфрат аръяғында
Ҡыҙҙарҙан сибәр», — тинең.
Һинең һымаҡ йырлай алһам,
Башҡа көй көйләр инем:

Өҙөр инем ул гөлдәрҙе,
Булмаһа йыуанысым —
Шәһәнәмдән башҡа юҡ бит
Донъяла ҡыуанысым.

Ғазаплама вәғәҙә тип,
Вәғәҙәме килешә?
Шағир булып тыуғас ерга,
Шағирҙарса үбешәм...

* * *

Никогда я не был на Босфоре,
Ты меня не спрашивай о нем.
Я в твоих глазах увидел море,
Полыхающее голубым огнем.

Не ходил в Багдад я с караваном,
Не возил я шелк туда и хну.
Наклонись своим красивым станом,
На коленях дай мне отдохнуть.

Или снова, сколько ни проси я,
Для тебя навеки дела нет,
Что в далеком имени — Россия —
Я известный, признанный поэт.

У меня в душе звенит тальянка,
При луне собачий слышу лай.
Разве ты не хочешь, персиянка,
Увидать далекий, синий край?

Я сюда приехал не от скуки —
Ты меня, незримая, звала.
И меня твои лебяжьи руки
Обвивали, словно два крыла.

Я давно ищу в судьбе покоя
И хоть прошлой жизни не кляну.
Расскажи мне что-нибудь такое
Про твою веселую страну.

Заглуши в душе тоску тальянки,
Напои дыханьем свежих чар,
Чтобы я о дальней северянке
Не вздыхал, не думал, не скучал.

И хотя я не был на Босфоре —
Я тебе придумаю о нем.
Все равно — глаза твои, как море,
Голубым колышутся огнем.

* * *

Булғаным юҡ Босфор ерҙәрендә,
Һин һорашма ул ер хаҡында.
Тик диңгеҙҙе күрҙем күҙҙәреңдә,
Тоҡанғанда зәңгәр ялҡындан.

Карауандар яллап Бағдадҡа ла
Ебәк-кына тейәп китмәйем.
Һомғол һының мине утҡа һала,
Тубығыңда серем итәйем.

Әллә тағы — күпме үтенһәм дә —
Күҙ төбөңдә шикле йыйырсыҡ?
Эйе, бынан алыҫ үҙ илемдә
Мин танылған мәшһүр бер йырсы.

Күңелемдә — тальян сыңы айҙың,
Ҡолағымда — эттәр һаулауы.
Күк илемде, ахыры, фарсы ҡыҙы,
Һиңә генә ҡыйын аңлауы?

Эс бошҡандан түгел, мин бит бында
Тойоп килдем һинең тауышты.
Ҡулдарыңа — аҡҡош ҡанатындай —
Тапшырҙым мин инде яҙмышты.

Үткәндәргә үпкәм булмаһа ла,
Тынғы эҙләп килдем мин бында.
Йә, һөйләсе миңә ни булһа ла
Шат ҡояшлы илең хаҡында.

Саф һулышың менән һин сихырлап
Баҫып торсо тальян һағышын.
Алыҫтағы төньяҡ ҡыҙын уйлап,
Йышаймаһын йөрәк ҡағышым.

Булмаһам да Босфорҙа мин ҡунаҡ,
Һүҙ табырмын уның хаҡында.
Күҙҙәрең бит барыбер диңгеҙ һымаҡ
Тоҡанғанда зәңгәр ялҡындан.

* * *

Свет вечерний шафранного края,
Тихо розы бегут по полям.
Спой мне песню, моя дорогая,
Ту, которую пел Хайям.
Тихо розы бегут по полям.

Лунным светом Шираз осиянен,
Кружит звезд мотыльковый рой.
Мне не нравится, что персияне
Держат женщин и дев под чадрой,
Лунным светом Шираз осиянен.

Иль они от тепла застыли,
Закрывая телесную медь?
Или, чтобы их больше любили,
Не желают лицом загореть,
Закрывая телесную медь?

Дорогая, с чадрой не дружись,
Заучи эту заповедь вкратце,
Ведь и так коротка наша жизнь,
Мало счастьем дано любоваться.
Заучи эту заповедь вкратце.

Даже все некрасивое в роке
Осеняет своя благодать.
Потому и прекрасные щеки
Перед миром грешно закрывать,
Коль дала их природа-мать.

Тихо розы бегут по полям.
Сердцу снится страна другая.
Я спою тебе сам, дорогая,
То, что сроду не пел Хайям...
Тихо розы бегут по полям.

* * *

Зәғфрандай илдең зәңгәр кисе,
Тыныс ҡына гөлдәр иҙ(е)рәй.
Йәсе, йәнем, бер йыр йырлап бирсе,
Хәйәм үҙе алһын иҫерә.
Тыныс ҡына гөлдәр иҙ(е)рәй.

Ай нурына Шираз ҡойонғанда,
Күбәләктәй — йондоҙ күстәре.
Бында миңә бик ят тойолғандай,
Пәрәнжәле ҡыҙҙың кистәре,
Ай нурына Шираз ҡойонғанда.

Әллә ҡыҙҙар нурҙан ойоғанмы,
Бөркәп шулай баҡыр йөҙҙәрен?
Йә һөйөүҙе нығыраҡ тойорғамы,
Айҙан-көндән һаҡлай үҙҙәрен?
Аһ, күрәһе ине күҙҙәрен!..

Ҡәҙерлем, һин ташла пәрәнжәңде,
Ҡолаҡҡа таҡ, һүҙем — ай-алҡа.
Бел үҙеңдең күркең-дәрәжәңде,
Былай ҙа бит ғүмер бик ҡыҫҡа,
Ҡолаҡҡа таҡ, һүҙем — ай-алҡа!

Яҙмышына зарлы әҙәмде лә
Мәхрүм итмәй, тиҙәр, мөхәббәт.
Шуның өсөн айҙай йөҙөңдө лә
Бөркәнсеккә йәшереү енәйәт,
Биргәс икәс әсәң-тәбиғәт!

Тыныс ҡына гөлдәр иҙрәгәндә,
Башҡа бер ил килә хыялға,
Мин йырлайым үҙем, көй килгәндә,
Ул ғүмерҙә килмәҫ Хәйәмгә,
Тыныс ҡына гөлдәр иҙрәгәндә...

* * *

Воздух прозрачный и синий,
Выйду в цветочные чащи.
Путник, в лазурь уходящий,
Ты не дойдешь до пустыни.
Воздух прозрачный и синий.

Лугом пройдешь, как садом,
Садом — в цветенье диком.
Ты не удержишься взглядом,
Чтоб не припасть к гвоздикам.
Лугом пройдешь, как садом.

Шепот ли, шорох иль шелест —
Нежность, как песни Саади.
Вмиг отразится во взгляде
Месяца желтая прелесть,
Нежность, как песни Саади.

Голос раздастся пери,
Тихий, как флейта Гассана,
В крепких объятиях стана
Нет ни тревог, ни потери,
Только лишь флейта Гассана.

Вот он удел желанный
Всех, кто в пути устали.
Ветер благоуханный
Пью я сухими устами,
Ветер благоуханный.

* * *

Золото холодное луны,
Запах олеандра и левкоя.
Хорошо бродить среди покоя
Голубой и ласковой страны.

* * *

Шундай саф һәм зәңгәр һауа!
Ҡыуаҡтарға сығып ауам.
Туҡта, юлсы, туҡтап торсо,
Китмә, таңға юлың борсо —
Шундай саф һәм зәңгәр һауа!

Туғай тиһәм, баҡса, буғай,
Ҡотороноп гөлөн болғай.
Мәжбүр булам эйелергә,
Һәр сәскәнән һөйөлөргә —
Туғай тиһәм, баҡса, буғай.

Бышылдауы, шытырлауы —
Нәҡ Сәғҙиҙең йыр йырлауы!
Айҙың сыңлап бер ҡарауы,
Нурға сорнап, сихырлауы —
Нәҡ Сәғҙиҙең йыр йырлауы!

Сеү, ниндәй моң? Ни юрайым?
Хәсәндең был наҙ һорнайы!
Ҡыҫып ал да ҡосағыңа,
Ул, рәхмәт, тип был сағыңа!..
Тик Хәсәндең бар һорнайы.

Бына ҡайҙа сарсап көткән,
Көтөп көтөк булып бөткән,
Хуш еҫенән ел иҫергән
Йәш бер ҡыҙҙың иренәнән
Һурып үбер мәлең еткән!

* * *

Күктә — айҙың һалҡын алтыны,
Ерҙә — гөлдөң мең-мең төҫтәре.
Мин, уларҙың эсеп еҫтәрен,
Таймайым да айҙың һалҡынын.

Далеко-далече там Багдад,
Где жила и пела Шахразада.
Но теперь ей ничего не надо.
Отзвенел давно звеневший сад.

Призраки далекие земли
Поросли кладбищенской травою.
Ты же, путник, мертвым не внемли,
Не склоняйся к плитам головою.

Оглянись, как хорошо кругом:
Губы к розам так и тянет, тянет.
Помирись лишь в сердце со врагом —
И тебя блаженством ошафранит.

Жить — так жить, любить — так уж влюбляться.
В лунном золоте целуйся и гуляй,
Если ж хочешь мертвым поклоняться,
То живых тем сном не отравляй.

Это пела даже Шахразада, —
Так вторично скажет листьев медь.
Тех, которым ничего не надо,
Только можно в мире пожалеть.

* * *

В Хорасане есть такие двери,
Где обсыпан розами порог.
Там живет задумчивая пери.
В Хорасане есть такие двери,
Но открыть те двери я не мог.

У меня в руках довольно силы,
В волосах есть золото и медь.
Голос пери нежный и красивый.
У меня в руках довольно силы,
Но дверей не смог я отпереть.

Шәһрәзада йырлап йәшәгән
Бағдад бынан алыҫ-алыҫта.
Ниңә хәҙер уға ырыҫ-дан?
Күптән күкрәп, күптән йәшнәгән...

Алыҫ шәүләләрен был ерҙең
Үләндәре күмгән ҡәберҙең.
Таштарына эйеп башыңды,
Һин, мосафир, түкмә йәшеңде.

Донъяға баҡ: ниндәй хозурлыҡ!
Тыңла ғына гөлдәр ҡушҡанын:
Ҡоластарың йәйеп осорлоҡ,
Әйләнһә тик дуҫҡа дошманың...

Йәшәгәс һин — йәшә, һөйгәс — һөй,
Ай нурында йөрө үбешеп.
Үлгәндәргә башың эйһәң — эй,
Тереләргә ағыу — ул төшөң.

Шәһрәзада шулай йырлаһа,
Мең ҡабатлар япраҡ баҡыры.
Был донъяны берәү хурлаһа,
Тик йәлләргә кәрәк бахырҙы.

* * *

Хорасанда шундай ишектәр бар,
Һалмаған гөл унда ҡалманы:
Йәшәй унда бер ҡыҙ, йотоп моң-зар.
Хорасанда шундай ишектәр бар,
Тик уларҙы аса алманым.

Ҡулдарымда көс тә етерлек тә,
Сәстәрем дә алтын-баҡырҙан,
Тауышы ла хайран итерлек тә,
Ҡулдарымда көс тә етерлек тә,
Тик ишеге түгел асырҙан!..

Ни к чему в любви моей отвага.
И зачем? Кому мне песни петь? —
Если стала неревнивой Шага,
Коль дверей не смог я отпереть,
Ни к чему в любви моей отвага.

Мне пора обратно ехать в Русь.
Персия! Тебя ли покидаю?
Навсегда ль с тобою расстаюсь
Из любви к родимому мне краю?
Мне пора обратно ехать в Русь.

До свиданья, пери, до свиданья.
Пусть не смог я двери отпереть,
Ты дала красивое страданье,
Про тебя на родине мне петь.
До свиданья, пери, до свиданья.

* * *

Голубая родина Фирдуси,
Ты не можешь, памятью простыв,
Позабыть о ласковом урусе
И глазах, задумчиво простых,
Голубая родина Фирдуси.

Хороша ты, Персия, я знаю,
Розы, как светильники, горят
И опять мне о далеком крае
Свежестью упругой говорят.
Хороша ты, Персия, я знаю.

Я сегодня пью в последний раз
Ароматы, что хмельны, как брага.
И твой голос, дорогая Шага,
В этот трудный расставанья час
Слушаю в последний раз.

Ҡыйыулығым бушҡа һөйөүемдә,
Йыр тыңлаусым инде ҡалмағас,
Шаһәнәм дә көлгәс көйөүемдән,
Ҡыйыулығым бушҡа һөйөүемдә,
Ишеген дә аса алмағас.

Ҡайтыр саҡ та етте Рәсәйгә,
Фарсы иле, ни хәл итәйем?
Хушлашабыҙ, буғай, беҙ мәңгегә?
Ҡайтыр саҡ та етте Рәсәйгә,
Тик һинән һуң нисек китәйем?

Һау бул инде, һылыу, һау бул инде,
Аса алмаһам да ишегең,
Татлы ғазап булып йәнгә индең,
Һау бул инде, һылыу, һау бул инде,
Һинең хаҡта илем ишетһен!..

* * *

Фирҙәүсиҙең зәңгәр илкәйе!..
Яғымлы бер дуҫың хаҡында
Оноталмаҫһың, юйып иҫкәйең,
Уйсан күҙе ҡалыр аңыңда,
Фирҙәүсиҙең зәңгәр илкәйе!

Шәпһең, фарсы иле, мин беләм:
Шәмсыраҡтай яна гөл генәң,
Шул гөлдәрҙәй һығылып түгеләм,
Иҫкә төшһә йәнә илгенәм,
Шәпһең, фарсы иле, мин беләм.

Һуңғы ҡабат эсәм, һуңғы көн
Хуш еҫтәрен, ҡойған бал һымаҡ.
Хушлашҡанда, Шаһәм, һөйөклөм,
Тауышың да йәнгә ял һымаҡ,
Һәр һүҙеңде йотам мин бөгөн.

Но тебя я разве позабуду?
И в моей скитальческой судьбе
Близкому и дальнему мне люду
Буду говорить я о тебе —
И тебя навеки не забуду.

Я твоих несчастий не боюсь,
Но на всякий случай твой угрюмый
Оставляю песенку про Русь:
Запевая, обо мне подумай,
И тебе я в песне отзовусь...

* * *

Быть поэтом — это значит то же,
Если правды жизни не нарушить,
Рубцевать себя по нежной коже,
Кровью чувств ласкать чужие души.

Быть поэтом — значит петь раздольно,
Чтобы было для тебя известней.
Соловей поет — ему не больно,
У него одна и та же песня.

Канарейка с голоса чужого —
Жалкая, смешная побрякушка.
Миру нужно песенное слово
Петь по-свойски, даже как лягушка.

Магомет перехитрил в Коране,
Запрещая крепкие напитки,
Потому поэт не перестанет
Пить вино, когда идет на пытки.

И когда поэт идет к любимой,
А любимая с другим лежит на ложе,
Влагою живительной хранимый,
Он ей в сердце не запустит ножик.

Но, горя ревнивою отвагой,
Будет вслух насвистывать до дома:
«Ну и что ж! помру себе бродягой,
На земле и это нам знакомо».

Тик булырмы һине онотоп?
Ил ҡыҙырған яңғыҙ саҡтарҙа
Мин һөйләрмен, ут йотоп,
Яҡындарға, ете яттарға,
Мәңге булмаҫ һине онотоп.

Юҡ, ҡурҡытмай мине яҙмышың,
Тик берәй хәл ҡуйһа яралап,
Йыр ҡалдырам — илем һағышын.
Уйла, йырлап, минең турала,
Яуап бирер йөрәк тауышым.

* * *

Шағир булыу — шул уҡ шәһит үлеү,
Тормош дөрөҫлөгөн боҙмау ул,
Йөрәгеңде телеп, ҡаның бүлеп,
Башҡа күңелдәрҙе наҙлау ул.

Шағир булыу — ул киңлекте йырлау,
Тик киңлектә күңел йылмайыр.
Һандуғасҡа, ана, ни һуң һайрау!
Күпме һайрамаһын — бер үк йыр.

Сыйырсыҡ та, башҡаларҙан урлап,
Йырлай яҙын — әҙер ояла.
Ә һин теләһә тәлмәрйенсә сурла,
Тик үҙеңсә йырла донъяла.

Мөхәммәт ул тыйған Ҡөрьәнендә
Дуҫ булыуҙы хәмер-шарапҡа.
Әммә Хоҙай шағир йөрәгендә
Башҡасараҡ ғазап яралтҡан...

Шуға ла ул һөйгән йәрен йырлай,
Йәре ятһа, ҡосоп ят йәрҙе,
Йәншишмәнән эскән дымы һаҡлай,
Ҡаҙап бармай уға хәнйәрҙе.

Өйгәсә ул сай һыҙғырып ҡайтһа,
Саялығын кем һуң тыяла?
«Ярай, — тиер, — бер дөмөгөп ятһам,
Был да таныш беҙгә донъяла...»

* * *

Руки милой — пара лебедей —
В золоте волос моих ныряют.
Все на этом свете из людей
Песнь любви поют и повторяют.

Пел и когда-то далеко
И теперь пою про то же снова,
Потому и дышит глубоко
Нежностью пропитанное слово.

Если душу вылюбить до дна,
Сердце станет глыбой золотою,
Только тегеранская луна
Не согреет песни теплотою.

Я не знаю, как мне жизнь прожить:
Догореть ли в ласках милой Шаги,
Иль под старость трепетно тужить
О прошедшей песенной отваге?

У всего своя походка есть:
Что приятно уху, что — для глаза.
Если перс слагает плохо песнь,
Значит, он вовек не из Шираза.

Про меня же и за эти песни
Говорите так среди людей:
Он бы пел нежнее и чудесней,
Да сгубила пара лебедей.

* * *

«Отчего луна так светит тускло
На сады и стены Хороссана?
Словно я хожу равниной русской
Под шуршащим пологом тумана», —

* * *

Ике аҡҡош — йәрем ҡулдары —
Сумып уйнай алтын сәсемдә.
Был донъяла әҙәм балалары
Бар(ы)һы бер йыр һаҡлай хисендә.

Ҡасандыр бит мин дә йырланым,
Әле ҡайттым тағы шул йырға.
Наҙ һеңгән һүҙ шуға, нурланып,
Әҙер тора аһын ҡойорға.

Булыр ине алтын тауындай,
Ахырғаса һөйһә йөрәгең.
Тик Таһаран айы, ҡауындай,
Йылытмай шул йырҙы, күрәһең.

Белмәйем дә ҡалай итергә:
Яңырғамы Шаһәм наҙында?
Ҡалырғамы ҡартлыҡ көтөргә,
Тыйылып был ҡыйыу аҙымдан?

Һәр нигә баҡ бейек ҡыраҙдан:
Ҡайһы — күҙгә, ҡайһы — ҡолаҡҡа?
Хөрт йырсы ул булмаҫ Шираздан,
Яңылыштан булыр олаҡҡан...

Был йырҙарым өсөн аҙыраҡ
Һүҙ ҙә тейер, оҡшап етмәһә,
Йырлар инем моңло-наҙлыраҡ,
Ике аҡҡош харап итмәһә.

* * *

«Нилектән ай шулай тоноҡ ҡарай
Хорассандың диуар, бағына?
Гүйә, томан шауын ярып барам,
Ҡайтҡанмын да тыуған яғыма».

Так спросил я, дорогая Лала,
У молчащих ночью кипарисов,
Но их рать ни слова не сказала,
К небу гордо головы завысив.
«Отчего луна так светит грустно?» —
У цветов спросил я в тихой чаще,
И цветы сказали: «Ты почувствуй
По печали розы шелестящей».
Лепестками роза расплескалась,
Лепестками тайно мне сказала:
«Шаганэ твоя с другим ласкалась,
Шаганэ другого целовала.
Говорила: «“Русский не заметит...
Сердцу — песнь, а песне — жизнь и тело”.
Оттого луна так тускло светит,
Оттого печально побледнела».
Слишком много виделось измены,
Слез и мук, кто ждал их, кто не хочет.
Но и все ж вовек благословенны
На земле сиреневые ночи.

* * *

Глупое сердце, не бейся!
Все мы обмануты счастьем,
Нищий лишь просит участья...
Глупое сердце, не бейся!

Месяца желтые чары
Льют по каштанам в пролесь.
Лале склонясь на шальвары,
Я под чадрою укроюсь.
Глупое сердце, не бейся.

Все мы порою, как дети,
Часто смеемся и плачем.
Выпали нам на свете
Радости и неудачи.
Глупое сердце, не бейся.

Шулай һораным мин, Лал һөйөклөм,
Ойоп торған орсоҡ ағастан.
Тик кипарис теле әллә бикле —
Башын сөйөп ҡалды бер оста.
«Нилектән ай шулай моңһоу ҡарай?» —
Тип гөлдәргә баҡтым был төндә.
«Той һин уны, — тине улар, ярай, —
Һағышынан ҡыштыр гөлөңдөң».
Таж керпеген гөлөм һирпеп асты,
Таж телкәйе быш-быш сер систе:
«Шаһәнәң бит башҡа менән ҡасты,
Шаһәнәң бит... үпте... хәсисте!..
Теге урыҫ, — тине, — һиҙмәҫ әле,
Миңә түгел — әүрәй йыр-моңға...»
Шуға ла шул айҙың бойоҡ мәле,
Шуға ла шул төҫө ҡомһарған...
Үтә күп күрелде хыянаттар,
Уттар йотоп, күҙ йәш түккәндәр...
Ә шулай ҙа ҡалһын айҙа таптар,
Ер йөҙөндә — мәңге күк төндәр.

* * *

Типмә инде, һантый йөрәк!
Бәхет йөрөй ул ситтәрәк,
Тик фәҡирҙе йәлләү кәрәк,
Типмә улай, һантый йөрәк!

Айҙың һары сихырынан
Сайҡалыша тал да тирәк.
Һаҡла, Лалым, ай нурынан,
Пәрәнжәңде яп тиҙерәк,
Типмә, типмә, һантый йөрәк!

Беҙ ҡайһы саҡ хәс тә бала:
Көлөшәбеҙ йыш бигерәк.
Яҙған беҙгә был донъяла
Илашыуҙар тик күберәк,
Ҡуй, типмәсе, һантый йөрәк!

Многие видел я страны,
Счастья искал повсюду.
Только удел желанный
Больше искать не буду.
Глупое сердце, не бейся.

Жизнь не совсем обманула.
Новой напьемся силой.
Сердце, ты хоть бы заснуло
Здесь, на коленях у милой.
Жизнь не совсем обманула.

Может, и нас отметит
Рок, что течет лавиной,
И на любовь ответит
Песнею соловьиной.
Глупое сердце, не бейся.

* * *

Голубая да веселая страна.
Честь моя за песню продана.
Ветер с моря, тише дуй и вей —
Слышишь, розу кличет соловей?

Слышишь, роза клонится и гнется —
Эта песня в сердце отзовется.
Ветер с моря, тише дуй и вей —
Слышишь, розу кличет соловей?

Ты ребенок — в этом спора нет,
Да и я ведь разве не поэт?
Ветер с моря, тише дуй и вей —
Слышишь, розу кличет соловей?

Дорогая Гелия, прости.
Много роз бывает на пути,
Много роз склоняется и гнется,
Но одна лишь сердцем улыбнется.

Күп илдәрҙе гиҙеп сыҡтым:
Бәхетлеләр ерҙә һирәк.
Эҙләмәнем инде юҡты,
Юҡты юллау ниңә кәрәк?
Туҡта! Типмә, һантый йөрәк!

Өлөшһөҙ ҙә түгелбеҙҙер,
Көс йыйырбыҙ тағы алда.
Тик, йөрәгем, серем ит бер
Һөйөклөмдөң тубығында, —
Өлөшһөҙ ҙә түгелбеҙҙер?

Бәлки, яҙмыш яҙған булһа,
Бер уҙҙырыр ул түргәрәк.
Гөл нурыңа былбыл ҡунһа,
Тағы һиңә ни һуң кәрәк?
Типмә инде, һантый йөрәк!

* * *

Эй һин, зәңгәр илдең алсаҡ алыҫы!
Һатылды бит йыр-моңдарға намыҫым.
Сеү, талғын иҫ, диңгеҙ еле, тын йә ҡас —
Ишетәһеңме, гөлөн арбай һандуғас?

Ишетәһеңме, бөгөлә гөл, һығыла —
Йөрәк йыры күңелдәргә яғыла.
Сеү, талғын иҫ, диңгеҙ еле, тын йә ҡас —
Ишетәһеңме, гөлөн арбай һандуғас?

Һин — сабыйһың, бәхәсһеҙ ҙә билдәле,
Ә һуң шағир түгелме ни мин дәле?
Сеү, талғын иҫ, диңгеҙ еле, тын йә ҡас —
Ишетәһеңме, гөлөн арбай һандуғас?

Кисер мине, Ғәлиәм һин, ҡәҙерлем,
Күп гөлдәрҙе күрҙем инде хәҙер мин.
Юлда гөлдәр күп бөгөлөр, һығылыр,
Тик береһенең йылмайыуы йыйылыр.

Улыбнемся вместе, ты и я,
За такие милые края.
Ветер с моря, тише дуй и вей —
Слышишь, розу кличет соловей?

Голубая да веселая страна.
Пусть вся жизнь моя за песню продана,
Но за Гелию в тенях ветвей
Обнимает розу соловей.

## КАПИТАН ЗЕМЛИ

Еще никто
Не управлял планетой,
И никому
Не пелась песнь моя.
Лишь только он,
С рукой своей воздетой,
Сказал, что мир —
Единая семья.

Не обольщен я
Гимнами герою,
Не трепещу
Кровопроводом жил.
Я счастлив тем,
Что сумрачной порою
Одними чувствами
Я с ним дышал
И жил.
Не то что мы,
Которым все так
Близко, —
Впадают в диво
И слоны...
Как скромный мальчик
Из Симбирска
Стал рулевым
Своей страны.

Средь рева волн
В своей расчистке,
Слегка суров
И нежно мил,

Әйҙә бергә йылмаяйыҡ — һин дә мин,
Былдай илгә ниндәй генә илдәр тиң?
Сеү, талғын иҫ, диңгеҙ еле, тын йә ҡас —
Ишетәһеңме, гөлөн арбай һандуғас?

Эй был зәңгәр, алсаҡ илкәй һау булһын,
Бар ғүмерем әйҙә йырға һатылһын.
Тик Ғәлиәм өсөн төндә, ай тыуғас,
Гөлөн шашып ҡосаҡлаһын һандуғас.

## ЕР КАПИТАНЫ

Бер кем әле
Тетрәтмәгән ерҙе,
Бер кемгә лә
Мин йыр яҙманым.
Бары тик ул
Ярып әйтеп бирҙе
Берҙәм ғаилә тип
Донъяны.
Тәм тапманым
Уға гимндарҙан,
Ҡаным ҡайнап,
Ебеп төшмәнем.
Мин бәхетле:
Ауыр замандарҙа
Уның менән
Бергә һулап,
Бергә йәшәнем.

Бер беҙ генә түгел, —
Күр, фәһем ит! —
Иҫе китә
Хатта филенең:
Ябай ғына
Сембер малайы бит
Ишкәксеһе булды
Иленең!..
Ел-дауылда
Яңыртҡанда ерҙе,
Наҙлы булды,
Аяу белмәне.

Он много мыслил
По-марксистски,
Совсем по-ленински
Творил.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Он в разуме,
Отваги полный
Лишь только прилегал
К рулю,
Чтобы об мыс
Дробились волны,
Простор давая
Кораблю.

Он — рулевой
И капитан.
Страшны ль с ним
Шквальные откосы?
Ведь, собранная
С разных стран,
Вся партия его —
Матросы.

Не трусь,
Кто к морю не привык:
Они за лучшие
Обеты
Зажгут,
Сойдя на материк,
Путеводительные светы.

Тогда поэт
Другой судьбы,
И уж не я,
А он меж вами
Споет вам песню
В честь борьбы
Другими,
Новыми словами.
Он скажет:
«Только тот пловец,
Кто, закалив
В бореньях душу,
Открыл для мира наконец
Никем не виданную
Сушу».

Күп уйланы
Ул маркса үҙе,
Тик ленинса
Эшен эшләне.
Тәүәккәллек һалды
Соғоллоҡҡа,
Бар тулҡындар ҡапыл
Сығып юҡҡа,
Иркен юл асылды
Карапҡа.
Ул — ишкәксе
Һәм капитан үҙе,
Дауылдың юҡ
Уға хәтәре.
Диңгеҙсеһен йыйып
Бар илдәрҙең,
Партияһын төҙҙө —
Ғәскәрен.
Күнекмәгән булһаң
Һин диңгеҙгә,
Һис тә ҡурҡма
Улар барында.
Изге маҡсат өсөн,
Төшөп ергә,
Яндырырҙар
Маяҡ ярында.
Ул сағында
Булмам тик мин генә,
Башҡа йырсы
Һеҙҙең арала,
Башҡа һүҙҙәр,
Яңы һүҙҙәр менән
Йырлар һеҙгә
Ошо турала:
«Кем күңеле күргән
Көрәштәрҙе,
Тик шул ғына, — тиер, —
Йөҙөүсе.
Күҙ күрмәгән
Яңы ҡоро ерҙе
Шул асыуы
Донъя йөҙө өсөн!»

* * *

Несказанное, синее, нежное...
Тих мой край после бурь, после гроз,
И душа моя — поле безбрежное —
Дышит запахом меда и роз.

Я утих. Годы сделали дело,
Но того, что прошло, не кляну.
Словно тройка коней оголтелая
Прокатилась во всю страну.

Напылили кругом. Накопытили.
И пропали под дьявольский свист.
А теперь вот в лесной обители
Даже слышно, как падает лист.

Колокольчик ли? Дальнее эхо ли?
Все спокойно впивает грудь.
Стой, душа, мы с тобой проехали
Через бурный положенный путь.

Разберемся во всем, что видели,
Что случилось, что сталось в стране,
И простим, где нас горько обидели
По чужой и по нашей вине.

Принимаю, что было и не было,
Только жаль на тридцатом году —
Слишком мало я в юности требовал,
Забываясь в кабацком чаду.

Но ведь дуб молодой, не разжелудясь,
Так же гнется, как в поле трава...
Эх ты, молодость, буйная молодость,
Золотая сорвиголова!

* * *

Әйтеп бөтөргөһөҙ наҙлы, күм-күк
Дауылдан һуң тыуған ерҙәрем.
Һәм күңелем, сикһеҙ ялан кеүек,
Еҫен һулай баллы гөлдәрҙең.

Тындым. Йылдар үҙенекен итте,
Тик үткәнде һүкмәм, күп уйлап,
Ярһыу аттар, гүйә, сабып үтте,
Сай һыҙғыртып, бөтә ил буйлап.

Туҙан борҡоп ҡалды. Таптатылды
Еләк-емдең янып бешкәне.
Ишетелә хәҙер һил урманда
Япраҡтың да өҙөлөп төшкәне.

Ҡыңғыраумы? Алыҫ яңғыраумы? —
Тыныс һеңә барыһы күңелгә.
Сеү, күңел, һин әллә һаңғыраумы?
Үтер юлыбыҙ бит үтелгән!..

Хәтерләйек бөтә үткәндәрҙе,
Ни булғанын илдә, ни барын.
Кисер — беҙҙе ситкә типкәндәрҙе,
Хаҡ, нахаҡмы — онот уларын.

Күтәрәм мин барын һәм юғын да,
Тик шуныһы йәл — утыҙ йәш еткән —
Онотолоп ыҫлы ҡабағында,
Үтә аҙ һораным йәшлектән.

Әммә йәш имән дә, туйраланмай,
Бөгөлә бит шулай тикмәгә...
Их һин, йәшлек — алтын тиле башҡай —
Кемгә килеп, кемдән китмәгән!..

* * *

До свиданья, друг мой, до свиданья...
Милый мой, ты у меня в груди.
Предназначенное расставанье
Обещает встречу впереди.

До свиданья, друг мой, без руки, без слова,
Не грусти и не печаль бровей, —
В этой жизни умирать не ново,
Но и жить, конечно, не новей.

## Михаил Исаковский
## (1900 – 1973)

### ВИШНЯ

В ясный полдень, на исходе лета,
Шел старик дорогой полевой;
Вырыл вишню молодую где-то
И, довольный, нес ее домой.

Он глядел веселыми глазами
На поля, на дальнюю межу
И подумал: «Дай-ка я на память
У дороги вишню посажу.

Пусть растет большая-пребольшая,
Пусть идет и вширь и в высоту
И, дорогу нашу украшая,
Каждый год купается в цвету.

Путники в тени ее прилягут,
Отдохнут в прохладе, в тишине,
И, отведав сочных, спелых ягод,
Может статься, вспомнят обо мне.

А не вспомнят — экая досада, —
Я об этом вовсе не тужу:
Не хотят — не вспоминай, не надо —
Все равно я вишню посажу!»

***

Хуш бул инде, дуҫҡай, хуш хәҙергә,
Һөйөклөм, һин күңел түремдә.
Яҙмыш яҙған айырылышыу беҙгә
Осрашыу ҙа илтер бер көндә.

Хуш бул инде, дуҫҡай, ҡулһыҙ, һүҙһеҙ,
Бойоҡма бик, ҡашың йыйырма.
Был донъяла үлеү яңы түгел,
Йәшәүҙә лә юҡ бит айырма.

## Михаил Исаковский
## (1900 – 1973)

### СЕЙӘ

Көн үҙәге әбей сыуағының,
Бер ҡарт килә баҫыу юлынан;
Ҡыҙып алып сейә ҡыуағының
Йәш һабағын тотҡан ҡулына.

Ҡулын ҡуйып шул саҡ ҡаш өҫтөнә,
Үҙ алдына ҡуйҙы һөйләнеп:
«Туҡта әле, бынау юл ситенә
Ултыртайым, — тине, — сейәне.

Үҫһен сабый, оло сатыр ҡороп,
Яҙын һайрар ҡошон ҡундырһын.
Юлды йәмләп, әйҙә, япраҡ ярып,
Аҡ сәскәгә батып ултырһын.

Ауылдаштар бөткәс үҙ эштәрен,
Күләгәлә һуҙылып ятырҙар.
Ауыҙ итеп бешкән емештәрен,
Мин ҡартласты иҫкә алырҙар.

Алмаһа ни тағы, әйҙә, алмаҫ,
Юҡ әле бик эсем көйгәне.
Тик яҡшылыҡ юлда ятып ҡалмаҫ,
Ултыртайым әле сейәне!..»

## Михаил Светлов
## (1903 – 1964)

* * *

*(Стихи комсомольца)*

Под пули, под грохот орудий,
Под свист нескончаемых вьюг,
Семнадцатилетние люди
Выходят из дряхлых лачуг.
Сраженьями юность гремела,
И я обращаюсь к стране:
«Выдай оружие смелым,
И в первую очередь — мне!»
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Традиций борьбы не забывший,
Опять собираясь в поход,
В Российской империи бывшей
Поет комсомольский народ.
Я жду приказания штаба,
Когда в перекрестном огне,
Оружие выдадут храбрым,
И в первую очередь — мне!..

## Яков Шведов
## (1905 – 1984)

### НЕ УЛЕТАЙ, ЛЕБЕДУШКА!

Иду с тобой вдоль бережка,
Шепчу сердечно: — Милая!
Моя родная девушка,
Ты — лебедь белокрылая.

Тропинки чуть заметные...
Проходит полночь в шорохах...
Шепчу слова заветные:
— Ты — белая черемуха!

## Михаил Светлов
## (1903 – 1964)

* * *

Туптар гөрһөлдәүе менән бергә
Ҡушылғанда буран көйҙәре,
Ун етеһе еткән йәш үҫмерҙәр
Ташлап сыҡты тыуған өйҙәрен.

Күкрәп үтһә яуҙа беҙҙең йәшлек,
Мин өндәшәм бөгөн илемә:
«Ҡорал бирсе, илем, ҡыйыуҙарға,
Һәм иң элек уны бир миңә!»

Онотмайса көрәш йолаларын,
Йыйындыҡ беҙ тағы походҡа.
Яңы тормош өсөн Россияла
Йырҙар йырлап индек беҙ утҡа.

Мин штабтың көтәм бой(о)роҡтарын,
Ут ҡойонған мәлдә был ерҙәр.
Ҡыйыуҙарға ҡорал өләшерҙәр,
Һәм иң элек миңә бирерҙәр.

## Яков Шведов
## (1905 – 1984)

### АҠКОШОМ

Сыкһам йылға буйҙарына,
Сумам татлы уйҙарыма.
Уйҙарымда һин, аҡкошом,
Һин, аҡкошом, хаҡ яҙмышым.

Һуҡмаҡтарҙан урай-урай,
Йондоҙҙарға ҡарай-ҡарай,
Мин киләмен суҡ муйылға,
Йөрәгемә ул уйылған.

Глаза твои лучистые
С моими пусть встречаются.
В них только думы чистые
Да звезды отражаются.

Идешь походкой смелою
Тропинками зелеными,
Встречает жито спелое
Тебя одну поклонами.

Не скоро встанет солнышко,
Все небо в ярких сполохах...
— Не улетай, лебедушка,
Не отцветай, черемуха!

Не уходи, красивая,
Дорожкою росистою,
Ты осчастливь, счастливая,
Меня улыбкой чистою!

## Александр Решетов
## (1909 – 1971)

* * *

Я не люблю бумажные цветы
С их лживою красивостью бездушной.
И делать их, по-моему, не нужно:
Где нет души, там нет и красоты.

Не стал, да и не станет знаменит
Никто из тех, кто мастерит их честно.
Они в столовых портят аппетит,
Пыль собирая там, где ей не место.

Взор человека в звездном корабле
От их красивости не потеплеет.
Подснежник скромный больше и живее
В других мирах расскажет о земле.

Когда умру, ты мне простишь грехи,
Живой цветок на тихий холм положишь
И вспоминать не будешь те стихи,
Что на бумажные цветы похожи.

Ҡасан ғына осрашып,
Һинең нурлы күҙ ҡарашың
Күҙҙәремә бағыр икән?
Нурҙар булып тамыр икән?

Йәшел генә тар һуҡмаҡтан
Осоп атлап килгән саҡта,
Эйеп башаҡ ҡараштарын,
Ҡаршы ала арыштарым.

Һыҙылып таң атмайынса,
Ергә томан ятмайынса,
Осоп китмә һин, аҡҡошом,
Һин бит минең хаҡ яҙмышым.

Осоп китмә һин, аҡҡошом,
Ташлап китмә, хаҡ яҙмышым.
Сәскәндә һин ҡойма, муйыл,
Бәхетле ит мине быйыл!

## Александр Решетов
## (1909 – 1971)

### ҠАҒЫҘ СӘСКӘЛӘР

Енем һөймәй ҡағыҙ сәскәләрҙе,
Ялған матурлығын уларҙың.
Йәне юҡтың йәме бармы инде?
Тәме бармы аҡмаҫ һыуҙарҙың?

Кем һуң әле ҡағыҙ сәскә яһап,
Кинәнгән бер даны сығыуҙан?
Ашханала, аштың тәмен алып,
Йыйып тора бит ул саң-туҙан.

Йондоҙ карабында осҡондар ҙа
Уға ҡарап, янмаҫ ялҡында.
Ябай умырзая күберәк һөйләр
Ят донъяла ере хаҡында.

Гонаһтарым булһа, кисерерһең,
Тере сәскә һалып ҡәбергә,
Йырҙарымдың ҡағыҙҙарын түгел,
Ысындарын алып хәтергә.

## Александр Твардовский
## (1910 – 1971)

### ЛЕНИН И ПЕЧНИК

*(Поэма)*

В Горках знал его любой,
Старики на сходку звали,
Дети — попросту, гурьбой,
Чуть завидят, обступали.

Был он болен. Выходил
На прогулку ежедневно.
С кем ни встретится, любил
Поздороваться душевно.

За версту — как шел пешком —
Мог его узнать бы каждый.
Только случай с печником
Вышел вот какой однажды.

Видит издали печник,
Видит: кто-то незнакомый
По лугу по заливному
Без дороги — напрямик.

А печник и рад отчасти, —
По-хозяйски руку в бок, —
Ведь при царской прежней власти
Пофорсить он разве мог?

Грядка луку в огороде,
Сажень улицы в селе, —
Никаких иных угодий
Не имел он на земле...

— Эй ты, кто там ходит лугом!
Кто велел топтать покос?! —
Да сплеча на всю округу
И поехал, и понес.

## Александр Твардовский
## (1910 – 1971)

### ЛЕНИН ҺӘМ МЕЙЕССЕ

*(Поэма)*

Уны бөтә Горка белде,
Ҡарттар килде саҡырып,
Ә балалар күрһә инде,
Шунда уҡ алды һырып.

Ауырый ул. Көн дә сыға
Саф һауала йөрөргә.
Ярата ул һәр юлсыға
Туҡтап сәләм бирергә.

Алыҫтан уҡ уны һәр кем
Атлауынан таныны.
Тик мейессе генә бер көн
Шундай хәлгә тарыны.

Күрә мейессе алыҫтан,
Күрә лә ҡарап тора:
Килә кемдер сабынлыҡтан
Юлһыҙ-ниһеҙ, туп-тура.

Ә ҡарт хатта бер аҙ шат та,
Таяна был бөйөргә:
Үҙ власы булған саҡта,
Ул бит хужа был ергә!

Бер түтәл һуған үҫтерҙе,
Ере булды бер ҡолас.
Шунан башҡа ни һуң бирҙе
Уға элекке власть!

— Эй, кем унда, болон буйлап,
Тапап йөрөй үләнде!
Кем ҡушты?!. — тип ҡарт, ҡыйҡыулап,
Теҙҙе фәлән-төгәнде...

Разошелся.
А прохожий
Улыбнулся, кепку снял.
— Хорошо ругаться можешь, —
Только это и сказал.

Постоял еще немного,
Дескать, что ж, прости, отец.
Мол, пойду другой дорогой...
Тут бы делу и конец.

Но печник — душа живая, —
Знай меня, не лыком шит! —
Припугнуть еще желая:
— Как фамилия? — кричит.

Тот вздохнул, пожал плечами,
Лысый, ростом невелик.
— Ленин, — просто отвечает.
— Ленин! — Тут и сел старик.

День за днем проходит лето,
Осень с хлебом на порог,
И никак про случай этот
Позабыть печник не мог.

А по свежей по пороше
Вдруг к избушке печника
На коне в возке хорошем
Два военных седока.

Заметалась беспокойно
У окошка вся семья.
Входят гости:
— Вы такой-то?
Свесил руки:
— Вот он я...

— Собирайтесь! —
Взял он шубу,
Не найдет, где рукава.

Ҡыҙҙы яман.
Ә тегеһе,
Йылмайып, башын һалды:
— Яҡшы әрләшә беләһең! —
Тип кенә әйтә алды.

— Ярай, атай, юлды борам,
Кисер, ғәфү үтенәм, —
Тигән булып, китмәй тора,
Бөтә бәлә үҙенән...

Ә мейессе ҡунып бара,
(Ул — был түгел, ныҡ тора!)
Ҡурҡытып та алмаҡ булып:
— Фамилияң? — тип ҡысҡыра.

Теге пеләш уйға ҡала.
Көрһөнә, яурын тартып.
— Ленин, — тип ул әйтеп һала.
— Ленин? — тип сүгә ҡартың...

Йәмле йәйҙә үтеп китеп,
Көҙ ҙә килеп терәлде.
Тик мейессе нисек итеп
Онотһон һуң был хәлде?..

Ҡырпаҡ ҡарҙа яҡшы атта
Ҡапыл бына бер сакты,
Ике хәрби килеп туҡтай
Ҡапҡа төбөнә ҡарттың.

Шығыр-шығыр — тышта йәш ҡар,
Шып-шым — бөтә өй эсе.
Килеп тә инә ҡунаҡтар:
— Кем бында, — тип, — мейессе?

— Бына... мин... — тип ҡарт ҡалтырай,
— Әйҙәгеҙ! — тиҙәр уға.
Тунын ала, еңен тапмай,
Тартҡылай уңға-һулға...

А жена ему:
— За грубость,
За свои идешь слова...

Сразу в слезы непременно,
К мужней шубе — головой.
— Попрошу, — сказал военный, —
Ваш инструмент взять с собой.

Скрылась хата за пригорком.
Мчатся санки прямиком.
Поворот, усадьба Горки,
Сад, подворье, белый дом.

В доме пусто, нелюдимо,
Ни котенка не видать.
Тянет стужей, пахнет дымом, —
Ну овин — ни дать ни взять.

Только сел печник в гостиной,
Только на пол свой мешок —
Вдруг шаги, и дом пустынный
Ожил весь, и на порог —

Сам, такой же, тот прохожий.
Печника тотчас узнал.
— Хорошо ругаться можешь, —
Поздоровавшись, сказал.

И вдобавок ни словечка,
Словно все, что было, — прочь.
— Вот совсем не греет печка.
И дымит. Нельзя ль помочь?

Крякнул мастер осторожно,
Краской густо залился.
— То есть как же так нельзя?
То есть вот как даже можно!..

Сразу шубу с плеч — рывком,
Достает инструмент. — Ну-ка... —
Печь голландскую кругом,
Точно доктор, всю обстукал.

Ҡарсығы ла — нәҡ өйөрсөк!
Ҡартына ярҙамлашып:
— Тупаҫлығың, телең өсөн
Китә, — ти, — наҙан башың...

Улай, етем ҡалабыҙ, тип,
Тунға тама күҙ йәше.
— Инструмент та алығыҙ, — тип
Иҫкәртә хәрби кеше.

Тау артында ҡалды ауыл,
Елдерә ат туп-тура.
Инде бына Горкала ул,
Бына баҡса, йорт тора.

Буш, аулаҡ йорт, һис тоймаҫлыҡ
Йән эйәһе йәшәүен.
Үҙе һыуыҡ, үҙе ыҫлы, —
Торғаны бер буш әүен!

Тоҕон ҡуйҙы ла ҡарт шунан,
Ҡатты ултырған көйгә.
Ҡапыл аяҡ тауышынан
Йән кереп китте өйгә.

Ни күҙе менән күрһен ҡарт!
Тупһала — ул! Тап үҙе:
— Уҙ, иҫке дуҫ, шатмын, бик шат! —
Ҡул биреп әйтте һүҙен.

Артыҡ бер һүҙ ҡушманы һис,
Үткән эш хәс күргән төш!
— Йылытмай, — ти, — бына мейес,
Үҙе төтәй, ниҙә эш?

Ярҙам итеп булмаҫмы һуң?
Ә ҡарттың күңел тула:
(Күңел бит ул — тулмаҫмы һуң?)
— Булмай ҡайҙа — бик була!..

Шунда уҡ тунын ырғытып,
Ҡулға алды ҡоралын.
Йә, тип, мейесте уратып,
Туҡылдатып ҡараны.

В чем причина, в чем беда
Догадался — и за дело.
Закипела тут вода,
Глина свежая поспела.

Все нашлось — песок, кирпич,
И спорится труд, как надо.
Тут печник, а там Ильич
За стеною пишет рядом.

И привычная легка
Печнику работа.
Отличиться велика
У него охота.

Только будь, Ильич, здоров,
Сладим любо-мило,
Чтоб, каких ни сунуть дров,
Грела, не дымила.

Чтоб в тепле писать тебе
Все твои бумаги,
Чтобы ветер пел в трубе
От веселой тяги.

Тяга слабая сейчас —
Дело поправимо,
Дело это — плюнуть раз,
Друг ты наш любимый...

Так он думает, кладет
Кирпичи по струнке ровно.
Мастерит легко, любовно,
Словно песенку поет...

Печь исправлена. Под вечер
В ней защелкали дрова.
Тут и вышел Ленин к печи
И сказал свои слова.

Он сказал, — тех слов дороже
Не слыхал еще печник:
— Хорошо работать можешь,
Очень хорошо, старик.

Сәбәп низә, бәлә низә —
Һә тигәнсе төшөнә.
Һыу ҡайната, балсыҡ изә,
Күҙ эйәрмәй эшенә.

Кирбес тә бар, ҡом да булды —
Бөтәһе лә табылды.
Һылай, һыйпай оҫта — бында,
Унда — Ильич яҙынды.

Күнегелгән, йән һөйгән эш —
Геүләп торор мейесе.
Бик яҡшы үтәргә тейеш
Ильичтың үтенесен.

«Тик һин, Ильич, сәләмәт бул,
Эш беҙҙә тороп ҡалмаҫ,
Ниндәй утын тыҡһаң да ул,
Яныр мейес, ыҫланмаҫ.

Йылыла ғына яҙылһын
Һинең бар ҡағыҙҙарың.
Торбала ел йырлап торһон
Күңелле, шат йырҙарын.

Тартыуы хөрт икән хәҙер,
Был эш ул — төҙәтерлек,
Бер төкөрһәң — була әҙер,
Түгел «эш» тип әйтерлек!..»

Шуны уйлап, кирбес теҙә,
Ҡылға теҙеп һалғандай.
Бар күңелен биреп биҙәй,
Эшләй ул йырлағандай.

Мейес әҙер. Инде кисен
Ленин сыҡты ла үҙе,
Күреп геүләгән мейесен,
Әйтте әйтәһе һүҙен.

Шунан ҡиммәт, шунан йомарт
Маҡтау һүҙе юҡ ине:
— Яҡшы эшләй беләһең, ҡарт,
Хатта бик яҡшы! — тине.

И у мастера от пыли
Зачесались вдруг глаза.
Ну а руки в глине были —
Значит, вытереть нельзя.

В горле где-то все запнулось,
Что хотел сказать в ответ,
А когда слеза смигнулась,
Посмотрел — его уж нет...

За столом сидели вместе,
Пили чай, велася речь
По порядку, честь по чести,
Про дела, про ту же печь.

Успокоившись немного,
Разогревшись за столом,
Приступил старик с тревогой
К разговору об ином.

Мол, за добрым угощеньем
Умолчать я не могу,
Мол, прошу, Ильич, прощенья
За ошибку на лугу.

Сознаю свою ошибку...
Только Ленин перебил:
— Вон ты что, — сказал с улыбкой, —
Я про то давно забыл...

По морозцу мастер вышел,
Оглянулся не спеша:
Дым столбом стоит над крышей,
То-то тяга хороша.

Счастлив, доверху доволен,
Как идет — не чует сам.
Старым садом, белым полем
На деревню зачесал...

Не спала жена, встречает:
— Где ты, как? — душа горит...
— Да у Ленина за чаем
Засиделся, — говорит...

Күнмәгән ҡарт маҡталырға,
Кинәт күҙе ҡысыта...
Тиҙ генә һөртөп алырға —
Ҡулдары шул балсыҡта!

Яуап итеп әйтер һүҙе
Тамағына төйөлдө.
Йәше бөтөп, асһа күҙен —
Алдында ул юҡ инде...

Гәпләшеп донъя хаҡында,
Һәм онотмай мейесте,
Ултырып өҫтәл артында,
Улар бергә сәй эсте.

Тынысланғас бер аҙ шунда,
Ҡыҙып алғас саҡ ҡына,
Башҡа нәмә тураһында
Һүҙ башлай ҡарт һаҡ ҡына.

Әйтмәйенсә булмай, имеш,
Һый-хөрмәтең алдында:
— Теге ваҡыт — кисер, Ильич, —
Хаталандым болонда.

Таныйым үз ғәйебемде...
Көлә Ильич шул саҡта:
— Бына һин ни?.. Ә мин инде
Онотҡанмын ул хаҡта...

Сыға оҫта. Һалҡынса төн.
Ҡарап ала өй башын:
Бына нисек үрләй төтөн,
Тартыуы булғас яҡшы!

Ҡарт ҡәнәғәт. Уйын уйлап,
Һиҙмәй ҡарҙы, таҡырҙы,
Баҡса буйлап, ялан буйлап,
Ауылына һыпырҙы...

Ҡарсыҡ ҡаҡмаған керпек тә:
— Ҡайҙа булдың? Йә, нисек?
— Оҙаҡ ултырып киттек тә
Ленин менән сәй эсеп...

## Борис Ручьев
## (1913 – 1973)

* * *

Если долго нет известий,
дни, недели и года,
самым сердцем с жизнью вместе
береги меня всегда.

Если, вспомнив между прочим,
люди спросят обо мне,
поспокойней, покороче
ты скажи им: — На войне...

Если пища станет горькой,
день тоскливей, ночь грустней,
на минутку перед зорькой
ты встречай меня во сне.

Если бой тебе приснится,
бой кровавый, смертный бой,
разомкни скорей ресницы
и припомни голос мой.

Если в праздник на пирушке
посоветуют: — Забудь...
Ты не трогай с пивом кружки,
песни пой и трезвой будь.

Если вьюга-непогода
в ночь завьется до утра, —
пособи мне мимоходом
обогреться у костра.

Если голод ты знавала —
пожелай мне в час еды
долгожданного привала,
хлеба, соли и воды.

## Борис Ручьев
## (1913 – 1973)

* * *

Көндәр, айҙар, йылдар буйы
булмаһа ла хәбәрем,
һаҡла мине йөрәгеңдә
аҡтыҡ көнгә ҡәҙәрем.

Һорашһалар мине әгәр,
иҫкә алып һүҙ ыңғай,
тынысыраҡ тот үҙеңде,
«Һуғышта...», тиң, күп һүҙмай.

Аш бармаһа тамағыңа,
эш бармаһа эшеңдә,
саҡ ҡына һин таң алдынан
күреп һөйләш төшөңдә.

Ә төшөңә һуғыш керһә,
күрһәң ҡанлы алышты,
ас та тиҙерәк күҙҙәреңде,
ишет минең тауышты.

Әгәр байрам табынында:
«Онот уны!..» тиһәләр,
һин йыр йырла, салт айыҡ бул,
эс, тип, шарап бирһәләр.

Төнө буйы буран булһа,
йонсоу булһа, — ул саҡта
ярҙам итешкән бул миңә
йылынырға усаҡта.

Булһа аслыҡ татығаның,
ашар мәлдәр еткәндә,
икмәк, тоҙ, һыу телә миңә,
арып ялдар иткәндә.

Если гром сосну расколет,
дождь затопит все пути, —
повели мне в чистом поле
куст калиновый найти.

Если я паду в дороге, —
я почувствую в крови
все заботы и тревоги
и желания твои.

Пересиливая муку
в полудреме и в бреду,
положу на сердце руку,
тихо встану и пойду.

## Константин Симонов
## (1915 – 1979)

* * *

Жди меня, и я вернусь.
Только очень жди,
Жди, когда наводят грусть
Желтые дожди.
Жди, когда снега метут,
Жди, когда жара,
Жди, когда других не ждут,
Позабыв вчера.
Жди, когда из дальних мест
Писем не придет,
Жди, когда уж надоест
Всем, кто вместе ждет.

Жди меня, и я вернусь,
Не жалей добра
Всем, кто знает наизусть,
Что забыть пора.
Пусть поверят сын и мать
В то, что нет меня,
Пусть друзья устанут ждать,
Сядут у огня,

Йәшен ярһа ҡарағайҙы,
ҡойоп ямғыр яуғанда,
берәй ҡыуаҡ табырға ҡуш
шыҡһыҙ ҡола яланда.

Хәлдән тайып, ятып ҡалһам,
үтмәй үтер юлымды,
йәнем тойор бар хәстәрен,
бар йылыһын ҡулыңдың.

Серем итәм, һаташаммы,
бар үлемдән үтермен,
йөрәгемдә ҡыҫып тороп,
ҡалҡыныр ҙа... китермен.

## Константин Симонов
## (1915 – 1979)

### КӨТ МИНЕ

Көт һин мине, мин ҡайтырмын,
Тик өҙөлөп көт мине,
Көт быҫҡаҡ ямғыр яуһа ла,
Һағыш баҫһа ла һине.
Көт, бурандар көрт өйһә лә,
Көт, булһа ла көн эҫе,
Көт, бүтәндәр көтмәһә лә,
Онотоп ғәзиз төҫөн.
Көт, алыҫ-алыҫ ерҙәрҙән
Килмәһә лә хаттарым,
Көт, бүтәндәр көтөк булып
Тотмаһа ла анттарын.
Көт һин мине, мин ҡайтырмын,
Һайраһа ла башҡалар:
Оноторға ваҡыт, тиеп,
Иш түгел һиңә улар!
Улым, әсәм ышанһа ла
Иҫән-һау булмауыма,
Дуҫтар көтөп ялыҡһа ла,
Ултырып ут янына,
Әсе хәмер эсһәләр ҙә,

Выпьют горькое вино
На помин души...
Жди. И с ними заодно
Выпить не спеши.

Жди меня, и я вернусь,
Всем смертям назло.
Кто не ждал меня, тот пусть
Скажет: — Повезло.
Не понять, не ждавшим им,
Как среди огня
Ожиданием своим
Ты спасла меня.
Как я выжил, будем знать
Только мы с тобой, —
Просто ты умела ждать,
Как никто другой.

## Вадим Шефнер
## (1915 – 2002)

### БЕРКУТ

...Нам ни о чем грустить не надо, —
Войдя, как в детство, в зоосад,
Мы с посетителями сада
Бредем куда глаза глядят.

Но все воспоминанья меркнут,
И поневоле грустно всем
Там, где насупившийся беркут
На груду каменную сел.

Он полон грузного бессилья,
И сразу не поверишь ты,
Что ощущали эти крылья
Блаженный холод высоты.

И пусть за проволокой тонкой
Есть небо, горы и пески, —
Глаза, задернутые пленкой,
Полны презрительной тоски.

Иҫтәлеккә күсергә,
Һин көт мине. Улар менән
Ашыҡма һин эсергә.

Көт һин мине, мин ҡайтырмын,
Бар үлемгә үс итеп.
Көтмәгәндәр генә әйтер,
Был көҙрәттең көсө, тип...
Көтмәгәндәр аңлай алмаҫ,
Ҡайҙан алһын ул аңды —
Көтөүҙәрең менән мине
Уттан тартып алғанды.
Ҡалай иҫән ҡалғанымды
Һин дә үҙем белермен.
Һин бит бер кем көтмәгәнсә
Көтә белдең, тиермен.

## Вадим Шефнер
## (1915 – 2002)

### СИТЛЕКТӘГЕ БӨРКӨТ

Тамсы һағыш та юҡ ине әле
Ингән саҡта зообаҡсаға.
Балалыҡҡа кире ҡайтҡан һымаҡ,
Ғәмһеҙ йөрөй инек бығаса.

Ситлектәге таштар өйөмөндә
Күргәс тә бер бойоҡ бөркөттө,
Ҡапыл һүнеп ҡалды бер хәтирә,
Бар шатлығын күңел өркөттө.

Ниндәйҙер бер ауыр меҫкенлек бар
Ҡарашында, — һүнгән ялҡыны.
Әйтерһең, был ғорур ҡош батшаһы
Татымаған күктәр һалҡынын.

Булһа ла бит — тимер сым эсендә —
Тау-таштары, ҡомо, күктәре,
Һары һағыш баҫҡан күҙе менән
Ул екһенеп күҙләй күптәрҙе.

## ПОДРАЖАНИЕ АНГЛИЙСКОМУ

«Скорее станет сушь водой
И мгла сойдет за свет,
Луна покажется звездой
И утвержденьем "нет",
На камне вырастут цветы,
И крылья обретут кроты, —
Чем мы расстанемся с тобой», —
Так говорила ты.
На камне не растут цветы,
В земле по-прежнему кроты —
Не надо крыльев им.
И только ты,
И только ты
Отчалила с другим.
Вода — по-прежнему вода,
Луной — луна,
Звездой — звезда,
И мглою — мгла,
И светом — свет
Остались навсегда.

И лишь тебя со мною нет,
И в этом вся беда.

## ВЕСЕННИЙ ДОЖДЬ

Дождя серебряные молоточки
Весеннюю выстукивают землю,
Как миллион веселых докторов.
И мир им отвечает:
«Я здоров!»...

## КОЛОДЦЫ ПУСТЫНИ

Я пил из колодцев пустыни,
Воды я не помню вкусней,
Хоть, кажется, горечь земная
Изрядно подмешана к ней.

* * *

«Әгәр ҙә беҙ бер ташлашыр булһаҡ,
Һыуға әйләнер бынау ҡоро ер,
Тулған ай ҙа йондоҙ булып ҡалыр,
Был донъяла аҡ төҫ ҡарайыр.

Ташты, Хоҙай, гөлгә әйләндер ҙә
Һуҡыр сысҡанға бир ҡанатты!..»
Шулай ант иткәйнең бер заман һин,
Онотмайым һаман шул антты.

Таштар ҙа һис гөлгә әйләнмәне,
Һуҡыр сысҡан һаман ер өңә.
Тик һин генә бары,
Тик һин генә
Китеп барҙың бүтән йәреңә.

Һыу һаман — һыу,
Ай ай көйө ҡалды,
Йондоҙ булып ҡалды йондоҙҙар.
Тик бер бәлә шунда:
Һин юҡ янда,
Ҡыҙ көйөнсә ҡалмай тик ҡыҙҙар.

## ЯҘҒЫ ЯМҒЫР

Ямғыр көмөш сүкештәре менән
Сүкеп ҡарай ерҙе:
«Йәсе, әйт,
Хәлең нисек?» — тигән доктор һымаҡ.
Донъя яуап бирә:
«Мин, — ти, — сәләмәт».

## СҮЛ ҠОҘОҒО

Һыу эскән бар сүлдәр ҡоҙоғонан.
Булһа ла ул тоҙло, татырлы,
Шул һыуҙан да татлы һыу белмәйем,
Тәмен телдә тәйән татырлыҡ.

Но в этом волнистом просторе,
Где ни колеи, ни следа,
Такой драгоценной и чистой
Казалась мне эта вода!

Из ржавой консервной жестянки,
С обросшим и жадным лицом,
Напиток богов и верблюдов
Я пил, позабыв обо всем.

Из водопроводного крана
Струя холодна и вкусна,
В ней горечи привкуса нету,
Да только не та ей цена.

Кто пил из далеких колодцев,
Навеки запомнил одно:
Чем счастье трудней достается,
Тем сердцу дороже оно.

## ДЕТСТВО

Ничего мы тогда не знали,
Нас баюкала тишина,
Мы цветы полевые рвали
И давали им имена.

А когда мы ложились поздно,
Нам казалось, что лишь для нас
Загорались на небе звезды
В первый раз и в последний раз.

...Пусть не все нам сразу дается,
Пусть дорога жизни крута,
В нас до старости остается
Первозданная простота.

Ни во чьей (и не в нашей) власти
Ощутить порою ее,
Но в минуты большого счастья
Обновляется бытие,

Тулҡын-тулҡын көйгән киңлектәрҙә,
Әҙәм эҙе, юлдар юҡ ерҙә
Сарсап килеп һыуһын ҡанғандарҙы
Онотаһым түгел ғүмерҙә.

Һаҡал баҫҡан ҡомһоҙ йөҙөм менән,
Тутыҡ ҡалайҙы мин ныҡ тотоп,
Алла һәм дөйәләр эсемлеген
Эстем, бар донъямды онотоп.

Ҡалаларҙа торбаларҙан аҡҡан
Һыу бик татлы, үҙе бик һалҡын.
Тик сүлдәрҙә арып, йонсоп тапҡан
Тоҙло һыуҙың хаҡы мең алтын!

Тәмен уның тик бер татығандар
Хәтерендә тота ғүмергә:
Бәхет ҡалай ҡыйыныраҡ килһә,
Ҡәҙерлерәк шулай күңелгә.

## САБЫЙ САҠ

Ул саҡта беҙ бер ни белмәй инек,
Белә инек бары уйнарға.
Беҙ яландың сәскәләрен өҙҙөк,
Мең ҡушамат таҡтыҡ уларға.

Ә йоҡларға яткас һуңға ҡалып,
Күк йөҙөндә күпме йондоҙ бар,
Бөтәһе лә беҙҙең өсөн генә
Баҙлағандай ине бит улар.

...Көткән һәр ни шундуҡ килмәһә лә,
Күп булһа ла юлдар сатлығы,
Сал ҡунғанса беҙҙә тороп ҡала
Сәскә һымаҡ сабый сафлығы.

Бер кемдең дә (һәм беҙҙең дә) ҡай саҡ
Тойоу уны түгел иркендә.
Тик донъяға яңынан тыуған һымаҡ,
Иң бәхетле булған бер көндә —

И мы вглядываемся в звезды,
Точно видим их в первый раз,
Точно мир лишь сегодня создан
И никем не открыт до нас.

И таким он кажется новым
И прекрасным не по летам,
Что опять, как в детстве, готовы
Мы дарить имена цветам.

### ЛИЧНЫЙ ВРАГ

Не наживай дурных приятелей —
Уж лучше заведи врага:
Он постоянней и внимательней,
Его направленность строга.

Он учит зоркости и ясности, —
И вот ты обретаешь дар
В час непредвиденной опасности
Платить ударом за удар.

Но в мире и такое видано:
Добром становится беда,
Порою к дружбе неожиданно
Приводит честная вражда.

Не бойся жизни, но внимательно
Свою дорогу огляди.
Не наживай дурных приятелей —
Врага уж лучше заведи.

Йондоҙҙарға тағы бағабыҙ ҙа
Таң ҡалабыҙ, тәү ҡат күргәндәй,
Донъя, гүйә, — бөгөн яралғандай,
Асмағандай уны бер кем дә...

Ә ер шундай яңы, күркәм беҙгә,
Һанһыҙ йәш булһа ла был ергә.
Сабый саҡтағылай беҙ әҙербеҙ тағы
Сәскәләргә исем бирергә.

## ШӘХСИ ДОШМАН

Ялған-яман дуҫың күп булғансы,
Булһын берәй ысын дошманың.
Һағыраҡ та булыр ул, исмаһам,
Ҡылһа ҡалыр йәне ҡушҡанын.

Ул, күҙеңде асып, зирәгәйтер,
Зиһенеңде һинең эшләтер,
Көтөлмәгән хәтәр мәлдәреңдә,
Һаҡ булырға үҙе өйрәтер.

Шулай ҙа бит була был донъяла:
Яҡшы яғы еңеп ямандың,
Ҡайһы саҡта һиңә көтмәгәндә
Дуҫың яһап ҡуя дошманды.

Баш эймә һин, юлдарыңда һиңә
Гел яҡшылыҡ ишек асмаһа.
Ялған-яман дуҫың күп булғансы,
Бер дошманың булһын, исмаһам!

## Михаил Дудин
## (1916 – 1993)

### ИЗ КНИГИ «ТАТАРНИК»

* * *

Осколки былой панорамы
Из тьмы вылезают на вид.
В душе известкуются раны
Вчерашних потерь и обид.

Душа отдыхает, как пашня,
Чтоб семя принять через год.
И песня на шрамах вчерашних,
Как дикий татарник, растет.

* * *

Вчера ломал деревья ураган,
И, словно танки, громыхали тучи,
И озеро бежало к берегам
И расшибалось о седые кручи.

Сегодня — неземная благодать:
Прозрачно небо, неподвижны воды.
И как-то непривычно наблюдать
Блаженное спокойствие природы.

Земля, как истина, обнажена,
И вертится наперекор обману:
Великое рождает тишина,
Пришедшая на смену урагану.

## Михаил Дудин
## (1916 – 1993)

### «ШАЙТАН ТАЯҒЫ» КИТАБЫНАН

* * *

Уҙғандарҙың алыҫ осҡондары
Баҙлап сыға төндән был көндә.
Тик юғалтыу, әрнеү яралары
Төйөнләнә бара күңелдә.

Һөрөлгән ер орлоҡ һағынғандай,
Күңел изрәй, көсәп нур ғына.
Сән(е)скеле шайтан таяғындай,
Ыҙанында үҫә йыр ғына.

### ҒӘРӘСӘТТӘН ҺУҢ

Кисә генә дауыл ағастарҙы йыҡты,
Туптай гөрһөлдәште ҡара болоттар.
Күңел яллы тулҡын яуы ярға һуҡты,
Ә сал ҡая сөйҙө күбек ҡороҡтар.

Бөгөн инде йәннәт хозурлығы,
Күк зәп-зәңгәр, күле көмөш көҙгөләй,
Күреүе лә сәйер ерҙең был тынлығын,
Тик сиңерткә генә уны өҙгөләй...

Ер, хәҡиҡәт һымаҡ, асыҡ, йәйрәп ята,
Бар ялғанда еңгән төҫлө хис итеп.
Бөйөк хаҡлыҡ тыуа шулай был тынлыҡта
Бөтә ғәрәсәткә, гүйә, үс итеп!..

* * *

Не может быть, чтоб жили мы напрасно!

*О. Берггольц*

Ты — половина памяти моей.
И жизнь моя давно с твоей согласна.
Я, повторяя, присягаю ей:
Не может быть, чтоб жили мы напрасно.

Я не напрасно ставлю этот вздох
Над нашею судьбою как эпиграф.
И возникает вновь переполох
Весны и песни в пионерских играх.

Старинных лип медовая листва
Шумит над нами бурей через годы
Всей прелестью земного естества
На празднике обманчивой природы.

Не весь еще собрали пчелы мед,
Но на листве заметней отсвет меди.
И журавлей осенний перелет
Еще не окончание трагедий.

К нам журавли вернутся по весне
И протрубят над нашей кровлей ночью.
И память сердца, словно в полусне,
Прошедший праздник повторит воочью.

И встанет вновь зеленая трава,
И соловьи опять зальются властно,
И ты забудешь горькие слова:
«Не может быть, чтоб жили мы напрасно».

Пускай их скажет кто-нибудь о нас
И «мы» на «вы» заменит благодарно.
...Скворцы галдят на липах битый час
И, видишь, разлетаются попарно.

## ЗАМАНДАШҠА

«Ғүмеребеҙ сая булһа булыр,
Мөмкин түгел зая булыуы!»

*Ольга Берггольц*

Һин — яртыһы йөрәк хәтеремдең,
Тормошобоҙ күптән ауаздаш.
Анты булһын йәнә бәғеремдең:
Бушҡа йәшәмәнек, замандаш!

Был аһынды беҙҙең ҙур яҙмышҡа
Кереш итеп юкҡа ҡуйманым.
Ҡайтһам да мин ҡат-ҡат ул һағышҡа,
Яҙ наҙынан һаман туйманым.

Бөтә күрке булып йәш саҡтарҙың,
Тәбиғәттең фани шауындай,
Ҡарт йүкәнең баллы япраҡтары
Йылдар аша шаулай, дауылдай.

Йыйып бөтмәй балын бал ҡорттары,
Ә япраҡта — көҙҙөң баҡыры.
Тик торнаның һуңғы торройоҡтары
Түгел әле ғүмер ахыры...

Киткән ҡоштар тағы ҡайтыр яҙын,
Баш осонда канат ҡағырҙар.
Хәс төштәге ише, йәшлек наҙын,
Байрамдарын алып ҡайтырҙар.

Тағы ҡалҡыр ерҙә күгүләндәр,
Һандуғастар алыр әсиргә.
Зая булмаҫ ут-һыу кискән көндәр,
Ашыҡмайыҡ күҙ-йәш эсергә...

Әйтһә әйтһен уны тик йәш дуҫтар,
Башын эйеп беҙҙең ғүмергә.
Сыр-сыу килә, күрсе, сыйырсыҡтар,
Уҙаҡлашып осоп китергә...

## ЧИТАЯ ДОКУЧАЕВА

Бескрайняя печаль седой полыни
В колючих иглах высохших осот.
И знает мир от века и поныне,
Что выше Правды в мире нет высот.

Кончается действительности смета.
Возможности исчерпаны до дна.
Что гибнет там, душа или планета?
Не все ль равно — трагедия одна!

Но нет конца. Опять росток, брезгливо
Оглядываясь, лезет напоказ.
Трагедия обходится без грима —
Прекрасное прекрасно без прикрас.

## ВОСПОМИНАНИЕ О ПРОЩАНИИ С КОСМОНАВТАМИ

На Красной Площади 3 июля 1971 года

Слепая гроза не грозила,
Грозы не настала пора.
Над площадью Красной сквозила
Полдневного солнца жара.

Жара, как свинцовое лихо,
Как обморок страха в бреду.
И падали женщины тихо,
Без крика, в переднем ряду.

А там по рядам нелюдимо
Безмолвие сгорбленных плеч.
И музыка скорбная — мимо,
И мимо прощальная речь.

Я тоже, не чувствуя тела,
Стоял у Кремлевской стены
И в горе не видел предела
Сознания общей вины.

## ДОКУЧАЕВТЫ УҠЫҒАНДА

Икһеҙ-сикһеҙ сал әремдең һағышын
Билсән генә баҫып үҫкән ярышып...
Тик кешегә ерҙә борон-борондан
Үҙ хаҡлығы иң хөрмәтле урында.

Әмәлен тап, кешем: ерең — гүр генә,
Аҡтыҡ көсөн биреп тынған бергенәң.
Ирме үлә, ерме — китһә бәрәкәт?
Ни булһа ла — бары бер үк һәләкәт!

Тик юҡ ахырызаман! Күрсе, күр, тағы:
Йәш үҫенте көнгә һуҙған ҡыяғын.
Фажиғәләр йөҙләк кеймәй ятырлыҡ,
Гүзәл ләкин биҙәкһеҙ ҙә матурлыҡ.

## 1971 ЙЫЛДЫҢ 3 ИЮЛЕНДӘ

Ҡыҙыл майҙанда космонавтар менән хушлашыу иҫтәлеге

Йәшен йәшнәп, күк тә күкрәмәй,
Дәжжәл ҡубып, ер ҙә тетрәмәй.
Тик барыһын Ҡыҙыл майҙанда
Аяҙ көндә йәшен атҡандай...

Яуҙырамы әллә ҡарғышын? —
Ҡояш ҡоя ҡайнар ҡурғашын.
Ҡатын-ҡыҙҙар, өнһөҙ һығылып,
Алғы рәттә китә йығылып.

Тауҙай йөк һалғандай иңенә,
Башын эйгән бөтә илгенәм.
Оҙата ул ғәзиз улдарын,
Шаңламай ҙа матәм мондарын.

Мин дә, һиҙмәй үҙем-үҙемде,
Тештерема ҡыҫып түҙемде,
Саҡ-саҡ торам диуар алдында,
Уртаҡ ғәйеп тойоп аңымда.

Признания поздние розы,
Пронизанный солнцем кумач,
И сквозь материнские слезы
Ребенка пронзительный плач.

Молчания темные реки.
И где-то под сердцем в груди:
Прощайте... Прощайте навеки,
Вы так далеко впереди!

## СЛУШАЯ РАВЕЛЯ

Радиомаяки, по которым летчики прокладывали к Хиросиме курс самолета с атомной бомбой, передавали «Болеро» Равеля

На землю влажно и серо
Ложатся сумерки апреля.
Я вслушиваюсь в болеро,
Живу гармонией Равеля.

Мне музыка сейчас — сестрой.
И по таинственному знаку
А потом в свой сундук одного за другим уберет...

*В. Державин*

* * *

Вчера на кровлю шахского дворца
Сел ворон. Череп шаха-гордеца
Держал в когтях и спрашивал: «Где трубы?
Трубите шаху славу без конца!»

*И. Тхоржевский*

* * *

Когда плачут весной облака — не грусти,
Прикажи себе чашу вина принести.
Травка эта, которая радует взоры,
Завтра будет из нашего праха расти.

*Г. Плисецкий*

* * *

Я кувшин что есть силы о камень хватил.
В этот вечер я лишнего, видно, хватил.
«О несчастный! — кувшин возопил. — И с тобою
Точно так же поступят, как ты поступил!»

*Г. Плисецкий*

* * *

Үткәнгә үкенеп, ни файҙа, эй бәндә?
Үлсәмә бөгөндө иртәнге бизмәндә.
Үткән көн, килер көн түгел үҙ иркеңдә,
Был көнгә инан да шат булсы был мәлдә.

*1975*

* * *

Беҙ — тыңлаусан ҡурсағы тик Тәңребеҙҙең,
Әйтәм быны бәсен белеп һәр бер һүҙҙең.
Ул сәхнәлә уйната ла һандығына
Тығып ҡуя, киткәс инде ҡәҙер беҙҙең!..

*1975*

* * *

Күрәм: ҡоҙғон ҡунған ҡала диуарына,
Һөрән һала, бер баш йомоп тырнағына:
«Эй, олуғ шаһ! Ҡайҙа борғо тауыштарың?
Ғәскәрең ник сапмай илдең бар яғына?»

*1975*

* * *

Көймә яҙын, ләлә йөҙөн йыуһа болот,
Берәй кәсә шарап йот та бар(ы)һын онот!
Иртәгә бит күҙ иркәләр үләнкәйҙәр
Ҡәбереңдән шытып сығыр булып мең ут.

*1975*

* * *

Бар көсөмә буш сүлмәкте атып бәрҙем!
Әллә был кис артығыраҡ эләктерҙем?..
«Эй, бисара! — тине сүлмәк, сәрпәкләнеп, —
Үҙеңә лә күрһәтерҙәр шул ҡәҙерҙе!..»

*1975*

* * *

Удивленья достойны поступки Творца!
Переполнены горечью наши сердца:
Мы уходим из этого мира, не зная
Ни начала, ни смысла его, ни конца.

*Г. Плисецкий*

* * *

Даже самые светлые в мире умы
Не смогли разогнать окружающей тьмы.
Рассказали нам несколько сказочек на ночь —
И отправились, мудрые, спать, как и мы.

*Г. Плисецкий*

* * *

Испивши вина среди нас, и гордец бы смягчился, —
Я увидел, как узел тугой от вина распустился.
И если бы выпил вина ненавистник Иблис,
Две тысячи раз человеку бы он поклонился.

*В. Державин*

* * *

Жизнь уходит из рук, надвигается мгла,
Смерть терзает сердца и кромсает тела.
Возвратившихся нет из загробного мира,
У кого бы мне справиться: как там дела?

*Г. Плисецкий*

* * *

Вместо розы — колючка сухая сойдет.
Черный ад — вместо светлого рая сойдет.
Если нет под рукою муллы и мечети —
Поп сгодится, и вера чужая сойдет.

*Г. Плисецкий*

***

Ғәжәп тә һуң был Хоҙайҙың ҡылғандары!
Йөрәгебеҙ әрнеү менән тулған бары:
Ни мәғәнәһен, ни ахырын, башын белмәй,
Китәбеҙ бит донъяһынан беҙ — ҡолдары!..

*1975*

***

Был донъяны ҡурсый алмай ҡараңғынан,
Иң-иң якты аҡылдар ҙа аҙарынған.
Әкиәттең һөйләгән дә бер-икеһен,
Беҙҙең һымаҡ, киткән әүен баҙарына.

*1975*

***

Ирей бит таш күңелдәр ҙә был хәмерҙең көсөнән,
Сиселмәҫтәй төйөндәр ҙә хәҙер күрҙем — сиселә.
Иблис үҙе әгәр унын бер йотомон эсһә лә,
Әҙәмгә баш эйер ине мең ҡәҙерҙең хисенән.

*1975*

***

Ғүмер үтә, йәшлек китә, ҡартлыҡ етә.
Үлем көтә, йәнде өтә, тәнде тетә.
Ә һуң теге донъяларҙа нисек икән?
Бер кем ҡайтмай, алйып бөтәм көтә-көтә!..

*1975*

***

Гөлө насип булмаһа — тамыры ла ярағән,
Ҡояш нуры булмаһа — күҙ нуры ла ярағән.
Әгәр шәйхе, һырҡаһы, ханаҡаһы булмаһа,
Ҡыңғырауы, сиркәүе, зуннары ла ярағән!..

*10/VI—75*

* * *

Всех, кто стар и кто молод, что ныне живут,
В темноту одного за другим уведут.
Жизнь дана не навек. Кто до нас уходили,
Мы уйдем; и за нами — придут и уйдут.

*В. Державин*

* * *

Тот избранный, кем путь познанья начат,
Кто в небе на Бураке мысли скачет,
Главой поник, познавши суть свою,
Как Небо, — и в растерянности плачет.

*В. Державин*

* * *

Был ли в самом начале у мира исток? —
Вот загадка, которую задал нам Бог.
Мудрецы толковали о ней, как хотели, —
Ни один разгадать ее толком не смог.

*Г. Плисецкий*

* * *

Ты сам ведь из глины меня изваял! — Что же делать мне?
Меня, словно ткань, ты на станке соткал. — Что же делать мне?
Все зло и добро, что я в мире вершу, ты Сам предрешил,
Удел мой Ты сам мне на лбу начертал! — Что же делать мне?

*В. Державин*

* * *

То, что судьба тебе решила дать,
Нельзя ни увеличить, ни отнять.
Заботься не о том, чем не владеешь,
А от того, что есть, свободным стать.

*В. Державин*

* * *

Ҡарт булһаң да, йәш булһаң да, йәшәү — шартлы:
Киткәндәр бит килгәндәр ҙә безгә саҡлы.
Бер кемгә лә мәңге түгел был донъялар, —
Бөтәһе лә килер, китер бер-бер артлы!..

*10/VI—75*

* * *

Был донъяны башлап таный белгән зат та,
Күктә фекер толпарында елгән саҡта,
Үҙ асылын асҡас үҙе, һыҡтап илай, —
Күк көмбәҙҙәй, башын ергә эйгән хатта!..

*10/VI—75*

* * *

Кем яралғы биргән һуң күк йомғағына?
Яуап тапсы Хоҙайҙың был йомағына!
Күпме аҡыл эйәләре баш ватмаһын, —
Һаҡал һелкеп, бары күҙен йомған ғына...

*1975*

* * *

Һин бит үҙең яратҡанһың йән-тәнемде! — Нишләйем һуң?
Һин тигәнсә был ғүмерем үтер инде. — Нишләйем һуң?
Яҡшылыҡмы-яманлыҡмы — ни ҡылһам да, эй Хоҙайым,
Маңлайыма һин яҙғанһың тәҡдиремде! — Нишләйем һуң?

*10/VI—75*

* * *

Өлөшөңә төшкән хәләл көмөшөңдө
Арттырыу ҙа, кәметеү ҙә — юҡ эш инде.
Булмағанға һис кенә лә үкенмәйсә,
Булғанынан ҡотолоп ҡуй өлөшөңдөң.

*11/VI—75*

***

Коль в роде отличишь моем ты признак родовой, саки,
То сто различий видовых возникнет пред тобой, саки.
Охотно отрекусь от них, а ты мне вдосталь дай вина,
И пусть я перестану быть тогда самим собой, саки!

*В. Державин*

***

И лица, и волосы наши красивы,
Вы, как кипарисы, стройны, горделивы.
И все же никак не могу я понять,
Зачем в цветнике у Творца возросли вы?

*В. Державин*

***

Кто губам прекрасным улыбку беспечную дал,
Кто в удел скорбящим печаль сердечную дал?
Пусть Он не дал нам счастья, — довольно с нас и покоя,
Ибо многим Он слезы и муку вечную дал.

*В. Державин*

***

Жаль, что впустую жизнь мы провели,
Что в ступе суеты нас истолкли.
О жизнь! Моргнуть мы не успели глазом —
И, не достигнув ничего, ушли.

*В. Державин*

***

Если сердце захочет свободы и сбросит аркан,
То куда же уйти ему, кравчий? Ведь мир — океан!
И суфий, как сосуд узкогорлый, — неведенья полный,
Если выпьет хоть каплю, — ей богу, окажется пьян.

*В. Державин*

* * *

Нәҫелемдән берәй ғиллә тапһаң, саҡый[*],
Һәр хәлемдә йөҙәр бәлә таҡһаң, саҡый,
Бөтәһенән ваз кисәм дә шарап эсәм, —
Мин түгел мин, үҙ-үҙемдән ҡасһам, саҡый!..

*11/VI—75*

* * *

Матурһығыҙ төҫкә-башҡа айҙай-көндәй,
Буй-һынығыҙ сәрүи йәки ҡына гөлдәй.
Тик шулай ҙа иҫем китә Тәңребеҙгә, —
Ник үҫтергән, киҫер булғас, ҡыуан елдәй?..

*11/VI—75*

* * *

Кем һылыуға ирен уйған йылмайыусан?
Кем ғәмлегә йөрәк ҡуйған һыҙланыусан?
Беҙгә бәхет бирмәһә лә, юҡтыр зыян, —
Бөтмәҫ ғазап, күҙ-йәш йыйған аҙмы инсан!

*11/VI—75*

* * *

Йәл түгелме, бер файҙаһыҙ беҙ ҡартайҙыҡ,
Таш килелә һыу төйгөсләп, хәлдән тайҙыҡ.
Күҙ асып күҙ йоморға ла өлгөрмәнек, —
Эй ғүмеркәй! — донъяһынан инде тайҙыҡ!..

*11/VI—75*

* * *

Тәндән ашһа, йәнем үҙен ҡайҙа атыр?
Дарья ташһа, ул да, саҡый, ярға ҡайтыр.
Тар сүлмәктәй, наҙан суфый йотһа ғына
Бер тамсынан ташып-шашып аунап ятыр.

*11/VI—75*

---

[*] Саҡый — көрәгәсе, аяҡсы.

* * *

Вся книга молодости прочтена,
Увяла жизни ранняя весна.
Где птица радости? Увы, не знаю,
Куда умчалась, где теперь она?

*В. Державин*

* * *

Месяц Дей уступает цветущей весне,
Книга жизни подходит к концу в тишине.
Пей вино, не горюй! Огорчения мира —
Яд смертельный, а противоядье в вине.

*В. Державин*

* * *

Ты коварства бегущих небес опасайся —
Нет друзей у тебя, а с врагами не знайся.
Не надейся на завтра, а сегодня живи —
Стать собою самим хоть на миг попытайся.

*В. Державин*

* * *

Защитник подлых — подлый небосвод
Свой путь стезей неправедной ведет.
Кто благороден — подл пред ним сегодня,
Кто подл — сегодня благороден тот.

*В. Державин*

* * *

Когда б скрижаль судьбы мне вдруг подвластна стала,
Я все бы стер с нее и все писал сначала.
Из мира я печаль изгнал бы навсегда,
Чтоб радость головой до неба доставала.

*В. Державин*

* * *

Йәшлек тигән китапты тиҙ уҡый һалдым,
Яҙғы көндәй йәшлектән тик һағыш ҡалды.
Йәшлек — ҡот шул. Иҫләмәйем килгәнен дә,
Ҡайҙа китеп, елғыуарың, ул юғалды?..

*12/VI—75*

* * *

Ҡыш айҙары үтеп, йәмле яҙ еткәндә,
Уҡып, ғүмер китабында наҙ бөткәндә,
Булма мәъюс, ҡой ҙа мәй эс, ҡайғырма һис,
Ҡайғы — ағыу, ә дауаһы — мәй икән дә!..

*12/VI—75*

* * *

Һаҡлана күр өйөрсөктәй яуыз күктән,
Был донъяла дошмандар күп, дуҫтар бөткән.
Үткәнеңдә онот, баҡма иртәгәңә, —
Бөгөн яңғыҙ йәшәй алһаң, шул да еткән!..

*12/VI—75*

* * *

Шаҡшыларҙы яҡлаусыһы был күк йөҙө,
Яҙыҡ юлдан әйләнгеләп йөрөй үҙе.
Кемдәр яҡшы — шулар уға шаҡшы бөгөн,
Ә шаҡшыны яҡшы итеп күрә үҙе.

*12/VI—75*

* * *

Булһа яҙмыш ҡәләмдәре үҙ ҡулымда,
Өр-яңынан яҙыр инем барыһын да:
Бар ҡайғыны ҡыуыр инем был донъянан, —
Түбәм күккә тейер ине шатлығымдан!..

*12/VI—75*

* * *

Что гнет судьбы? Ведь это всем дано.
Не плачь о том, что вихрем сметено.
Ты радостно живи, с открытым сердцем,
Жизнь не губи напрасно, пей вино!

*В. Державин*

* * *

О небо! Ты души не чаешь в подлецах!
Дворцы и мельницы, и бани — в их руках;
А честный просит в долг кусок лепешки черствой...
О небо, на тебя я плюнул бы в сердцах!

*В. Державин*

* * *

«В Шабане месяце не троньте винных чаш!
Не пейте и в Раджаб!» — гласит нам веры страж.
Шабан, Раджаб — пора Аллаха и Пророка?
Что ж — пейте в Рамазан. Уж этот месяц наш!

*В. Державин*

* * *

За мгновеньем мгновенье — и жизнь промелькнет...
Пусть весельем мгновение это блеснет!
Берегись, ибо жизнь — это сущность творенья,
Как ее проведешь, так она и пройдет.

*В. Державин*

* * *

Поглядите на мастера глиняных дел:
Месит глину прилежно, умен и умел.
Приглядитесь внимательней: мастер — безумец,
Ибо это не глина, а месиво тел!

*Г. Плисецкий*

* * *

Саки! Джамшида чаши лик твой краше,
Смерть за тебя отрадней жизни нашей.
И прах у твоих ног — свет глаз моих —
Светлей ста тысяч солнц в небесной чаше.

*В. Державин*

* * *

Төкөр яҙмышыңа! Онот ғәмдәреңде!
Үкенмә лә иҫләп үткән көндәреңде.
Йөрәгеңде ас та, наҙла, һөй йәреңде,
Мәйеңде эс, елгә осорма ғүмереңде!..

*13/VI—75*

* * *

Эй Тәңрем, ник яҡшының тик шаҡшыларға?
Бар зиннәтең, бар ҡиммәтең бит шуларға!..
Төкөрәм мин — ҡых, тфү! — был хаҡлығыңа,
Көлсәңде лә йәлләп биргәс яҡшыларға!..

*13/VI—75*

* * *

Эсмә тиҙәр, Рәжәп — изге айы Хоҙайҙың,
Шәғбаны ла ғәжәп ай-һай, артыҡ оҙайҙы!..
Ҡалһын улар, әйҙә, Аллаһ, Пәйғәмбәргә,
Беҙгә Рамаҙан шәп — буш итмәйек был айҙы!..

*13/VI—75*

* * *

Күҙ асып та өлгөрмәҫһең, ғүмер үтер,
Һәр мәлеңә үҙең һал һин йәйғор күпер.
Бел: донъяның төп асылы — ғәзиз ғүмер,
Ҡалай итһәң, ғүмер шулай үтеп китер.

*13/VI—75*

* * *

Ҡарағыҙсы һауыт-һаба оҫтаһына:
Тырыш та ул, башы ла бар, оҫта ғына.
Тик нығыраҡ ҡарағыҙсы — алйот таһа! —
Ата-баба көлөн һылай туҫтағына...

*13/VI—75*

* * *

Йөҙөң, Жәмшит кәсәһендәй, сибәр, саҡый,
Һинең өсөн йәнем фиҙа, ғүмер баҡый.
Һин тапаған саң да миңә күҙ нурындай,
Һәр бөртөгө ҡояштан да хәтәр балҡый.

*14/VI—75*

* * *

Если скажут, будто я пьян — я таков!
Если «безбожник», скажут «буян» — я таков!
Для этих — мудрец, для тех — отшельник, безумец,
А я такой, каким я дан. Я таков!

*И. Сельвинский*

* * *

Я спустился однажды в гончарный подвал,
Там над глиной гончар, как всегда, колдовал.
Мне внезапно открылось: прекрасную чашу
Он из праха отца моего создавал.

*Г. Плисецкий*

* * *

Черепок кувшина выше царства, что устроил Джам,
Чаша винная отрадней райской пищи Мариам.
Ранним утром вздохи пьяниц для души моей священней
Воплей всех Абу-Саида и молитв, что пел Адхам.

*В. Державин*

* * *

Беспечно не пил никогда я чистого вина,
Пока мне чаша горьких бед была не подана.
И хлеб в солонку не макал, пока не насыщался.
Я сердцем собственным своим, сожженным дочерна.

*В. Державин*

* * *

В мир пришел я, но не было небо встревожено.
Умер я, но сиянье светил не умножено.
И никто не сказал мне — зачем я рожден
И зачем второпях моя жизнь уничтожена?

*В. Державин*

* * *

Где польза, что придем и вновь покинем свет?
Куда уйдет уток основы наших лет?
На лучших из людей упало пламя с неба,
Испепелило их — даже дыма нет.

*В. Державин*

* * *

Әгәр мине бер эскесе, тип һанаһаң — мин шулай,
Аҙғын, ғашиҡ йә мәжүси, тип янаһаң — мин шулай.
Һөйләй бирһен теләгәнсә теләһә кем — эшем юҡ,
Үҙ-үҙемде мин беләмсе — нисек булһам, мин шулай!

*15/VI—75*

* * *

Төшөп кисә сүлмәксенең мин баҙына,
Ҡарап торҙом сихырына бер аҙ ғына.
Ҡапыл шунда аңлап ҡалдым яһағанын
Туҫтаҡтарын ата-бабам туҙанынан.

*15/VI—75*

* * *

Хөм ярсығы яҡшы мең Жәм дәүләтенән,
Мәй тамсыһы татлы Мәрйәм ниғмәтенән.
Иҫеректең аһы таңда яғымлыраҡ
Изге Сәит менән Әҙһәм хикмәтенән.

*15/VI—75*

* * *

Эскәнем юҡ шарап һыуын әҙәп итеп,
Эсһәм — эсәм хәсрәт ыуын сәбәп итеп.
Һыныҡ наным юҡ манғаным тоҙоғоҙға
Ҡурҡмайынса йөрәк итен ҡәбәп итеп...

*15/VI—75*

* * *

Был донъяға килеүемдән ниндәй файҙа?
Китеүемдән нур бөтөрмө ҡояш-айҙа?
Ниңә килеп, ниңә былай китеүемде
Әйтер икән кем генә һуң миңә ҡайҙа?

*15/VI—75*

* * *

Беҙҙең килеп-китеүҙәрҙән бармы файҙа?
Ғүмер ебен сорнай-һүтә кем һуң айҙа?
Күк ялҡыны күпме ирҙең күҙен өтөп,
Көл дә күмер итә, ә төтөнө ҡайҙа?

*16/VI—75*

* * *

Сей Караван-Сарай, где то и дело день
Спешит, как гостя гость, сменить ночную тень, —
Развалина хором, где шли пиры Джамшидов,
Гробница, что дает Бахрамам спящим сень.

*О. Румер*

* * *

Я смерть готов без страха повстречать,
Не лучше ль будет там, чем здесь, — как знать?
Жизнь мне на срок дана. Верну охотно,
Когда пора наступит возвращать.

*В. Державин*

* * *

О кравчий! Цветы, что в долине пестрели,
От знойных лучей за неделю сгорели.
Пить будем, тюльпаны весенние рвать,
Пока не осыпались и не истлели.

*В. Державин*

* * *

Доколь из-за жизненных бед свои сокрушать сердца?
Ты ношу печали своей едва ль донесешь до конца.
Увы! Не в наших руках твои дела и мои,
И здесь покориться судьбе не лучше ль для мудреца?

*В. Державин*

* * *

Загадок вечности не разумеем — ни ты, ни я,
Прочесть письмен неясных не умеем — ни ты, ни я.
Мы спорим перед некою завесой. Но час пробьет,
Падет завеса, и не уцелеем — ни ты, ни я.

*В. Державин*

* * *

Ты сердцу не ищи от жизни утоленья,
Где Джам и Кей-Кубад? Они — добыча тленья.
И вся Вселенная, и все дела Земли —
Обманный сон, мираж и краткое мгновенье.

*В. Державин*

* * *

Донъя тип атала был Каруанһарай,
Мең шаһтың ул ташлап киткән туйҙарылай.
Был көн менән төндөң сыбар кәшәнәһе,
Көл итергә мең Бахрамдай заттар һорай.

*16/VI—75*

* * *

Ҡурҡҡан бәндә түгелмен дә мин үлемдән,
Күрмәгәнем шәптер, бәлки, күргәнемдән?
Был ғүмеркәй тик бурысҡа бирелгән бит.
Ҡасып ҡалмам, ваҡыт еткәс, түләремдән...

*16/VI—75*

* * *

Эй саҡыйым! Әле балҡҡан гөл-үләндәр,
Аҙна үтмәй, кибеп ҡатҡан, бөлөнгәндәр!..
Эс мәйендә, өҙ гөлөңдө — беҙ ҙә инде
Буласаҡбыҙ йә шиңгән, йә өҙөлгәндәр...

*16/VI—75*

* * *

Ҡайғынан ҡаш күпме төймә, юҡ емеше,
Ҡайғы йөкмәп, моратына етмәй кеше.
Эш тормай шул һинең менән минең ҡулдан,
Ҡазаһына дана ирҙең күнеү — эше.

*16/VI—75*

* * *

Әжәл серен табалмай, гәп һатабыҙ — һин дә мин.
Был яҙыуҙы танымай, баш ватабыҙ — һин дә мин.
Гәпләшһәк тә әлегә был яғында пәрҙәнең,
Пәрҙә төшкәс, тын алмай, тик ятабыҙ — һин дә мин.

*17/VI—75*

* * *

Шатлыҡ эҙләп маташмасы — юҡ эш кенә!
Кәй-Ҡубад та, Жәм дә — тамсы өләш кенә!
Был донъяның һәм Йыһандың бөтә эше —
Бер мәл генә һәм алдаҡсы бер төш кенә!

*17/VI—75*

***

Неужто для отдыха места мы здесь не найдем?
Иль вечно идти нескончаемым этим путем?
О, если б надеяться, что через тысячи лет
Из чрева земли мы опять, как трава, прорастем!

*В. Державин*

***

Пускай кумира стан я обнимаю стройный,
Пусть влагу Хизрову глотаю в полдень знойный,
Пусть друг мне Иисус, а песельник Зохре, —
Веселья не найду, коль сердце неспокойно.

*О. Румер*

***

Словно мячик, гонимый жестокой судьбой,
Мчись вперед, торопись под удар, на убой.
Хода этой игры не изменишь мольбой, —
Знает правила тот, кто играет с тобой.

*Г. Плисецкий*

***

По книге бытия гадал я о судьбе.
Мудрец, скрывая скорбь душевную в себе,
Сказал: «С тобой — луна в ночи, как месяц, долгой,
Блаженствуй с ней! Чего еще искать тебе?»

*В. Державин*

***

Не бойся козней времени бегущего,
Не вечны наши беды в круге сущего.
Миг, данный нам, в веселье проведи,
Не плачь о прошлом, не страшись грядущего.

*В. Державин*

***

Боюсь, что в этот мир мы вновь не попадем,
И там своих друзей — за гробом — не найдем.
Давайте ж пировать в сей миг, пока мы живы,
Быть может, миг пройдет — мы все навек уйдем.

*В. Державин*

* * *

Ышанһамсы баш терәр ер табырыма,
Ышанһамсы теге донъя барлығына,
Мең йыл үткәс, тупрағымдан тағы тороп,
Ышанһамсы үлән булып ҡалҡырыма!

*17/VI—75*

* * *

Ҡосһам да мин яҡут иренле хур һылыуын,
Эсһәм дә мин, йөҙөм түгел, хызыр һыуын,
Йырсым — Зөһрә, Ғайса серҙәш булғанда ла,
Күңел бойоҡ, баҫалмаған хис-ярһыуын.

*17/VI—75*

* * *

Яҙмыш еле типкеләһә һине туптай,
Унға атыл, һулға атыл — белмә туҡтау.
Уйнаусыһы үҙе белгәс, етмәгәнме —
Ҡайҙа? Ниңә? Һорап торма, бул ҡамғаҡтай!
*17/VI—75*

* * *

Мин ғүмерем китабынан асырғас фал,
Көрһөндө лә былай тине бер аҡһаҡал:
«Ҡосағыңда айҙай йәрең бар сағында,
Йылға торош төн наҙын тик һин татып ҡал!..»
*17/VI—75*

* * *

Һис тә ҡурҡма фани донъя ҡайғыһынан,
Мәңге тормай, үтеп китә бар(ы)һы унан.
Был мәлендә шат үткәр ҙә иртәңә баҡ,
Үткәнгә тик үкенмәҫлек бул һуңынан!
*17/VI—75*

* * *

Был донъяға килешмәбеҙ бит тағы ла,
Тегендә лә күрешмәбеҙ бер табында.
Әйҙә, дуҫтар, иҫән саҡта гөр киләйек, —
Бәлки, иртән йөрөшмәбеҙ донъяһында!..
*18/VI—75*

* * *

Вот в чаше бессмертья вино — выпей его!
Веселье в нем растворено — выпей его!
Гортань, как огонь, обжигает, но горе смывает
Живое водою оно — выпей его!

*В. Державин*

* * *

Пусть в наших знаньях — изъян, в постулатах — обманы,
Полно томиться, разгоним сомнений туманы!
Лучше наполним широкую чашу вином,
Выпьем и веселы будем — ни трезвы, ни пьяны.

*В. Державин*

* * *

Зачем печалью сердечной мир отягчать?
Зачем заботой счастливый день омрачать?
Никто не знает, что нас потом ожидает,
Здесь нужно все нам, что можем мы пожелать.

*В. Державин*

* * *

С беспечным сердцем встречай рассвет и закат,
Пей с луноликой, утешь и сердце, и взгляд.
О друг, не время терзаться тщетной заботой,
Ведь из ушедших никто не вернулся назад.

*В. Державин*

* * *

Конечно, цель всего творенья — мы,
Источник знанья и прозренья — мы.
Круг мироздания подобен перстню,
Алмаз в том перстне, без сомненья, — мы.

*В. Державин*

* * *

Пей с мудрой старостью златоречивой,
Пей с юностью улыбчиво красивой.
Пей, друг, но не кричи о том, что пьешь,
Пей изредка и тайно — в миг счастливый.

*В. Державин*

* * *

Был кәсәлә — мәңгелектең эсемлеге, — эс әле!
Был донъяның күскән уға әселеге, — эс әле!
Яндырһа ла тамаҡты ул, аҡҡан һыуҙай, бер ҡайғыны
Йыуып алып китерлектер көсләлөгө, — эс әле!

*18/VI—75*

* * *

Булмаһа ла беҙҙә хаҡлыҡ, ғилем — байлыҡ,
Мөмкин түгел гел шикләнеп йәшәү айныҡ.
Иң яҡшыһы — ҡулдан кәсә төшөрмәйсә,
Айнымай ҙа, иҫермәй ҙә шат булайыҡ!..

*18/VI—75*

* * *

Ниңә һәр саҡ күңелдә ғәм арттырырға,
Хуш ваҡытты таш тирмәндә тарттырырға?
Алда ниҙәр көткәнлеген кем белә һуң,
Теләктәргә, мәйгә, йәргә арт борорға?

*18/VI—75*

* * *

Хуш күңелдән ҡаршы ал һин таңын-кисен,
Маһруй йәрҙәр, мәйҙәр менән ҡанһын хисең.
Бында саҡта һаклан юҡ-бар мәшәкәттән,
Унда киткәс, кем һуң ҡайтҡан, әйт бер исем?!.

*18/VI—75*

* * *

Был ғәләмдең маяҡ ташы, бейек тә — беҙ,
Аң-ғилемдең шишмә башы, бөйөк тә — беҙ!
Йыһан үҙе түңәрәк бер йөҙөк булһа,
Шул йөҙөктөң алмас ҡашы, әлбиттә, — беҙ!

*18/VI—75*

* * *

Эсһәң, эс һин алтын аҡыл ҡарттар менән,
Йә саф йәшлек, гөлдәй аҫыл заттар менән.
Тик әҙерәк, һирәгерәк, ҡыскырмай эс, —
Эс аҡылың юйылмаҫ шул шарттар менән.

*18/VI—75*

* * *

В одной руке цветы, в другой — бокал бессменный,
Пируй с возлюбленной, забыв о всей вселенной,
Покуда смерти смерч вдруг не сорвет с тебя,
Как с розы лепестки, сорочку жизни бренной.

*О. Румер*

* * *

На розах блистанье росы новогодней прекрасно,
Любимая — лучшее творенье Господне — прекрасна.
Жалеть ли минувшее, бранить ли его мудрецу?
Забудем вчерашнее! Ведь наше Сегодня — прекрасно.

*В. Державин*

* * *

Я болен, духовный недуг мое тело томит,
Отказ от вина мне воистину смертью грозит.
И странно, что сколько я не пил лекарств и бальзамов —
Все вредно мне! Только одно лишь вино не вредит.

*В. Державин*

* * *

Моей скорби кровавый ручей сотню башен бы снес,
Десять тысяч строений подмыл бы поток моих слез.
Не ресницы на веках моих — желоба дождевые,
Коль ресницы сомкну — от потопа бежать бы пришлось.

*В. Державин*

* * *

Мне Богом запрещено — то, что я пожелал,
Так сбудется ли оно — то, что я пожелал?
Коль праведно все, что Изед захотел справедливый,
Так значит, все — ложно, грешно, — то, что я пожелал.

*В. Державин*

* * *

Ты сегодня не властен над завтрашним днем,
Твои замыслы завтра развеются сном!
Ты сегодня живи! — если ты не безумен,
Ты не вечен, как все в этом мире земном.

*В. Державин*

* * *

Гөлдән дә саф йәрең барҙа яндарында,
Кәсә менән гөл төшмәһен ҡулдарынан.
Һиҙмәйһең дә, ҡапыл әжәл еле сығып,
Өҙөп китер, гөлдәй, ғүмер юлдарынан.

*18/VI – 75*

* * *

Ысыҡ ҡунған яҙғы гөлгә ни етә,
Сәрхәттәге наҙлы йөҙгә ни етә?
Үткән көндө битәрләүҙән файҙа юҡ, —
Онот уны! Һуң был көнгә ни етә?!.

*19/VI – 75*

* * *

Ауырыһам, йәнем тәнде һынағандай,
Эсмәй торһам, үлем инде янағандай.
Иң ғәжәбе — һәр дарыуҙан зыян ғына,
Тик мәй йотһам, күңелемә ял булғандай.

*19/VI – 75*

* * *

Күңелемдәге зар атылһа, шишмәләй атыр ине,
Күҙемдәге йәш йыйылһа, даръялай ятыр ине,
Һәр керпектән, улаҡ ише, ағыҙған ҡанлы йәшем,
Күҙем йомоп, керпек ҡаҡһам, туфандай ҡалҡыр ине!..

*19/VI – 75*

* * *

Теләмәгәс Тәңрең һинең теләгәнде,
Нисек күрмәк теләктәрең үтәлгәнде?
Үҙенең һәр теләгендә Ул хаҡ икән,
Бар(ы)һы нахаҡ, тимәк, минең көсәгәндең!..

*20/VI – 75*

* * *

Үҙ иркендә түгел бөгөн — киләсәк ул,
Уй-ниәтең елгә осоп китәсәк ул.
Ғаҡлың булһа, һәләк итмә был мәлеңде —
Ҡалған ғүмер мәңге түгел, үтәсәк ул.

*20/VI – 75*

* * *

Малая капля воды слилась с волною морской.
Малая горстка земли смешалась с перстью земной.
Что твой приход в этот мир и что твой уход означает?
Где эта вся мошкара, что толклась и звенела весной?

*В. Державин*

* * *

Хоть грешен и несчастен я, хоть мерзостен себе я сам,
Но не отчаиваюсь я, в кумирню не бегу к богам.
С похмелья полумертв с утра — встаю, иду я, как вчера,
К красавицам, в питейный дом, а не в мечеть, не в божий храм.

*В. Державин*

* * *

Друг, не тужи о том, чего уж нет,
Нам светит дня сегодняшнего свет.
Всем завтра предстоит нам путь безвестный
Вослед ушедшим за семь тысяч лет.

*В. Державин*

* * *

Для тех, кто искушен в коварстве нашей доли,
Все радости и все мученья не одно ли?
И зло, и благо нам даны на краткий срок, —
Лечиться стоит ли от мимолетной боли?

*О. Румер*

* * *

Мы чашей весом в ман печаль сердец убьем,
Обогатим себя кувшинами с вином.
Трикраты дав развод сознанью, знанию, вере,
На дочери лозы мы женимся потом.

*В. Державин*

* * *

Как странно жизни караван проходит.
Блажен, кто путь свой — весел, пьян проходит.
Зачем гадать о будущем, саки?
Дай мне вина! Ночной туман проходит.

*В. Державин*

* * *

Бер тамсынан һайыҡмаҫ һис даръя һыуы,
Бер саңынан байыҡмаҫ һис ер ябыуы.
Был донъяға һинең килеп-китеүең ни? —
Себендең тик осоп инеп зарланыуы!..

*20/VI—75*

* * *

Мин, бисара, батһам да мең гонаһына,
Ярҙам һорап, йүгермәйем Аллаһына.
Иртән тороп, мәхмүрҙән баш төҙәтәм дә
Тағы сабам ғишҡым йә мәй ханаһына.

*21/VI—75*

* * *

Эй дуҫҡайым, ҡыу башыңа төшөр ғәмде,
Ыҫҡындырма ҡулға төшкән ошо мәлде.
Иртәгә лә етәсәкһең әле ҡыуып,
Беҙҙән элек ете мең йыл йәшәгәнде!..

*22/VI—75*

* * *

Төшөнгәнгә был донъяның серҙәренә
Шатлығы ла, ҡайғыһы ла берҙәй нәмә.
Яҡшылыҡ та, яманлыҡ та берҙәй үткәс,
Ауырып та, дауалап та — ни мәғәнә?

*22/VI—75*

* * *

Башта бер мән кәсә менән эсәм ғәмде,
Унан ары бик ҡыҙҙыра төшһәң сәмде,
Аҡыл, ғилем, дингә өс ҡат талаҡ әйтеп,
Алам йөҙөм ҡыҙынан мин йәш бисәмде!

*22/VI—75*

* * *

Каруан төҫлө ғүмер ғәжәп үтеп бара,
Тик бәхетле — кем шат йәшәп, үтеп бара.
Эсмәйексе ҡиәмәт көн ғәмен, саҡый! —
Мәй килтерсе — төн дә бик шәп үтеп бара.

*23/VI—75*

* * *

В воздух бросило солнце блистающий утра аркан,
И над шариком в чаше раздумьем Хосров обуян.
Пей вино! Это клики любви во вселенной безмерной
Отзываются откликом: «Пей же, пока ты не пьян».

*В. Державин*

* * *

Огонь моей страсти высок пред тобой, — так да будет!
В руках моих — гроздий сок огневой, — так да будет!
Вы мне говорите: «Раскайся, и будешь прощен!»
А если не буду прощен, будь что будет со мной! — Так да будет!

*В. Державин*

* * *

Кумир мой — горшая из горьких неудач! —
Сам ввергнут, но не мной, в любовный жар и плач.
Увы, надеяться могу ль на исцеленье,
Раз тяжко занемог единственный мой врач?

*О. Румер*

* * *

Доколь мне в обмане жить, как в тумане бродить?
Доколь мне, о жизнь, осадки мутные пить?
Наскучила мне твоя хитрость, саки вероломный,
И жизнь я готов, как из чаши, остатки пролить.

*В. Державин*

* * *

Эй, муфтий, погляди... Мы умней и дельнее, чем ты.
Как с утра мы ни пьяны, мы все же трезвее, чем ты.
Кровь лозы виноградной мы пьем, ты же кровь своих ближних;
Сам суди — кто из нас кровожадней и злее, чем ты?

*В. Державин*

* * *

Где мудрец, мирозданья постигший секрет?
Смысла в жизни ищи до конца своих лет:
Все равно ничего достоверного нет —
Только саван, в который ты будешь одет...

*Г. Плисецкий*

* * *

Таң йәтмәһен йәйҙе ҡояш яҡ-яғына —
Был көн шаһы ҡойҙо шарап аяғына.
Эс мәйеңде! Бит был таңда Йыһан үҙе
Яуап бирҙе шулай һөйөү таңда ғына.

*23/VI—75*

* * *

Хурҙай ҡыҙға һүрелмәһә һөйөү уты,
Ҡулдарымдан өҙөлмәһә йөҙөм һуты,
«Тәүбәгә кил!» — тиһәгеҙ ҙә, тәүбә итмәм,
Беләм бит мин яҙмышымдан уҙмыш юҡты!

*23/VI—75*

* * *

Йәрем тиеп яна йөрәк, ҡоя моң-зар,
Ә йәремдең ғәмен күрһәң, ҡотоң осар!..
Ҡайҙан ғына табайымсы инде дауа?
Табибәм бит шул бәләгә үҙе дусар!..

*24/VI—75*

* * *

Күпме бында хәйлә, мәкер еҫе аңҡый!
Күпме ағыу эсерер был яуыз саҡый?
Сайып түгәм инде ҡалған ғүмеремде —
Былай итеп йәшәп булмаҫ ғүмер баҡый!..

*24/VI—75*

* * *

Эй, һин мөфти, һүҙең эштән алыҫыраҡ:
Ләх булһаҡ та, беҙ бит һинән айныҡыраҡ.
Беҙ эсәбеҙ — йөҙөм, ә һин әҙәм ҡанын, —
Уйлап ҡара: ҡайһыбыҙ һуң канхурыраҡ!..

*24/VI—75*

* * *

Был Йыһандың кем һуң алдан серен аса?
Эҙлә ғүмер мәғәнәһен ахырғаса:
Тик тапмаҫһың ышаныслы бер нәмә лә,
Һуңғы кейем — кәфенеңә уралғанса.

*24/VI—75*

* * *

Мой дух скитаньями пресытился вполне,
Но денег у меня, как прежде, нет в казне.
Я не ропщу на жизнь. Хоть трудно приходилось,
Вино и красота все ж улыбались мне.

*В. Державин*

* * *

Ты ради благ мирских сгубил земные дни,
Но вспомни День Суда, на жизнь свою взгляни —
Ведь многих до тебя стяжание сгубило.
И что постигло их? Где все теперь они?

*В. Державин*

* * *

Кто слово разума на сердце начертал,
Тот ни мгновения напрасно не терял.
Он милость вечного снискать трудом старался —
Или покой души за чашей обретал.

*В. Державин*

* * *

Мы чистыми пришли и осквернились,
Мы радостью цвели и огорчились.
Сердца сожгли слезами, жизнь напрасно
Растратили и под землею скрылись.

*В. Державин*

* * *

Солнце пламенного небосклона — это любовь,
Птица счастья средь чаши зеленой — это любовь.
Нет, любовь не рыданья, не слезы, не стон соловья,
Вот когда умираешь без стона — это любовь.

*В. Державин*

* * *

Когда у меня нет вина, в тот день, как больной, я влачусь,
Приемля целебный бальзам, я, словно от яда, томлюсь.
Превратности мира мне — яд, а противоядье — вино.
Когда я выпью вина, то яда я не страшусь.

*В. Державин*

* * *

Күп йөрөнөм иңләп-буйлап был донъяны,
Күп күрһәм дә, улъям-донъям, юҡ, уңманы.
Тик зарым юҡ ғүмер бушҡа уҙғанына,
Буш булһа ла, бик хуш уның тиҙ уҙғаны.

*30/I—76*

* * *

Эй, һин, көн-төн донъя малын йыйған бәндә,
Ни ҡылырһың иҫәп-хисап алған көндә?
Аңыңа кил, үҙеңә бер ҡарап алсы —
Донъя малын ҡыумаҡсымы һин Тегендә?

*30/I—76*

* * *

Аҡыл һүҙен йәненә ят итмәҫ әҙәм
Ғүмеренең бер көнөн дә итмәҫ әрәм:
Йә Тәңренең мәрхәмәтен юллап табыр,
Йә хәмеренең тамсыһын да итмәҫ хәрәм.

*30/I—76*

* * *

Беҙ пак булып килдек тә бит — быҫрап киттек,
Шатлыҡ менән көлдөк тә бит — хәсрәт сиктек,
Күҙ йәшенә өтөп бөттөк йөрәктәрҙе,
Ғүмер хаҡын белдек тә бит — исраф иттек.

*1/II—76*

* * *

Мәңгелектең ут-ҡояшы — мөхәббәт ул,
Йәшеллектең бәхет ҡошо — мөхәббәт ул.
Юҡ, түгел ул былбыл йыры, күңел зары,
Аһ та итмәй үлһәң, ошо — мөхәббәт ул!

*1/II—76*

* * *

Эсмәй торһам, үлеп барам ауырыуҙан,
Ағыу тәме килгән һымаҡ һәр дарыуҙан.
Донъя ғәме — ағыу булһа, дауам — шарап,
Шарап йотһам, ҡурҡмайым бар ағыуҙан.

*1/II—76*

* * *

Никто не целовал розоподобных щек,
Чтоб не вонзил в него шипа тотчас же рок.
Не должен ли стократ расщепленным быть гребень,
Чтоб к нежным локонам он прикасаться мог?

*О. Румер*

* * *

Владыкой рая ли я вылеплен иль ада,
Не знаю я, да знать мне это и не надо:
Мой ангел, и вино, и лютня здесь, со мной,
А для тебя они — загробная награда.

*О. Румер*

* * *

Пред тем, как испытать превратности сполна,
Давай-ка разопьем сегодня ратль вина.
Что завтра нам сулит вращенье небосвода?
Быть может, и вода не будет нам дана.

*В. Державин*

* * *

Упиться торопись вином: за шестьдесят
Тебе удастся ли перевалить? Навряд.
Покуда череп твой в кувшин не превратили,
Ты с кувшином вина не расставайся, брат!

*О. Румер*

* * *

Чаша вина мне дороже державы Кавуса,
Трона Кубада и славы отважного Туса.
Стоны влюбленных, что слышатся мне на рассвете,
Выше молитв и отшельнического искуса.

*В. Державин*

* * *

Сказал я сам себе: «Вина я пить не буду,
Кровь виноградных лоз теперь я лить не буду».
«Ты впрямь решил не пить?» — спросил меня рассудок.
А я: «Как мне не пить? Тогда я жить не буду».

*В. Державин*

* * *

Һис кем әле һөймәгәндер гөлһөҙ йәрен,
Ҡаҙатмайса бәғре тәҡдир энәләрен,
Был тараҡ та йөҙ тешкә бит телгеләнгән,
Тарағансы йәрҙең наҙлы бөҙрәләрен.

*1/II — 76*

* * *

Белмәйем һис: кем һуң мине яратҡандыр,
Йәннәткәме, тамуҡҡамы ҡаратҡандыр?
Миңә тиһәң, кәсә, шөңгөр, йәрем еткән,
Һин үҙеңә көтәсәккә йәннәт ҡалдыр!

*1/II — 76*

* * *

Китеп булмай, күрәсәкте күрмәйенсә,
Күтәрәйек, әйҙә, тағы берәй кәсә.
Иртәгә бит ни булырын бер кем белмәй
Үлдең-киттең, йотом һыу ҙа һемермәйсә.

*1/II — 76*

* * *

Уйлама ла артылырға алтмышыңдан,
Ҡайҙа барма — ҡәнәғәт бул яҙмышыңдан.
Тик ҡулыңдан хөмөң-кәсәң ысҡынмаһын,
Кәсә-мәсә яһамайса үҙ башыңдан!

*1/II — 76*

* * *

Бер йотом мәй ҡиммәт Ҡабус тәхетенән,
Тәхеттәге Кәй-Ҡубат, Тус бәхетенән.
Һәр ғашиҡтың аһы таңда яғымлыраҡ
Мең наҙандың аҙан йотҡос ләхетенән.

*1/II — 76*

* * *

Үҙ-үҙемә: «Инде, — тинем, — мәй эсмәйем,
Йөҙөм ҡанын ҡойоп, — тинем, — ҡан кисмәйем!»
Аҡыл тигән аҡһаҡалым: «Расмы?» — тигәс:
«Юҡ, юҡ, — тинем, — боҙоҡ юлға мин күсмәйем!»

*1/II — 76*

* * *

Напоите меня, чтоб уже не пилось,
Чтоб рубиновым цветом лицо налилось!
После смерти — вином мое тело омойте,
А носилки для гроба сплетите из лоз.

*Г. Плисецкий*

* * *

Нежным женским лицом и зеленой травой
Буду я наслаждаться, покуда живой.
Пил вино, пью вино и, наверное, буду
Пить вино до минуты своей роковой!

*Г. Плисецкий*

* * *

Разорвался у розы подол на ветру.
Соловей наслаждался в саду поутру.
Наслаждайся и ты, ибо роза — мгновенна,
Шепчет юная роза: «Любуйся! Умру!..»

*Г. Плисецкий*

* * *

Хайям, судьба сама бы устыдилась
Того, чья грудь так тщетою сокрушилась.
Так пей под чанг вино из полной чаши,
Пока о камень чаша не разбилась.

*В. Державин*

* * *

Гора, вина хлебнув, и та пошла бы в пляс,
Глупец, кто для вина лишь клевету припас.
Ты говоришь, что мы должны вина чураться?
Вздор! Это — дивный дух, что оживляет нас.

*О. Румер*

* * *

Когда опять вы в погребок укромный постучите,
Вы лицезрением друзей сердца развеселите.
Когда саки вас угостит пьянящей влагой магов,
Вы добрым словом и меня, беднягу, помяните.

*В. Державин*

* * *

Эй, дуҫҡайым, шараптарың нәҡ ут булһын,
Гәрәбәләй яңаҡтарым яҡут булһын.
Үлгәс, мине йыуығыҙсы шарап менән,
Үргән йөҙөм һабаҡтары табут булһын!

*7/II—76*

* * *

Хәмерем менән йәрем булғас түйҙарымда,
Рәхәт миңә сәрхәт-шишмә буйҙарында!
Тыуғас, торғас, алда әле ғүмер булғас,
Эстем, эсәм, эсәсәкмен, һый барында...

*7/II—76*

* * *

Иртәнге ел асып ҡарай гөл итәген,
Гөлгә былбыл баҫып һайрай — ни итәһең!
Ултыр ҙа бер тамаша ҡыл ғашиҡтарҙы,
Улар ҡала ҡасып, ярай, — һин китәһең...

*7/II—76*

* * *

Эй һин, Хәйәм! Яҙмыш үҙе бит ояла
Тик ғәм эскән бәндәләрҙән был донъяла.
Ал да сазың, әйҙә әле, һин кәсәңде тот,
Ташҡа төшөп ватылғансы ул быяла!

*8/II—76*

* * *

Мәй эсһә бит, тау ҙа бейеп китер ине,
Ахмаҡ ҡына мәйҙе ғәйеп итер ине!
Һис кенә лә үкенмәйем эскәнемә, —
Мәйһеҙ йәнем янып-көйөп бөтөр ине!..

*8/II—76*

* * *

Эй дуҫтарым, йыйылышып ултырғанда,
Шат булығыҙ, һөкланышып мул табында.
Бисарағыҙ мине лә тик онотмағыҙ,
Кәсәгеҙгә, зәм-зәм ҡушып, тултырғанда.

*8/II—76*

* * *

Если тайну среди трущоб я открою тебе, любя,
Это лучше пустых молитв, пусть в михрабе — но без тебя.
Ты — конец и начало всего, без тебя и нет ничего,
Хочешь — сам меня одари иль сожги, навек истребя.

*В. Державин*

* * *

Жильцы могил гниют дни, месяцы, года,
Немало их частиц исчезло без следа.
Какой же хмель свалил их с ног и не дает им
Прийти в сознание до Страшного суда?

*О. Румер*

* * *

В этой тленной вселенной в положенный срок
Превращаются в прах человек и цветок.
Кабы прах испарялся у нас из-под ног —
С неба лился б на землю кровавый поток.

*Г. Плисецкий*

* * *

Я для вина кувшин себе у гончара достал,
Пил из него. И вот кувшин мне тайну прошептал:
«Я шахом был, вино я пил из чаши золотой,
Теперь у пьяницы в руках кувшином винным стал!»

*В. Державин*

* * *

Солнце розами я заслонить не могу,
Тайну судеб словами раскрыть не могу.
Из глубин размышленья я выловил жемчуг,
Но от страха его просверлить не могу.

*В. Державин*

* * *

Ты — благ, зачем же о грехах мне думать?
Ты — щедр, о хлебе ль на путях мне думать?
Коль воскресив, Ты обелишь меня,
Зачем о черных письменах мне думать?

*В. Державин*

* * *

Һинһеҙ намаҙ укығансы буш михрабта,
Сер асҡаным яҡшы һиңә харабатта.
Йә утҡа һал, йә тартып ал! Һәр нәмәнең
Баш-ахыры — барыһы һинең ҡарамаҡта.

*8/II—76*

* * *

Кеше серей ҡәберендә, бер ни ҡалмай.
Күҙәнәктәр бер-береһен һаҡлай алмай.
Аһ, ниндәй был иҫерткес һуң — бәндәләрҙең
Ҡиәмәткә саҡлы шулай иҫен ялмай!..

*11/II—76*

* * *

Ниңә фани донъяһына киләләр ҙә
Көл булалар кешеләр ҙә, сәскәләр ҙә?
Ҡан даръяһы яуыр ине ергә күктән,
Күк йөҙөнә осоп бөтһә көл әгәр ҙә!

*11/II—76*

* * *

Күҙәгәрҙән бер көн һатып күҙә[*] алдым,
«Мин шаһ инем, — тип был күҙә хәбәр һалды, —
Эстем алтын кәсәләрҙән, инде хәҙер
Һәр хәммәри күңелен күрер хәлгә ҡалдым...»

*11/II—76*

* * *

Ҡояштай гөл һибер инем, — ҡулдан килмәй,
Заман серен сисер инем, — ҡулдан килмәй.
Бөртөк мәрйен таптым фекер диңгеҙендә,
Ҡурҡам шул бик: тишер инем, — ҡулдан килмәй.

*11/II—76*

* * *

Һин шәфҡәтле булғанда — ни генә һуң гонаһым?
Үҙең ризыҡ һуҙғанда — ни генә һуң юл аһым?
Ап-аҡ итеп һин мине ярлыҡаған сағында —
Ҡап-ҡара бер китапты нимәгә һуң һонаһың?

*28/II—76*

---

[*] Күҙә — көршәк мәғәнәһендә.

* * *

Подыми пиалу и кувшин ты, о свет моих глаз,
И кружись на лугу, у ручья в этот радостный час,
Ибо многих гончар-небосвод луноликих и стройных
Сотни раз превратил в пиалу, иль в кувшин — сотни раз.

*В. Державин*

* * *

Круг небес, неизменный во все времена,
Опрокинут над нами, как чаша вина.
Эта чаша, которая ходит по кругу, —
Не стони, — и тебя не минует она.

*Г. Плисецкий*

* * *

Зачем ты мой кувшин с вином разбил, Господь,
Врата блаженства предо мной закрыл, Господь!
Розоцветное вино зачем ты пролил наземь?
Забей мне прахом рот — иль пьян ты был, Господь?

*Л. Пеньковский*

* * *

Разум смертных не знает, в чем суть Твоего бытия.
Что тебе непокорность моя и покорность моя?
Опьяненный своими грехами, я трезв в упованье,
Это значит: я верю, что милость безмерна Твоя.

*В. Державин*

* * *

На пиру рассудка разум мне всегда гласит одно,
Хоть в Аравии и Руме разнотолк идет давно:
«Пить вино грешно, но имя благодати — Майсара.
Майсара, — сказал Создатель, — это значит: пей вино!»

*В. Державин*

* * *

Теперь, пока ты волен, встань, поди,
На светлый пир любовь свою веди.
Ведь это царство красоты не вечно,
Кто знает: что там будет впереди?

*В. Державин*

* * *

Күтәрәйек кәсәбеззе, эй күҙ нурым!
Кемгә тейә быңдай шишмә, иркен урын?
Бит күк йөҙө бик күптәрҙең айҙай йөҙөн
Йөҙ ҡат һауыт, йөҙ ҡат һаба иткән борон!..

*28/II — 76*

* * *

Күк оҫтаһы баш ямдарын ҡылып ҡуйған —
Эшендә ер оҫталарын йығып ҡуйған.
Ямын ғүмер таҫтарына түңкәргән дә
Был донъяның бар аһ-зарын тығып ҡуйған!

*28/II — 76*

* * *

Ярып киттең хөм-һауытты, йә рабби, һин!
Харап иттең бар шатлыкты, йә рабби, һин!
Ер йотайым, әгәр үҙең ләх булмаһаң,
Ергә түктең ал шарапты, йә рабби, һин!

*28/II — 76*

* * *

Эй, илаһи, асылыңа аҡыл етмәҫ,
Баш эйһәм дә, эймәһәм дә, иҫең китмәҫ!
Иҫерһәм дә гонаһымдан, иҫем айыҡ:
Тимәк, сикһеҙ мәрхәмәтең ситкә типмәҫ!

*29/II — 76*

* * *

Сара тапты мейем ҡыҙған бер мәлендә!
Әллә кемдәр Рум иләндә, ғәрәбендә:
«Эсеү — харам!» — тиһәләр ҙә, ышанмайым,
Бит «Мәйсара», — тигән Хоҙай Ҡөрьәнендә!

*29/II — 76*

* * *

Ҡулдарыңдан, зинһар, хәҙер килһә әгәр,
Ғәзизәңдең хәтерен күр иллә-мәгәр! —
Бит матурлыҡ мәмләкәте мәңге түгел,
Ҡулдан китһә, кем һуң һөйөр, кем иркәләр?

*29/II — 76*

* * *

Встань, милый отрок мой, рассвет блеснул лучом,
Наполни чаш кристалл рубиновым вином.
Нам время малое дано в юдоли бренной —
То, что уйдет навек, мы больше не вернем.

*В. Державин*

* * *

Друзья, бокал — рудник текучего рубина,
А хмель — духовная бокала сердцевина.
Вино, что в хрустале горит, — покровом слез
Едва прикрытая кровавая пучина.

*О. Румер*

* * *

Те, что вместо благочестья лицемерье славят,
Меж душой живой и телом средостенье ставят.
Их послушав, я на темя ставлю хум с вином,
Хоть, как петуху, мне темя гребнем окровавят.

*В. Державин*

* * *

Возлюбленная, да будет жизнь твоя дольше моей печали!
Сегодня милость явилась мне, как прежде, когда-то вначале,
Бросила взгляд на меня и ушла, как будто сказать хотела:
«Сделай добро и брось в поток, чтоб людям волны умчали».

*В. Державин*

* * *

Я пью вино, но я не раб тщеты,
За чашей помыслы мои чисты.
В чем смысл и сила поклоненья чаше? —
Не поклонюсь я себе, как ты.

*В. Державин*

* * *

Ты, кравчий, озарил мою судьбу,
Ты — свет влюбленному, а не рабу,
А тот, кто не погиб в потоке горя,
Живет в ковчеге Ноя, как в гробу.

*В. Державин*

* * *

Тор, егетем, таң ҡыйылды, күкте нурлап!
Ҡой гәлсәргә ал һыуыңды, көндө зурлап!
Был фани мәл тик бурысҡа бирелгән бит,
Күпме юллап йөрөһәң дә, килмәй урап!

*29/II—76*

* * *

Ялт-йолт иткән яҡут мәйҙе ямы күрмәй,
Ям бит мәйҙең тәне булһа, йән — тере мәй!
Бәллүр кәсә нур сәсһә лә, унда бары
Йөҙөм ҡаны йәшеренгән йәш мөлдөрәй!..

*29/II—76*

* * *

Ике йөҙлө сәллә баштар кикреп-туйып,
Тик йөрөйҙәр йәнгә тәнде кире ҡуйып.
Миңә тиһәң, мәй хөкөмө тик — башыма таж,
Теләһәң быс, әтәс баштай, кикрек уйың!..

*29/II—76*

* * *

Йәрем, ғүмерең оҙон булһын минең ғәмдәй!
Бөгөн миңә әүәлгесә күҙ һирпкәндәй,
Бер тултырып ҡараны ла китеп барҙы,
«Яҡшылыҡ ҡыл, даръяға һал!» — тип әйткәндәй.

*1/III—76*

* * *

Мин эсһәм дә, ҡаҙалмайым ил күҙенә,
Көс түкһәм дә, мәйгә түгәм әҙ-әҙ генә.
Ниңә мәйгә табынаммы? Сәбәбе тик
Табынмауҙа, һинең кеүек, үҙ-үҙемә.

*1/III—76*

* * *

Саҡый, һинең ирендәрең, гүйә, яҡут,
Ҡеүәт бирә сырхау тәнгә, ә йәнгә — ҡот.
Туфан булып ташһа ла ғәм, шарап эсәм,
Кәсәм миңә — Нух көймәһе, түгел табут!

*3/IV—76*

* * *

Этот старый кувшин безутешней вдовца,
С полки в лавке гончарной кричит без конца:
«Где, — кричит он, — гончар, продавец, покупатель?»
Нет на свете купца, гончара, продавца!

*Г. Плисецкий*

* * *

Венец с главы царя, корону богдыханов
И самый дорогой из пресвятых тюрбанов
За песнь отдал бы я, на кубок же вина
Я б четки променял, сию орду обманов.

*О. Румер*

* * *

Сегодня имя доброе — позор,
Насилием судьбы терзаться — вздор!
Нет, лучше пьяным быть, чем, став аскетом,
В неведомое устремлять свой взор.

*В. Державин*

* * *

Вчера хмельной я шел в кабак по городским руинам,
И пьяный старец в майхане мне встретился с кувшином.
Сказал я: «Бога постыдись. Подумай о душе!»
А он: «Бог милостив! Садись! И выпить помоги нам».

*В. Державин*

* * *

Не порочь лозы — невесты непорочной виноградной,
Над ханжою злой насмешкой насмехайся беспощадно.
Кровь двух тысяч лицемеров ты пролей, — в том нет греха, —
Но, цедя вино из хума, не разлей струи отрадной.

*В. Державин*

* * *

О чистое вино, о сок лозы хмельной!
Я так тобой напьюсь и так сольюсь с тобой,
Что каждый, издали меня завидев, кликнет:
«Эй, дядя Хмель, куда ты путь направил свой?»

*О. Румер*

* * *

Был боронғо сүлмәк, гүйә, үкһеҙ бала —
Һәр саҡ кибет кәштәһенән һөрән һала:
«Ҡайҙа, — ти, — йә һатыусы, йә алыусы?..»
Тик күптән юҡ шул инде улар был донъяла.

*3/IV—76*

* * *

Хан тәхетен, тажын Кәйҙең һатыр инем,
Тыңлап ҡына наҙын Нәйҙең ятыр инем,
Тәсбихтәрен — был ялғанлыҡ ғәскәрен — мин
Йотомона алып мәйҙең атыр инем!

*3/IV—76*

* * *

Был заманда ниңә кәрәк мәшһүр булыу,
Йә яҙмыштан уҙмыш юҡ, тип, кәм-хур булыу?
Шаҡшыланып, күҙең күккә төбәгәнсе,
Яҡшыраҡтыр, шарап эсеп, мәғрур булыу!

*4/IV—76*

* * *

Мәйханаға төшһәм кисә, шаңҡып мәйҙән,
Хөм тоткан бер иҫерек ҡарт булды пәйҙә.
«Алланан һуң оялмайһың ниңә?» — тигәс:
«Хоҙайҙың ул күңеле киң — эс, — ти, — әйҙә!»

*4/IV—76*

* * *

Йәш килендәй йөҙөм һыуын итмә харап,
Ҡойһаң да ҡой ҡара йөрәк ҡанын ҡарап.
Ике йөҙлө ике мең йән ер булһа ла,
Бер тамсы ла ҡойолмаһын ергә шарап!

*4/IV—76*

* * *

Эй мәйем һин, мин һантыймы, һөймәйем?
Эсеп һине, рисуай булдым — көймәйем.
Күпме эскәнде күргән һәр кем һорашыр:
«Мәй мискәһе, һин — ҡайҙан?» — тиер.
Белмәйем!

*4/IV—76*

* * *

Мне часто говорят: «Поменьше пей вина!
В том, что ты пьянствуешь, скажи нам, чья вина?»
Лицо возлюбленной моей повинно в этом:
Я не могу не пить, когда со мной она.

*О. Румер*

* * *

Ты можешь быть счастливым, можешь пить.
Но ты во всем усерден должен быть.
Будь мудрым, остальное все не стоит
Того, чтоб за него свой век сгубить.

*В. Державин*

* * *

Я знаю всю зримую суть бытия и небытия,
Все тайны вершин и низин постигла душа моя.
Но я от всего отрекусь и знаний своих устыжусь,
Коль миг протрезвленья один за век свой припомню я.

*В. Державин*

* * *

Чудо — чаша! Бессмертный мой дух восхваляет ее —
И стократно в чело умиленно лобзает ее.
Почему же художник-гончар эту дивную чашу,
Не успев изваять, сам потом разбивает ее?

*В. Державин*

* * *

Тот усердствует слишком, кричит: «Это — я!»
В кошельке золотишком бренчит: «Это — я!»
Но едва лишь успеет наладить делишки —
Смерть в окно к хвастунишке стучит: «Это — я!»

*Г. Плисецкий*

* * *

Я из пределов лжи решил сокрыться,
Здесь жить — лишь сердцем попусту томиться.
Пусть нашей смерти радуется тот,
Кто сам от смерти может защититься.

*В. Державин*

* * *

«Әҙерәк эс, — тиҙәр миңә, — бел һин әҙәп,
Ахыр сиктә йөрәгең бит булыр ҡәбәп...»
Мәйҙең үҙе — һөйөклөмдөң таңдай йөҙө,
Иҫермәҫкә бармы шунан мөһим сәбәп?..

*5/IV — 76*

* * *

Ашап-эскән, кейгәндәрең был донъяла —
Хәләл малдыр, кем тырыша, кем көс һала.
Тик сама бел — һәләк итмә ғүмереңде,
Йыйған-тапҡан — барыһы ла ятҡа ҡала.

*10/IV — 76*

* * *

Был донъяның белдем бөтә кәм-ҙурлығын,
Аҫтының да, өҫтөнөң дә зарурлығын.
Тик белгәнем оят ҡына булыр ине,
Белмәй ҡалһам эскән мәлдең хозурлығын!..

*10/IV — 76*

* * *

Был кәсәгә, йәлләмәйсә «афарин!»ды,
Ғашиҡ ирен йөҙ ҡат мөһөр баҫыр инде.
Тик күктәге рәссам ғына был кәсәне
Ергә атып ватыр өсөн яһар инде!..

*10/IV — 76*

* * *

Бер буш ҡыуыҡ башын вата: «Был — мин!» — тиеп,
Алтын-көмөш шалтырата: «Был — мин!» — тиеп.
Тик эштәрен йүнләргә лә өлгөрмәй был,
Әжәл тәҙрә шаҡылдата: «Был — мин!» — тиеп.

*10/IV — 76*

* * *

Китәм! — Сөнки ялған тулы был ерендә
Тере килеш ятҡандай бит ҡәберендә.
Көлһә көлөр, донъяһынан мин киткәндә,
Әжәл ҡулы алмаҫтай тик берәй бәндә.

*10/IV — 76*

* * *

Над нашей головой еще не грянул гром,
Давай же пить вино, покуда мы живем.
Ведь мы не золото, глупец: и нас из праха
Никто откапывать не вздумает потом.

*О. Румер*

* * *

Саки! Печалью грудь моя полна,
Без меры нынче выпил я вина.
Пушок твоих ланит так юн и нежен,
Что новая пришла ко мне весна.

*В. Державин*

* * *

Небо — пояс загубленной жизни моей,
Слезы падших — соленые волны морей,
Рай — блаженный покой после страстных усилий,
Адский пламень — лишь отблеск угасших страстей.

*Г. Плисецкий*

* * *

Нам — вино и любовь, вам — кумирня и храм,
Пекло нам уготовано, гурии — вам.
В чем же наша вина, если все наши судьбы
Начертал на скрижалях предвечный калам?

*Г. Плисецкий*

* * *

Из всех, которые ушли в тот дальний путь,
Назад вернулся ли хотя бы кто-нибудь?
Не оставляй добра на перекрестке этом:
К нему возврата нет — об этом не забудь!

*О. Румер*

* * *

Из кожи, мышц, костей и жил дана Творцом основа нам.
Не преступай порог судьбы. Что ждет нас, неизвестно там.
Не отступай, пусть будет твой противоборец сам Рустам.
Ни перед кем не будь в долгу, хотя бы в долг давал Хатам.

*В. Державин*

* * *

Һау башыңа төшмәҫ элек тимер ҡаҙыҡ,
Мәй төшөрһәк, әйт, булмаҫтыр һис бер яҙыҡ.
Бел: һин алтын түгел дәһә, ғафил бәндә,
Бер күмелгәс, кире алыр кем, ер ҡаҙып?..

*11/IV—76*

* * *

Эй саҡыйым! Ҡайғым аһтар булып ташҡан,
Иҫереүем самаларҙан тулып ашҡан.
Һине күргәс, сал сәсем дә тойолғандыр
Ял иткәндәй яҙ сәскәһе ҡунып башҡа...

*11/IV—76*

* * *

Был ҡош юлы — тик бил бауы биртенгәндең,
Даръя һыуы — тик йәш эҙе һөртөнгәндең,
Йәһәннәм — тик бер осҡоно үртәлгәндең,
Ә йәннәте — тик бер мәле хөр-тын йәндең.

*16/IV—76*

* * *

Безгә — мәй, йәр, һеҙгә — мәсет йә ғибәҙәт,
Беҙ — йәһәннәм әһелдәре, ә һеҙ — йәннәт.
Беҙҙең ғәйеп низә генә? Әйтегеҙсе! —
Яҙыҡмы һуң яҙмышыңа яҙған ғәҙәт?..

*16/IV—76*

* * *

Ас-яланғас ғүмер юлын үткәндәрҙән
Кем һуң ҡайтҡан, һорашырға һуң кемдәрҙән?
Бер нәмәңде ташлап китмә юл сатында,
Кире ҡайтып, тапҡандар юҡ киткәндәрҙән.

*18/IV—76*

* * *

Тәнеңдәге һеңер-тамыр, ҡаҡ һөйәгең —
Йәнеңдә бит тәҡдир яҙған хаҡ төйәгең.
Сыҡма шунан, Рөстәм менән алышһаң да,
Хатта Хотам бирһә, алма ваҡ-төйәген!

*18/IV—76*

* * *

В полях — межа. Ручей. Весна кругом.
И девушка идет ко мне с вином.
Прекрасен миг! А стань о вечном думать,
И кончено: поджал бы хвост щенком!

*И. Тхоржевский*

* * *

Веселясь беззаботно, греша без конца,
Не теряю надежды на милость Творца.
Снова пьяный мертвецки лежу под забором.
Лягу в землю — Создатель простит мертвеца.

*Г. Плисецкий*

* * *

Лучше в жизни всего избегать, кроме чаши вина,
Если пери, что чашу дала, весела и хмельна.
Опьяненье, беспутство, поверь, от Луны и до Рыбы
Это — лучшее здесь, если винная чаша полна.

*В. Державин*

* * *

Стебель свежей травы, что под утренним солнцем блестит,
Волоском был того, кто судьбою так рано убит.
Не топчи своей грубой ногой эту нежную травку,
Ведь она проросла из тюльпановоцветных ланит.

*В. Державин*

* * *

Когда я трезв, то ни в чем мне отрады нет.
Когда я пьян, то слабеет разума свет.
Есть время блаженства меж трезвостью и опьяненьем,
И в этом — жизнь. Я прав иль нет? Дай ответ.

*В. Державин*

* * *

Я жадно устами к устам кувшина прильнул,
Как будто начало желанной жизни вернул.
«Я был, как и ты. Так побудь хоть мгновенье со мною», —
Так глиняной влажной губою кувшин мне шепнул.

*В. Державин*

* * *

Яҙ мәлендә, күк үләндә, хурҙай йәрем
Берәй кәсә ҡойоп бирһә һый-мәйҙәрен,
Күпме ғәйеп ителмәһен был һүҙҙәрем,
Эттән түбән, иҫләһәм мин йәннәттәрен!..

*18/IV—76*

* * *

Өҙмә өмөт миһырбанлы Тәңребеҙҙән,
Гонаһтарға батҡанда ла үңребеҙҙән.
Әле бөгөн ләх иҫерек йоҡлаһаҡ та,
Ярлыҡар ул, иртән табып ҡәберебеҙҙән.

*18/IV—76*

* * *

Мәйҙән башҡа һәр нәмәнән ҡасҡан яҡшы,
Аҡ сатырҙа алсаҡ йәрҙәр ҡосҡан яҡшы,
Кит-балыҡта торған Ерҙән Айға саҡлы
Ҡәләндәрлек, кәйеф-сафа асҡан яҡшы!

*18/IV—76*

* * *

Баҡсы арыҡ ситендәге һәр үләнгә,
Һәр береһе серен һөйләй тел белгәнгә.
Фәрештәләй заттың улар керпеге бит —
Абайлап баҫ күҙ иркәләр был келәмгә.

*18/IV—76*

* * *

Айныҡ булһам, бәҫе бөтә ләззәтемдең,
Ә иҫерһәм, көсө бөтә зиһенемдең.
Тик шуларҙың араһында бер мәл була —
Бәндәһе мин бына ошо гүзәл мәлдең.

*18/IV—76*

* * *

Иренеңә ирен терәп сүлмәгемдең:
«Йән шишмәм бул!» — тип әйткәйнем теләгемде,
Эй бытылдай: «Мин дә бит, ти, һиндәй инем,
Үткәрсе, ти, минең менән был мәленде!..»

*22/IV—76*

* * *

С фиалом в руке, с локоном пери — в другой,
Сидит он в отрадной тени, над светлой рекой.
Он пьет, презирая угрозы бегущего свода,
Пока не упьется, вкушая блаженный покой.

*В. Державин*

* * *

Дай мне влаги хмельной, укрепляющей дух.
Пусть я пьяным напился, и взор мой потух.
Дай мне чашу вина! Ибо мир этот — сказка,
Ибо жизнь — словно ветер, а мы — словно пух.

*Г. Плисецкий*

* * *

Страданий горы небо громоздит —
Едва один рожден, другой — убит.
Но не родившийся бы не родился,
Когда бы знал, что здесь ему грозит.

*В. Державин*

* * *

Блажен, кто в наши дни вкусил свободу,
Минуя горе, слезы и невзгоду;
Был всем доволен, что послал Яздан,
Жил с чистым сердцем. Пил вино — не воду.

*В. Державин*

* * *

Увы! Мое незнанье таково,
Что я — беспомощный — страшусь всего.
Пойду зуннар надену — так мне стыдно
Грехов и мусульманства моего.

*В. Державин*

* * *

Грозит нам свод небесный бедой — тебе и мне,
И надо ждать разлуки с душой — тебе и мне.
Приляг на мягком дерне! В могиле суждено
Питать все эти корни собой — тебе и мне.

*Л. В. Некора*

* * *

Бер ҡулыңда — сихәттәре бөтмәҫ кәсә,
Бер ҡулыңда — йәр сәстәре хуш еҫ сәсә,
Ултыра бир, донъя ғәмен бар тип белмәй,
Сәхрәһендә бәхетеңдән иҫермәйсә.

*22/IV—76*

* * *

Хаятыма йәм-тәм биргән хәмереңде
Ҡуйоп бирһәң, һис онотмам ҡәҙереңде.
Тик йәһәт бул, был ғүмерҙең эше мәғлүм:
Баҡҡан һайын, хәмереңдәй, кәмер инде...

*23/IV—76*

* * *

Был күк йөҙө тик ғәм өҫтәп, юҡҡа баға,
Берәү тыуһа, икенсеһен утҡа яға.
Тыумағандар, әгәр белһә беҙ күргәнде,
Бөтөнләйгә тыумаҫ ине был донъяға!

*24/IV—76*

* * *

Бәхетле зат — кем был заман уйҙан азат,
Хоҙай биргән бар шатлыҡтан ҡәнәғәт, шат,
Бер мәлен дә был ғүмерҙең әрәм итмәй,
Кәйеф-сафа ҡоророна таба форсат.

*24/IV—76*

* * *

Күпме шулай зарланырлыҡ аңһыҙлыҡтан,
Йөрәк һыҙлай бисаралыҡ, яңғыҙлыҡтан.
Зуннар булып, илдән сығып китәм инде,
Оялып был мосолманлыҡ, аҙғынлыҡтан.

*24/IV—76*

* * *

Эҙләй беҙҙе, күрмәкселәр еңмеш фәләк,
Йәнебеҙҙе итмәкселер, имеш, һәләк!
Онот, әйҙә, донъяларын! Аҙаҡ бары
Тәнебеҙҙең тәмен эсер емеш-еләк...

*24/IV—76*

* * *

Я к неверной хотел бы душой охладеть,
Новой страсти позволить собой овладеть
Я хотел бы — но слезы глаза застилают,
Слезы мне не дают на другую глядеть!

*Г. Плисецкий*

* * *

Нет благороднее растений и милее,
Чем черный кипарис и белая лилея:
Он, сто имея рук, не тычет их вперед;
Она всегда молчит, сто языков имея.

*О. Румер*

* * *

Ужели бы гончар им сделанный сосуд
Мог в раздражении разбить, презрев свой труд?
А сколько стройных ног, голов и рук прекрасных,
Любовно сделанных, в сердцах разбито тут!

*О. Румер*

* * *

Коль жизнь прошла, не все ль равно — сладка ль, горька ль она?
Что Балх и Нишапур тогда пред чашею вина?
Пей, друг! Ведь будет после нас меняться много раз
Ущербный серп, и новый серп, и полная луна.

*В. Державин*

* * *

Есть ли мне друг, чтобы внял моей повести он?
Чем человек был вначале, едва сотворен?
В муках рожденный, замешан из крови и глины,
В муках он жил и застыл до скончанья времен?

*В. Державин*

* * *

О друг, заря рассветная взошла.
Пусть вином сверкает пиала!
Зима убила тысячи Джамшидов,
Чтобы весна сегодня расцвела.

*В. Державин*

* * *

Ҡалай итеп башҡаларға баш һалырға,
Яңы ғишыҡ уттарына ташланырға?
Күҙҙән аҡҡан ҡан-йәштәрем ирек бирмәй
Бер генә ҡат сит-яттарға баш ҡағырға.

*24/IV—76*

* * *

Ҡайҙан шулай дан алғандыр сәрүн, ләлә?
Телдән төшмәй маҡталғандыр — сер нимәлә?
Сөнки сәрүн, йөҙ ҡул булып бер ҡул һонмаҫ,
Бер сер һатмаҫ, ләләһе йөҙ тел белһә лә!..

*24/IV—76*

* * *

Бөртөктәрҙән ҡойолған бит был быяла,
Кемдең ҡулы ватырға тип һуң ҡыяла?
Ә бит күпме нәфис башты, ҡул-аяҡты
Бар иткән дә юҡ иткән ул был донъяла!..

*24/IV—76*

* * *

Әсеһе ни, сөсөһө ни — ғүмер үткәс?
Сингапур ни, Нишапур ни — хәмер эскәс?
Эсә бирсе, беҙҙән һуң да был ай ҡалҡыр,
Тыуған ай ни, тулған ай ни — беҙ бер киткәс!..

*25/IV—76*

* * *

Ҡайҙа һуң дуҫ, сер сисергә ымһынғанда?
Әлмисаҡтан бире әҙәм ниндәй һанда?
Михнәт сигеп, ғәмле ерҙән яралған да
Бер аҙ йөрөп, ҡатып ҡалған ул йыһанда.

*25/IV—76*

* * *

Эй, егетем, кисен эскәс, торма ҡарап,
Иртән бер көй уйнап ебәр, шарап!
Белмәйһеңме, был йәмле яҙ хаҡына бит
Ҡыш һалҡыны мең Джәмшитте иткән харап...

*25/IV—76*

* * *

Тем, кто несет о неизвестном весть,
Кто обошел весь мир, — почет и честь!
Но больше ли, чем мы, они узнали
О мире — о таком, каков он есть?

*В. Державин*

* * *

Доколе дым кумирни прославлять?
О рае и об аде толковать?
Взгляни на доски судеб; там издревле
Написано все то, что должно стать.

*В. Державин*

* * *

В этом замкнутом круге — крути не крути —
Не удастся конца и начала найти.
Наша роль в этом мире — прийти и уйти.
Кто нам скажет о цели, о смысле пути?

*Г. Плисецкий*

* * *

Зачем себя томить и утруждать,
Зачем себе чрезмерного желать?
Что предначертано, то с нами будет, —
Ни меньше и ни больше нам не взять.

*В. Державин*

* * *

Все тайны мира ты открыл... Но все ж
Тоскуешь, втихомолку слезы льешь.
Все здесь не по твоей вершится воле,
Будь мудр, доволен тем, что ты живешь.

*В. Державин*

* * *

И опять небосвод неразгаданной тайной зажжется...
От коварства его ни Махмуд, ни Аяз не спасутся.
Пей вино, ибо вечная жизнь никому не дана.
Кто из жизни ушел, тот, увы, никогда не вернется.

*В. Державин*

* * *

Был донъяның иңен-буйын айҡағандар,
Беләйем, тип аҫтын-өҫтөн байҡағандар.
Беҙ белгәндән артығыраҡ ни белгән һуң?
Һорашырға ине лә бит — ҡайтмағандар!..

*25/IV—76*

* * *

Кем һуң мәсет шәмсырағын маҡтап туйған?
Кем һуң йәннәт, йәһәннәмгә тәҙрә уйған?
Баҡсы тәҡдир ләүхәһенә: остазыбыҙ
Күрәсәктең бөтәһен дә яҙып ҡуйған!..

*25/IV—76*

* * *

Кем эләккән был донъяның тоҙағына,
Сыҡҡаны юҡ һис башына, аҙағына.
Бер кем әле әйткәне юҡ мәғәнәһен
Китеүеңдең, ҡайҙан килеп, ҡайҙа ғына...

*26/IV—76*

* * *

Булһаң да һин ҡулға оҫта, эшкә күндәм,
Ни мәғәнә янып-көйөп бешкәнеңдән?
Тәҡдиреңә ни яҙылған — шул һинеке,
Ҡәнәғәт бул өлөшөңә төшкәнеңдән!

*26/IV—76*

* * *

Эй дуҫҡайым, төшөнгәс һин бөтә сергә
Шул ҡәҙәре ниңә бушҡа йәш түгергә?
Эшең һинең ихтыярҙа түгел икән,
Тырыш ҡулдан килгәненә күнегергә.

*26/IV—76*

* * *

Һис кемгә Күк асмаһа ла үҙ серҙәрен,
Ҡорған Мәхмүт, Аязға ла мәкерҙәрен.
Мәйендә эс — бер кем дә бит мәңге тормай,
Ә бер киткәс, көтмә, ҡайт, тип әйтерҙәрен.

*3/V—76*

* * *

Объятья гурии, — мне говорят, — отрада,
Меня ж прельщает сок пурпурный винограда.
Я барабанов шум лишь вдалеке люблю,
Мне мил наличный грош, посулов мне не надо.

*О. Румер*

* * *

Мы сперва покупаем вино молодое,
За два зернышка все уступаем земное.
Ты спросил: «Где ты будешь — в аду иль в раю?»
Дай вина — и оставь меня, братец, в покое.

*В. Державин*

* * *

Коль наша жизнь мгновение одно,
Жить без вина, поистине, грешно.
Что спорить: вечен мир или не вечен, —
Когда уйдем, нам будет все равно!

*В. Державин*

* * *

О судьба! Ты насилье во всем утверждаешь сама,
Беспределен твой гнет, как тебя породившая тьма:
Благо подлым даришь ты, а горе — сердцам благородным,
Иль ты не способна к добру, иль сошла ты с ума?

*В. Державин*

* * *

Я мук разлуки нашей не забуду,
Ищу тебя, невольно веря чуду.
Ты к страждущим, покинутым вернись!
И в сонме душ твоей я жертвой буду.

*В. Державин*

* * *

Знаю сам я пороки свои. — Что мне делать?
Я в греховном погряз бытии. — Что мне делать?
Пусть я буду прощен, но куда же я скроюсь
От стыда за поступки мои. — Что мне делать?

*В. Державин*

* * *

Әйтһәләр ҙә: «Йәннәттәге хурҙар хуш», — тип,
Мин әйтермен: «Йөҙөмдәге һыуҙар хуш», — тип,
Ситтә ҡаҡҡан дөмбөргә һис бейемәйем,
Ситтәгенән өйөмдәге туйҙар хуш, тип.

*3/V—76*

* * *

Тура килһәк сәйҙең-мәйҙең бар сағына,
Бар ғәләмде һатабыҙ бер борсағына.
Тик йөҙәтмә: «Үлгәс, ҡайҙа барабыҙ?» — тип,
Мәй килтер ҙә ҡаҙалып кит бысағыма!

*3/V—76*

* * *

Был донъяла беҙ бары тик ҡунаҡ булғас,
Ҙур гонаһтыр — йәр ҡосоп та һыйланмағас.
Ниңә тылҡыу — фанимы ул, юҡмы донъя?
Барыбер бит — беҙгә унан китер булғас!

*5/V—76*

* * *

Эй һин, яҙмыш! Был эшеңде кем килешмәк?
Һәр саҡ ергә тик йәберҙән йәйҙең түшәк.
Тик шаҡшыға бирҙең тәғәм, яҡшыға — ғәм,
Шулай булғас, йә килмешәк, йә һин — ишәк!

*5/V—76*

* * *

Айырылып һинән башҡа бер көн тормам,
Һин ҡайҙаһың — мин шундамын, юлым бормам.
Һин китеүҙән мең күңел бит һәләк булды,
Һин ҡайт инде, һораһаң да йөҙ мең ҡорбан.

*5/V—76*

* * *

Гел һыҙланам ҡылғанымдан — нишләйем һуң?
Ғазапланам гонаһымдан — нишләйем һуң?
Күңелең киң, эй, Хоҙайым, ярлыҡарһың,
Тик мин үҙем оятымдан нишләйем һуң?

*6/V—76*

* * *

С людьми ты тайной не делись своей,
Ведь ты не знаешь, кто из них подлей.
Как сам ты поступаешь с божьей тварью,
Того же жди себе и от людей.

*В. Державин*

* * *

Я красоты приемлю самовластье,
К ее порогу сам готов припасть я.
Не обижайся на ее причуды,
Ведь все, что от нее исходит, — счастье.

*В. Державин*

* * *

Влюбленные, пьяные — вновь мы без страха
Вину поклоняемся, вставши из праха.
И сбросив, как рубище, плен бытия,
Сегодня вступаем в чертоги Аллаха.

*В. Державин*

* * *

Как жаль, что бесполезно жизнь прошла,
Погибла, будто выжжена дотла.
Как горько, что душа томилась праздно
И от твоих велений отошла.

*В. Державин*

* * *

Хоть я в покорстве клятвы не давал,
Хоть пыль грехов с лица не отмывал,
Но верил я в Твое великодушье
И одного двумя не называл.

*В. Державин*

* * *

Говорят: нас в раю ожидает вино.
Если так — то и здесь его пить не грешно.
И любви не грешно на земле предаваться —
Если это и на небе разрешено.

*Г. Плисецкий*

* * *

Серҙәреңде йәшерә күр бөтәһенән,
Һәр хәсисе сер сисер тип көтә һинән.
Низәр ҡылһаң Хоҙайҙың һәр мәхлүгенә,
Һәр береһе шуны өмөт итә һинән.

*6/VI–76*

* * *

Һәр йөрәктең йәрҙән әсир булғаны — хуш,
Йәр йөрөгән гөл саңы ла ҡунғаны — хуш,
Йәрең һалған йәрәхәт тә рәхәт кенә,
Һәр низе лә дуҫ ҡулының һуҙғаны — хуш!

*6/VI–76*

* * *

Беҙ — ғашиҡ та, илаһи ҙа, ҡара бына,
Табынабыҙ ботханала шарабына.
Тамам азат булып ығы-зығыларҙан
Юл тотабыҙ ете ҡат күк тарафына.

*6/VI–76*

* * *

Ни тиклем йәл бушҡа йәбер сиккәндәрем,
Ашым — харам, ыулы хәмер эскәндәрем.
Һин ҡушҡанды эшләмәйсә, мин хур булдым,
Төҙәлергә бөттө хәҙер көс-хәлдәрем.

*6/VI–76*

* * *

Тоғромон тип, гәүһәр тишеп, таҡҡаным юҡ,
Гонаһ саңын иңдәремдән ҡаҡҡаным юҡ,
Әммә һәр саҡ шәфҡәтеңә өмөтөм бар, —
Сөнки берҙе һис ике тип тапҡаным юҡ!..

*6/VI–76*

* * *

Беҙҙе, имеш, көтә йәннәт, хур ҡыҙҙары,
Баштан ашҡан, имеш, ниғмәт, гүр һыйҙары.
Ахыр сиктә шул уҡ нәмә көтә икән,
Гонаһмы һуң ерҙә ләззәт ер туйҙары.

*6/VI–76*

* * *

О, если б, захватив с собой стихов диван
Да в кувшине вина и сунув хлеб в карман,
Мне провести с тобой денек среди развалин, —
Мне позавидовать бы мог любой султан!

*О. Румер*

* * *

Когда с телом душа распростится, скорбя,
Кирпичами из глины придавят тебя.
И бездушное, ставшее глиною тело
Пустят в дело, столетие погодя.

*Г. Плисецкий*

* * *

«Те, что живут благочестиво, — имамы говорят, —
Войдут такими же, как были, в господень райский сад!»
Мы потому не расстаемся с возлюбленной, с вином —
Ведь, может быть, как здесь мы жили, так нас и воскресят?

*В. Державин*

* * *

Небосвод! Лишь от злобы твоей наши беды идут,
От тебя справедливости мудрые люди не ждут.
О Земля! Если взрыть глубину твоей груди холодной,
Сколько там драгоценных алмазов и лалов найдут!

*В. Державин*

* * *

«Всех пьяниц и влюбленных ждет геенна».
Не верьте, братья, этой лжи презренной!
Коль пьяных и влюбленных в ад загнать,
Рай опустеет завтра ж, несомненно.

*В. Державин*

* * *

Будь весел: не умрет вовеки мир земной,
И звездам не дано исчезнуть — ни одной.
Кирпич, сработанный из тела твоего,
В дому других людей возвысится стеной.

*С. Липкин*

* * *

Ҡулда булһа берәй һыныҡ бойҙай наны,
Ике мәндәй шарап менән ҡуйҙың һаны,
Йәрең менән ултырғанда харабала,
Көнләшерлек булыр ине хандың ханы!..

*6/VI—76*

* * *

Илай-һыҡтай йәнең тәндән айырылғас,
Гүр ләхетең кирбес менән баҫтырылғас,
Ерҙә ятып, балсыҡ булған йәнһеҙ тәнең
Эшкә ярар, тағы йөҙ йыл — ғасыр уҙғас...

*6/VI—76*

* * *

Кемдең, имеш, ғүмере үтә ғибәҙәттә,
Үлгән кеше ул терелә, ти, ғәҙәттә.
Шуға һәр саҡ ер-һыуыңдан айырылмайым,
Терелербеҙ, бәлки, шулай ҡиәмәттә!..

*6/VI—76*

* * *

Эй яуыз күк! Һәр кем һинән харап була!
Ҡасан ғына һин ҡатилға ярап була?
Эй ергенәм, һинең дә бит эсте асһаң,
Әллә күпме аҫыл затты барлап була!..

*6/VI—76*

* * *

Яныр, имеш, бар иҫерек тамуғында,
Ышанмағыҙ был һүҙгә һеҙ — алдаҡ унда!
Барса ғашиҡ, барса ҡыйшыҡ утта янһа,
Кем генә һуң тороп ҡалыр ожмахында?

*6/VI—76*

* * *

Ҡайғырмасы, ҡайғы бөтмәҫ, артып торор,
Ә йондоҙҙар күктә мәңге балҡып торор.
Тупрағыңдан һуҡҡан кирбес бушҡа китмәҫ —
Башҡаларға һарай булып ҡалҡып торор.

*6/VI—76*

* * *

В этом мире неверном не будь дураком:
Полагаться не вздумай на тех, кто кругом,
Трезвым оком взгляни на ближайшего друга —
Друг, возможно, окажется злейшим врагом.

*Г. Плисецкий*

* * *

Увидав черепки — не топчи черепка.
Берегись! Это бывших людей черепа.
Чаши лепят из них — а потом разбивают.
Помни, смертный: придет и твоя череда!

*Г. Плисецкий*

* * *

Тот, кто следует разуму, — доит быка,
Умник будет в убытке наверняка!
В наше время доходней валять дурака,
Ибо разум сегодня в цене чеснока.

*Г. Плисецкий*

* * *

Зачем, о грехах вспоминая, Хайям, убиваешься ты?
О грешник, иль в милости божьей душой сомневаешься ты?
Коль не было бы грехов, то не было бы и прощенья.
Прощенье живет для греха. Так о чем сокрушаешься ты?

*В. Державин*

* * *

Эй, неженка, открой навстречу утру взгляд,
И пей вино, и пой, настроив струнный лад.
Ведь кто сегодня жив, тот завтра будет взят,
А кто ушел навек, тот не придет назад.

*В. Державин*

* * *

Когда смерть меня схватит, задора полна,
И меня, словно птицу, ощиплет она,
Вы из персти моей смастерите кувшин, —
Может быть, оживит меня запах вина.

*В. Державин*

* * *

Был заманда дуҫ һайлама буш табындан,
Һаҡлана күр ҡайғың юҡта ҡуштанындан.
Ғәмле күҙең менән баҡһаң, йән дуҫың да
Яһилыраҡ булып сығыр дошманыңдан.

*13/VI—76*

* * *

Шундай матур нағышланған был һауытты
Юлға ташлар өсөн генә кем һуң ватты?
Зинһар, уға баҫып ҡуйма аямайса,
Ул баш булған — асылына яңы ҡайтты.

*19/VI—76*

* * *

Аҡыл юлын ҡыуған бахыр үгеҙ һауыр,
Ахыр сиктә аҡылынан яҙып ауыр,
Ахмаҡтарға файҙалыраҡ был заманда —
Аҡыл хаҡы һарымһаҡтан тартмаҫ ауыр!..

*19/VI—76*

* * *

Ниңә, Хәйәм, гонаһ өсөн матәм тотоу?
Ниндәй файҙа бынан артыҡ йә кәм отоу?
Һис гонаһһыҙ булһаң, ниңә ярлыҡау бар?
Ярлыҡау бар икән, ниңә ут-гәм йотоу?

*19 — 20/VI—76*

* * *

Тор, наҙлы йәр, һин торһаң бит, таң һөйөнә,
Аҙлап-маҙлап шарап ҡойсо саз көйөнә.
Бел: донъяға килгәндәр бит оҙаҡ тормай,
Киткәндәр ҙә кире ҡайтмай наз өйөнә.

*20/VI—76*

* * *

Әжәл ҡулы, бөрөп тотҡас, бер үлермен,
Аҡ балсыҡҡа, тапап йыҡҡас, әүерелермен.
Зинһар, унан хәмер хөмө яһағыҙсы, —
Шәйәт, хәмер еҫе сыҡҡас, терелермен!

*20/VI—76*

* * *

Чтоб омыть мое тело, вина принесите,
Изголовье могилы вином оросите.
Захотите найти меня в день Воскресенья —
Труп мой в прахе питейного дома ищите.

*В. Державин*

* * *

«Брось вино! Попадешь, — мне пророчат, — в беду:
В день Суда испекут тебя черти в аду!»
Это так. Но не лучше ли вечного рая
Миг божественной истины в пьяном бреду?

*Г. Плисецкий*

* * *

Достав вина два мана, не жалей —
Сам пей и вдоволь угощай друзей.
Ведь не нуждается создатель мира
В твоих усах и в бороде моей...

*В. Державин*

* * *

Ты, о небо, за горло счастливца берешь,
Ты рубаху, в которой родился он, рвешь,
Ветер — в пламя и воду — во прах превращая,
Ни вздохнуть, ни напиться ему не даешь.

*Г. Плисецкий*

* * *

Зачем копить добро в пустыне бытия?
Кто вечно жил средь нас? Таких не видел я.
Ведь жизнь нам в долг дана, и то — на срок недолгий,
А то, что в долг дано, не собственность твоя.

*В. Державин*

* * *

Несовместимых мы всегда полны желаний:
В одной руке — бокал, другая — на Коране.
И так вот мы живем под сводом голубым —
Полубезбожники и полумусульмане.

*О. Румер*

* * *

Үлһәм, мине йыуырһығыҙ шарап менән,
Тәлҡин уҡып, ҡуйорһоғоҙ шарап менән.
Ҡиәмәт көн әгәр мине эҙләһәгеҙ,
Харабатта табырһығыҙ шарап менән.

*20/VI—76*

* * *

«Эсмә, — тиҙәр, — эләгерһең бит бәләгә!»
Тамуҡ уты көтә, имеш, кем эләгә.
Хаҡтыр, бәлки, тик ожмахҡа алыштырмам
Эскән мәлде, хаҡ һүҙ әйтеп Тәғәләгә...

*20/VI—76*

* * *

Тапһаң әгәр ике батман затлы шарап,
Ҡайҙа, кемде һыйлаһаң да, ҡалыр ярап.
Атың-затың кәрәкме һуң Тәңребеҙгә? —
Һин — мыйыҡҡа, мин — һаҡалға тормаҫ ҡарап!..

*20/VI—76*

* * *

Ниңә, Тәңрем, телгеләйһең йөрәгемде,
Өҙгөләйһең өҫтә бәхет күлдәгемде,
Уртымда ҡом-туҙан итеп эскән емде,
Ут-ялҡынға әйләндерҙең иҫкән елде.

*9/VII—76*

* * *

Донъя малын уйлап, ниңә ҡайғырырға?
Кемгә насип булған мәңге бай торорға?
Был йән тәнгә тик бурысҡа бирелгән бит,
Ә бурысты кәрәк кире ҡайтарырға.

*9/VII—76*

* * *

Бер ҡул — Ҡөрьән, икенсеһе тотҡандыр ям,
Бәғзе ваҡыт беҙ — хәләл зат, бәғзе — харам.
Фирүҙәләй был күк көмбәҙ аҫтарында
Беҙ ни кафыр, ни мосолман түгел тамам.

*9/VII—76*

* * *

Сияли зори людям — и до нас!
Текли дугою звезды — и до нас!
В комочке праха сером, под ногою,
Ты раздавил сиявший юный глаз.

*И. Тхоржевский*

* * *

Друг, из кувшина полного того,
Черпни вина, мы будем пить его,
Пока гончар не сделает кувшина
Из праха моего и твоего.

*В. Державин*

* * *

Сердце, воспрянь! Мы по струнам рукой проведем,
Доброе имя уроним с утра за вином.
Коврик молитвенный в доме питейном заложим,
Склянку позы и чести, смеясь, разобьем.

*В. Державин*

* * *

Из-за рока неверного, гневного не огорчайся,
Из-за древнего мира плачевного не огорчайся.
Весел будь! Что случилось — прошло, а что будет — не видно,
Ради сует удела двухдневного не огорчайся.

*В. Державин*

* * *

Не унывай, мой друг! До месяца благого
Осталось мало дней — нас оживит он снова.
Кривится стан луны, бледнеет лик ее —
Она от мук поста на нет сойти готова.

*О. Румер*

* * *

В любви к тебе не страшен мне укор,
С невеждами я не вступаю в спор.
Любовный кубок — исцеленье мужу,
А не мужам — паденье и позор!

*В. Державин*

* * *

Көн менән төн алышынған беҙгә саҡлы,
Был ай ҙа бит күктә тыуған беҙгә саҡлы.
Һаҡ ҡына баҫ өнһөҙ ятҡан был ташҡа һин,
«Аһ!» тип ҡуйыр күҙ-ҡаш булған беҙгә саҡлы!..

*9/VII—76*

* * *

Берәй сүлмәк мәй һемерһәк ниндәй зарар?
Берҙе эсһәк, икенсеһе бигерәк ярар.
Бит барыбер яҙмышыбыҙ сүлмәксеһе
Һинең менән минең баштан сүлмәк яһар.

*9/VII—76*

* * *

Тор, йөрәгем, ал ҡулыңа саз ҡылдарын,
Шарап эсеп, нам-ғәмеңдең онот барын.
Бер быяла мәйгә һатып намаҙлығың,
Ташҡа онта был буш шөһрәт ҡыуыҡтарын!..

*9/VII—76*

* * *

Эй дуҫҡайым! Янма донъя ғәме менән,
Донъя йәшәй күҙ йәшенең тәме менән.
Үткән — бөткән, ә килер көн килмәй икән,
Юҡҡа көймә, йәшә мәлдең йәме менән.

*9/VII—76*

* * *

Ҡайғырма, дуҫ, байрамға ла форсат булыр,
Ураҙалар уҙғас, бары бик шат булыр.
Ай ҙа, ана, йонсоп бөткән, кәкрәйеп,
Ул да тиҙҙән бер ҡотолған хөр саҡ булыр.

*9/VII—76*

* * *

Ғишҡым өсөн әр ишетеп, туҙаһым юҡ,
Наҙан менән бәхәсләшеп уҙаһым юҡ.
Ир булғанға дауа ғына был эсемлек,
Булмағанға, мәй өләшеп, файҙаһы юҡ.

*10/VII—76*

* * *

Все этого пестрого мира дела, — как я вижу —
Презренны, никчемны, исполнены зла, — как я вижу.
Что ж, слава Творцу! Этот дом, что я строил всю жизнь,
Невежды сожгут и разрушат дотла, — как я вижу.

*В. Державин*

* * *

Друзья, дадим обет быть вместе в этот час,
В веселье на печаль совместно ополчась,
И сядем пить вино сегодня до рассвета!
Придет иной рассвет, когда не будет нас.

*В. Державин*

* * *

Если в городе отличишься, —
станешь злобы людской мишенью,
Если в келье уединишься, —
повод к подлому подозренью.
Будь ты даже пророк Ильяс,
будь ты даже бессмертный Хызыр,
Лучше стань никому неведом,
лучше стань невидимой тенью.

*В. Державин*

* * *

Отчего всемогущий Творец наших тел
Даровать нам бессмертия не захотел?
Если мы совершенны — зачем умираем?
Если несовершенны — то кто бракодел?

*Г. Плисецкий*

* * *

Раз увеличить нам нельзя, не уменьшить свой удел,
Не огорчайся же, мудрец, из-за пустых иль важных дел.
Увы, я к выводу пришел: твоя ль судьба, моя ль судьба —
Не воск в руках. Никто досель придать ей форму не сумел.

*В. Державин*

* * *

Все — и зло, и добро, что людская скрывает природа,
Высшей воле подвластно, и здесь не дана нам свобода.
Ты вину своих бедствий не сваливай на небосвод, —
В сто раз хуже, чем твой, подневольный удел небосвода.

*В. Державин*

***

Был донъяның бар эштәрен күреп торам,
Һәр эшенә хаҡ-иштәрен биреп торам,
Собханалла! — Ҡайҙа ғына күҙ һалмайым —
Бәхетһеҙлек емештәрен тиреп торам!..

*10/VII—76*

***

Ҡулға ҡулды тотоношоп, булһаҡ берҙәм,
Беҙ типкеләп ебәрербеҙ ғәмде ерҙән.
Таң атҡанса ултырайыҡ бергә саҡта,
Башҡа таңдар ҡыйылмаҫ бит беҙгә гүрҙән.

*10/VII—76*

***

Шөһрәт алһаң һин шәһәрҙә, күҙгә — сәпһең,
Өйҙә ятһаң, шөбһәләрҙән биҙәсәкһең.
Иң яҡшыһы — шәүлә бул һин был донъяла:
Хыҙыр Ильяс ишеләрҙәй гиҙәсәкһең!

*10/VII—76*

***

Был донъяға бер яратҡас Тәңре беҙҙе,
Ниңә камил ҡылмаған һуң тәнебеҙҙе?
Камил булһаҡ, ниңә вата? Ә, булмаһаҡ,
Шулай иткән кемдең ғәйептәре беҙҙе?

*10/VII—76*

***

Ризыҡ, ғүмер булмағас үҙ ҡулыбыҙҙа,
Янып-көйөү мәғәнәһеҙ утлы ҡуҙҙа.
Белгәнемсә, һинең менән минең хәлде
Үҙгәртеп тә булмай нәғеҙ, балауыҙҙай.

*10/VII—76*

***

Яҡшыһын да, яманын да әҙәмдәге,
Йәмен-ғәмен бөтә был ер йөҙөндәге —
Барын күккә ауҙармасы, ғаҡлың булһа,
Мең ҡат ауыр уның ғәме үҙендәге!..

*10/VII—76*

* * *

Посмотри на стозвездный опрокинутый небосвод,
Под которым мудрейшие терпят насилье и гнет.
Посмотри на лобзанье любви пиалы и бутыли —
Как прильнули друг к другу, а кровь между ними течет.

*В. Державин*

* * *

Эй, сердце! Собери, что нужно в этом мире,
Пусть только радости лужайка будет шире.
Садись росой на луг зеленый к вечеру,
А поутру вставай, всю ночь пробыв на пире.

*В. Державин*

* * *

В этом мире глупцов, подлецов, торгашей
Уши, мудрый, заткни, рот надежно зашей,
Веки плотно зажмурь — хоть немного подумай
О сохранности глаз, языка и ушей.

*Г. Плисецкий*

* * *

Уж лучше пить вино и пери обнимать,
Чем лицемерные поклоны отбивать.
Ты нам грозишь, муфтий, что пьяниц в ад погонят,
Кому ж тогда в раю за чашей пировать?

*В. Державин*

* * *

Ты полон бодрой силой — пей вино,
С прекрасноликой милой — пей вино.
Мир этот бренный — темные руины,
Забудь, что есть и было, — пей вино!

*В. Державин*

* * *

Доколе быть в плену румян и благовоний
За тленной красотой и мерзостью в погоне?
Будь родником Замзам, ключом воды живой, —
В свой срок ты скроешься в земном глубоком лоне.

*В. Державин*

* * *

Күҙ һалсы был түңкәрелгән кәсә-күккә —
Күпме аҡыл йондоҙ итеп хәсрәт түккән!
Тиҡ күрсе, күр кәсә-шешә дуҫлығын бер:
Ҡан һарҡһа ла, бер-береһен нисек үпкән?!

*13/VII — 76*

* * *

Эй йөрәгем, барыһын йыйбыл йыһанда,
Тик ләззәтең бағы иркен булһын унда.
Ысыҡ булып кун да кисен гөл бағыңа,
Осоп кит һин, томандай таң һыҙылғанда.

*13/VII — 76*

* * *

Был донъяла уйламайса эш итмәҫ бул,
Сер бүлешеп, ахмаҡтарҙы иш итмәҫ бул.
Әле телең, күҙ-ҡолағың иҫән саҡта
Телеңде тый, күҙеңде йом, ишетмәҫ бул.

*17/VII — 76*

* * *

Суфый булып ҡыланғансы йәш сағыңда,
Мәй эс тә һин, булсы йәрең ҡосағында.
Юҡһа кем һуң йәннәтеңдә күңел асыр,
Бар иҫерек янһа тамуҡ усағында?

*18/VII — 76*

* * *

Дәртең-көсөң бар сағында — эсеп ҡал һин,
Йәрең барҙа ҡосағында — эсеп ҡал һин!
Тик төш кенә, хараба был — фани донъя,
Барын онот был саҡ унда — эсеп ҡал һин!..

*18/VII — 76*

* * *

Кершән-хушбый күпме әсир итер һаман?
Күпме шулай албырғатыр якшы-яман?
Зәмзәм һыуы, Әбелхаят булһаң да бит,
Ахыр сиктә һеңәсәкһең ергә тамам!

*18/VII — 76*

* * *

Ста сердец и ста вер дороже чаша одна,
Все китайское царство не стоит глотка вина.
Что еще есть на свете, кроме вина цвета лала? —
Только скорбь, что вся радость земли усладить не вольна.

*В. Державин*

* * *

Росинки на тюльпане — жемчужины цветка.
Свои головки клонят фиалки цветника.
Но как соблазна полон трепещущий бутон,
Что прячется стыдливо в одежд своих шелка!

*Л. В. Некора*

* * *

Я — словно старый дуб, что бурею разбит:
Увял и пожелтел гранат моих ланит,
Все естество мое — колонны, стены, кровля, —
Развалиною став, о смерти говорит.

*О. Румер*

* * *

Я не был трезв ни дня, я не таю.
Я опьянен всегда; в ночь Кадр я пью.
Уста — к устам фиала; до рассвета
Рукою шею хума обовью.

*В. Державин*

* * *

Нас, пьяниц, не кори! Когда б Господь хотел,
Он ниспослал бы нам раскаянье в удел.
Не хвастай, что не пьешь, — немало за тобою,
Приятель, знаю я гораздо худших дел.

*О. Румер*

* * *

Пей вино, лишь оно одно забвенье тебе принесет,
Душу врага лишь оно смятением потрясет.
Что пользы в трезвости? Трезвость — источник мыслей бесплодных,
Все в этом мире — смертны, и все бесследно пройдет.

*В. Державин*

* * *

Бер кәсә мәй йөҙ диненән ҡиммәтлерәк,
Бер йотом мәй Син иленән ҡиммәтлерәк,
Яҡут төҫлө мәйҙән башҡа ни һуң кәрәк? —
Әсеһе лә мең сөсөнән хикмәтлерәк!

*18/VII—76*

* * *

Һәр таң һайын ысыҡ ҡунғас ләләләргә,
Миләүшә лә мәжбүр була бөгөлөргә.
Тик, биллаһи, миңә ал-гөл һөйкөмлөрәк
Итәктәрен төргән мәлдә бөрөләргә!

*18/VII—76*

* * *

Кем мин хәҙер? — Йәшен һуҡҡан бер ҡарт имән,
Гөлнар төҫлө яңағымдың нуры шиңгән.
Тағарағы, сағарағы сатырымдың
Шалтыр-шолтор, хайран-вайран хәлгә ингән.
*18/VII—76*

* * *

Минең айныҡ булғаным юҡ һис бер көндә,
Иҫерек мин хатта ҡәҙер кистәрендә.
Ҡосаҡта — хом, иренем — ям иренендә,
Таң атҡанса ут көйрәй бит эстәремдә.
*18/VII—76*

* * *

Эскесе, тип битәрләмә туғаныңды,
Енем һөймәй ялған менән тулғаныңды.
Эсмәйем, тип лаф орһаң да, белеп торам,
Мәйҙән хәтәр мең боҙоҡ эш ҡылғаныңды!..
*20/VII—76*

* * *

Эсеп алһаң, бөтә ҡайғың онотола,
Дошманыңдың талағына ҡаны тула.
Ниндәй файҙа айнығыуҙан? — Юҡ-бар уйҙан
Йөрәккә тик фани донъя моңо тула.
*20/VII—76*

* * *

О избранный, к словам моим склонись,
Непостоянства неба не страшись!
Смиренно сядь в углу довольства малым,
В игру судьбы вниманьем углубись!

*В. Державин*

* * *

То не моя вина, что наложить печать
Я должен на твою заветную тетрадь;
Мне чернь ученая достаточно знакома,
Чтоб тайн своей души пред ней не разглашать.

*О. Румер*

* * *

Я пред тобою лишь не потаюсь, —
Своей великой тайной поделюсь:
Любя тебя, я в прах сойду могильный
И для тебя из праха поднимусь!

*В. Державин*

* * *

Мы дервишеским рубищем жбан затыкали,
Омовенье землею трущоб совершали.
Может быть, и отыщем в пыли погребка
Жизнь, которую мы в погребках потеряли?!

*В. Державин*

* * *

Ты алчность укроти, собой живи,
К делам судьбы презрение яви!
Промчится быстро век твой пятидневный,
Вину предайся, песням и любви!

*В. Державин*

* * *

Хоть этот мир лишь для тебя, ты мыслишь, сотворен,
Не полагайся на него, будь сердцем умудрен.
Ведь много до тебя людей пришло — ушло навеки.
Возьми свое, пока ты сам на казнь не уведен.

*В. Державин*

* * *

Эй ҡорҙашым, тыңла, етте форсат күптән:
Шомланмасы өйөрсөктәй был ят күктән.
Ултыр ҙа һин тамаша ҡыл яҙмыш уйынын,
Булғанынан ҡәнәғәт бул, баш тарт күптән.

*20/VII – 76*

* * *

Йыһан сере бикле күңел дәфтәремдә,
Биген асһам — бәлә бит баш өҫтәремдә!
Бер кемгә лә әйтеп булмай бар белгәнде,
Күпме наҙан йөрөй ғалим төҫтәрендә!..

*1/VIII – 76*

* * *

Эс серемде һиңә генә асһам әгәр,
Ике ауыҙ һүҙҙән торор минең хәбәр:
Һиңә булған ғишҡым менән ер булһам да,
Һин тип кенә ҡалҡынырмын ерҙән мәгәр.

*1/VIII – 76*

* * *

Хөм ауыҙын ҡаплап ҡырҡ кат кере менән,
Тәһрәт алдыҡ беҙ харабат ере менән.
Мәсет саңы харап иткән ғүмерҙе, шәт,
Табып булыр сандан хаҡ ҡарт әмере менән?!

*1/VIII – 76*

* * *

Нәфсеңде тый, ҡәнәғәт бул булғанынан,
Уҙмышың юҡ яҙмышыңдың яҙғанынан!
Ал да ҡулға хәмереңде, һөй йәреңде,
Ҡыуаныс тап ғүмереңдең ҡалғанынан!

*1/VIII – 76*

* * *

Минеке, тип, килһәң дә бит риза ғына,
Ғаҡыллыға был донъяһы — ҡаза ғына.
Һиндәй унан күптәр килеп, күптәр киткән, —
Тейгәнен ал, китмәҫ борон язаһына.

*1/VIII – 76*

* * *

Когда совершается все не по нашим желаньям,
Что пользы всю жизнь предаваться напрасным стараньям?
Мы вечно в печали сидим, размышляя о том,
Что поздний приход увенчается скорым прощаньем.

*В. Державин*

* * *

День прекрасен: ни холод с утра, ни жара,
Ослепителен блеск травяного ковра.
Соловей над раскрытою розой с утра
Надрывается: браться за чашу пора!

*Г. Плисецкий*

* * *

Кто, живя на земле, не грешил? Отвечай!
Ну а кто не грешил — разве жил? Отвечай!
Чем ты лучше меня, если мне в наказанье
Ты ответное зло совершил? Отвечай!

*Г. Плисецкий*

* * *

Пресытился я жизнью своей — исполненной суеты,
Пресытился бедами и нищетой! О Господи, если ты
Вывел из небытия бытие, то выведи и меня —
Во имя твоего бытия — из горестной нищеты!

*В. Державин*

* * *

Ты — Творец, и таким, как я есть, — я тобой сотворен.
Я в вино золотое, и в струны, и в песни влюблен.
В дни творенья таким ты создать и задумал меня.
Так за что же теперь я в геенне гореть обречен?

*В. Державин*

* * *

Встань, не тужи! Что печалью о бренном томиться?
К нам приходи, чтоб за чашею повеселиться.
Если бы нравом судьба постоянна была,
То и тебе никогда не пришлось бы родиться.

*В. Державин*

* * *

Бер эштә лә ирешмәгәс маҡсатыңа,
Ни мәғәнә йәш ҡойоуҙан юл сатына?
Хәсрәт йотоп, мәңге бағып ултыр шулай
Килеп етмәй китеп барыр ваҡытыңа!..

*1/VIII – 76*

* * *

Иҫ киткес көн: ялҡын түгел, һалҡын түгел,
Гөлдәр йөҙөн ямғыр йыуғас, ялҡын тик гөл!
Һандуғас та һары гөлгә эй сарлай тел:
Йәнәһе лә, эсмәй булмай, хаҡыңды бел!

*2/VIII – 76*

* * *

Ерҙә гонаһ ҡылмаған, әйтсе, кем бар?
Булһа нисек йәшәй алған, әйтсе, улар?
Бер яманлыҡ ҡылһам да бит, мең яҙаң бар,
Шулай булғас, өҫтөн булған, әйтсе, кем бар?

*26/IX – 76*

* * *

Туйҙым, Тәңрем, туйҙым тамам хаятымдан.
Ер булдым мин юҡлыҡ-хәсрәт, оятымдан.
Ҡөҙрәттәрең булғас юҡты бар итерҙәй,
Йолоп алсы был фәҡирлек-юҡлығымдан.

*26/IX – 76*

* * *

Ҡалай булһам, шулай, Тәңрем, ятратҡанһың,
Шарабыңа, йыр-моңоңа ҡаратҡанһың.
Әлмисаҡтан үҙең шулай ятратҡастын,
Ниңә тамуҡ уттарынан ҡарматмаҡһың?

*26/IX – 76*

* * *

Тор, ҡайғырма фани донъя ғәмдәренә,
Ултыр ҙа һин шөкөр ит шат мәлдәреңә.
Яҙмыш холҡо әгәр ҙә бит ғәҙел булһа,
Юлыҡмаҫ та инең быңдай хәлдәреңә.

*26/IX – 76*

* * *

Тщетно тужить — не найдешь бесполезней забот,
Сеял и жал поколенья до нас небосвод.
Кубок налей мне скорее! Подай мне его!
Все, что случилось, — давно решено наперед.

*В. Державин*

* * *

О Боже! Милосердьем ты велик!
За что ж из рая изгнан бунтовщик?
Нет милости — прощать рабов покорных, —
Прости меня, чей бунтом полон крик!

*В. Державин*

* * *

Считай хоть семь небес, хоть восемь над землей, —
Ведь не изменит их движенья разум твой.
Раз нужно умереть, не все ль равно: в гробнице
Съест муравей тебя иль волк в глуши степной.

*В. Державин*

* * *

Виночерпий! Что делать мне с сердцем моим?
Мертвым лучше в могиле, спокойнее им.
Сколько раз я ни каялся, сколько ни плакал —
Все грешу! Очевидно, я — неисправим.

*В. Державин*

* * *

Если хочешь, чтоб крепкой была бытия основа
И хотя бы два дня провести без унынья злого,
Никогда не чуждайся веселья и пей всегда,
Чтоб успеть все услады испить из фиала земного.

*В. Державин*

* * *

Мирские тревоги — смертельный яд, чаша — противоядье его.
Блажен, кто противоядье пьет, не страшен гибельный яд для него.
С юными пери пей вино на свежем ковре зеленой травы
Во все свои дни, покамест трава из праха не выросла твоего.

*В. Державин*

* * *

Юҡтыр файҙа юҡҡа-барға ғәм йотоуҙан,
Күптәрҙе күк сәскән-урған, йотҡан туҙан.
Әүлиәлер — ҡәҙәхкә мәй ҡойоп һуҙған!
Булыры бит күптән инде булып уҙған...

*23/X — 76*

* * *

Йә рабби, һин — киң күңелле, тимәк, карам,
Карам булғас, ниңә Ирам бағың — харам?
Тыңлаусанды ярлыҡаусы ярҙамсылмы? —
Яньялсынды ярлыҡаһа — япсы ярам!..

*23/X — 76*

* * *

Күк йөҙө һис беҙ тигәнсә әйләнмәгәс,
Ете ҡат ни, һигеҙ ҡат ни был күк-тәгәс!
Сүл бүреһе кимерҙе ни, ҡырмыҫҡа ни —
Бәс, барыбер түгелме һуң, гүргә кергәс!..

*23/X — 76*

* * *

Көс-кәрем дә бөттө, саҡый, йөрәгемдә,
Тик мәрхүмдәр тыныс йоҡлай гүрҙәрендә.
Гонаһымды йолоп-йыуып, бөкрөм сыкты —
Төҙәлһәм тик төҙәлермен ҡәберемдә!

*23/X — 76*

* * *

Нигеҙен нык үрәм тиһәң ғүмереңдең,
Шат күңелдән ләззәтен күр һәр мәлеңдең.
Ике көнлөк кенә фани был донъяла
Һәр тамсыһын яйлап һемер хәмереңдең.

*24/X — 76*

* * *

Донъя ғәме ағыу булһа, шарап — дарыу,
Дарыу эсһәң, хәтәр түгел зәһәр ағыу.
Йәш үләндә йәшәреп ҡал йәш йәр менән,
Алып китмәҫ борон һине көҙ-ҡыуарыу.

*24/X — 76*

***

Круг небес ослепляет нас блеском своим,
Ни конца, ни начала его мы не зрим.
Этот круг недоступен для логики нашей,
Меркой разума нашего неизмерим.

*Г. Плисецкий*

***

Будь решительным! От обрядов пустых отказаться пора давно,
Не скупись, делись и с другими тем, что тебе судьбою дано.
В этом мире не покушайся на жизнь и достаток бедных людей,
Головой отвечаю — ты будешь в раю. Так проворней неси вино!

*В. Державин*

***

Деяньями этого мира разум мой сокрушен,
Мой плащ на груди разодран, ручьями слез орошен.
Фиал головы поникшей познанья вином не наполнить —
Нельзя ведь сосуд наполнить, когда опрокинут он...

*В. Державин*

***

Ты при всех на меня накликаешь позор:
Я безбожник, я пьяница, чуть ли не вор!
Я готов согласиться с твоими словами.
Но достоин ли ты выносить приговор?

*Г. Плисецкий*

***

Из мира праведного дух, не оскверненный дольним прахом,
К тебе явился. Встань пред ним с улыбкою, а не со страхом,
И чашу утренним вином для гостя доверху налей,
Чтоб молвил он: «Да будет день счастливый дан тебе Аллахом!»

*В. Державин*

***

Над лугом облако струит потоки слез...
Возможно ль миг прожить без сока пьяных лоз?
Зеленою травой любуемся мы нынче,
А завтра — глядь! — из нас уж новый луг пророс.

*О. Румер*

* * *

Күк көмбәҙе яуын ала күҙебеҙҙең,
Башы ла юҡ, ахыры ла күтебеҙҙең.
Икһеҙлеге-сикһеҙлеге башҡа һыймай,
Үлсәп булмай ғаҡыл менән үҙебеҙҙең!..

*1976*

* * *

Тәүәккәлләп, ваз кисһәң дин-намаҙыңдан,
Өлөшһөҙгә өлөш бүлһәң ҡаҙаныңдан,
Йә малың, тип, йә йәнең, тип, йән ҡыймаһаң,
Йәннәт көтөр! — Тик мәй килтер ҡар баҙыңдан!..

*25/X—76*

* * *

Был донъяға иҫ китмәгән төндәрем юҡ,
Ынйы йәшем түгелмәгән көндәрем юҡ.
Баш кәсәмә һыймай хатта иҫерткес уй,
Ҡайҙан һыйһын? Түңкәрелгән! Йүндәрем юҡ.

*25/X—76*

* * *

Ҡалай ғына хурламайһың мине һәр көн:
Иманһыҙ ҙа дәрүиш, имеш, дәһри йә кем?!
Хуш, шулай ҙа булайым, ти, әммә ләкин
Һин әле кем, сығарырға берәй хөкөм!..

*26/X—76*

* * *

Рухың килгән, керләнмәгән, пактан да пак,
Аҡ донъянан килгән һиңә — изге ҡунаҡ.
Ауыҙ астыр шарап менән — бит сәхәр саҡ!..
«Бирһен Хоҙай, — тип теләр ул, — көнөңдө аҡ!..»

*26/X—76*

* * *

Болот тағы йәшен ҡоя, йәшен йәшнәй,
Әҙерәк мәй ауыҙ итмәй, юҡ, килешмәй,
Бер тамаша ҡылайыҡсы йәш үләнде,
Һәр тамаша бер өлөшкә ике төшмәй.

*26/X—76*

* * *

Что будущею занят ты судьбой,
Терзаешься бессмысленной борьбой?
Живи беспечно, весело. Вначале
Не посоветовались ведь с тобой.

*В. Державин*

* * *

Если б мне всемогущество было дано —
Я бы небо такое низринул давно
И воздвиг бы другое, разумное небо,
Чтобы только достойных любило оно!

*Г. Плисецкий*

* * *

Видишь этого мальчика, старый мудрец?
Он песком забавляется — строит дворец.
Дай совет ему: «Будь осторожен, юнец,
С прахом мудрых голов и влюбленных сердец!»

*Г. Плисецкий*

* * *

Жаждой вина огневого душа моя вечно полна,
Слуху потребны напевы флейт и рубаба струна.
Пусть после смерти кувшином я стану на круге гончарном,
Лишь бы кувшин этот полон был чистым рубином вина.

*В. Державин*

* * *

Увы, от мудрости нет в нашей жизни прока,
И только круглые глупцы любимцы рока.
Чтоб ласковей ко мне был рок, подай сюда
Кувшин мутящего наш ум хмельного сока.

*О. Румер*

* * *

Сказала роза: «Я Юсуф египетский среди лугов,
Как драгоценный лал в венце из золота и жемчугов».
Сказал я: «Если ты — Юсуф, примета где?» А роза мне:
«Взгляни на кровь моих одежд — и все ты сам поймешь без слов».

*В. Державин*

* * *

Күререңде уйлап, бәндәм, ҡойма моң-зар,
Күңелеңде буш сәм-ғәмдән ҡыйма, зинһар.
Һәр көнөңдөң шатлығын күр был донъяла,
Тәҡдир яҙғас, булмай күндәм ни сараң бар?!

*27/X—76*

* * *

Тәңрем кеүек әгәр хаким булһам күптән,
Түңкәрер ҙә был күк йөҙөн ергә күктән,
Барыһын да өр-яңынан ҡорор инем,
Азат ҡылып һәр пак йәнде гүрҙәй йөктән.

*27/X—76*

* * *

Эй, аҡһаҡал, күрәһеңме малайҙарҙы? —
Ҡомда уйнап, ҡомдан ҡора һарайҙарҙы?
«Куҙғатмағыҙ, — тип кәңәш бир, — ҡом булған был
Ғашиҡ йөрәк һәм ғаҡыллы башҡайҙары!»

*27/X—76*

* * *

Һыуһағаным — һәр саҡ мәй ҙә шарап булыр,
Тыңлағаным — һәр саҡ нәй ҙә рубаб булыр.
Тупрағымдан аҙаҡ сүлмәк яһаһындар,
Бәлки, бер саҡ, шарап ҡойһаҡ, ярап булыр?!

*27/X—76*

* * *

Был заманда аҡылдан кем файҙа йыйыр?
Яҙмыш емен ашап бары ахмаҡ туйыр.
Шулай булғас, тилертерҙәй мәй бирегеҙ,
Бәлки, яҙмыш, бер йылмайып ҡарап ҡуйыр!..

*27/X—76*

* * *

«Мин, — тине гөл, — әсир Йософ, ят был илдә,
Шиңәм инде, алтын-яҡут таж кейһәм дә».
«Йософ булһаң, ҡайҙа берәй билдәң?» — тигәс,
«Бына, — ти был, — билдәм — ҡанлы күлдәгемдә».

*30/X—76*

* * *

Я с вином и возлюбленной позабыл и нужду, и труды,
Я не жду милосердия, до судилища нет мне нужды.
Отдал душу и сердце я, и одежду в залог за вино —
Я свободен от воздуха, от земли, и огня, и воды.

*В. Державин*

* * *

Все, что есть — только вымысел, сном улетает,
И не избранный тот, кто о том не узнает.
Сядь, испей эту чашу и развеселись!
Пусть тебя сожаленье потом не терзает.

*В. Державин*

* * *

Жизнь, как роспись стенная, тобой создана,
Но картина нелепостей странных полна.
Не могу я быть лучше! Ты сам в своем тигле
Сплав мой создал; тобою мне форма дана.

*В. Державин*

* * *

С той горсточкой невежд, что нашим миром правят
И выше всех людей себя по званью ставят,
Не ссорься! Ведь того, кто не осел, тотчас
Они крамольником, еретиком ославят.

*О. Румер*

* * *

Ты знаешь, почему в предрассветный час
Петух свой скорбный клич бросает столько раз?
Он в зеркале зари увидеть понуждает,
Что ночь — еще одна — прошла тайком от нас.

*О. Румер*

* * *

Ни держава, ни полная злата казна
Не сравнятся с хорошею чаркой вина!
Ни венец Кей-Хосрова, ни трон Фаридуна
Не дороже затычки от кувшина!

*Г. Плисецкий*

* * *

Харабатта йәрем менән донъя харап —
Йәннәт ни ҙә йәһәннәм ни, булһа шарап!
Ут, Һыу, Ер, Күк быҒауынан бер ҡотолҒас,
Бурысына өҫ-башымды тормам ҡарап...

*30/X — 76*

* * *

Был донъяла һәр ни хыял, һәр ни ялған,
Ғариф булмаҫ шул хаҡлыкты аңламаған.
Ултыр ҙа һин ҡәҙәх менән һушыңды йыҡ,
Былай ҙа күп, бушты уйлап, наҙан ҡалған!..

*30/X — 76*

* * *

Был нағышты үҙең яһап ҡуйғанһыңсы,
Күпме юкты, ахмаҡлыкты йыйғанһыңсы.
Яҡшы булып булмаҫ инде булғанымдан,
Сөнки үҙең шул сифатта ҡойғанһыңсы!..

*30/X — 76*

* * *

Өҫ-дүрт наҙан илгә түрә булып алһа,
Бирер һиңә ишәк баштан сығып баһа,
Ишәк булмай ғына ҡара улар менән —
Иртәгә үк һин «фетнәсе», «кафыр» ҙаһа!

*31/X — 76*

* * *

Беләһеңдер, ниңә шулай сәхәр еткәс,
Һәр таң һайын моңһоу һөрән һала әтәс?
Тағы ла бер төнө үтте ғүмереңдең,
Күк-көҙгөлә күрмәй ҡалма, тигәндәй хәс.

*31/X — 76*

* * *

Дәүләттәр ҙә, алтын тулы ҡаҙналар ҙа
Бер ни тормай торна муйын ҡомған барҙа.
Хосрау тажы вә тәхете Фәридундың
Арзаныраҡ шарап һаҡлар тығындарҙан!

*31/X — 76*

* * *

Та ваза, что здесь на гончарном круге была,
При жизни в объятьях любовной вьюги была;
А ручка, что видишь у горлышка этой вазы, —
Рука, что когда-то на персях подруги была.

*И. Сельвинский*

* * *

Я к ланитам, подобным розе, весною тянусь,
Я к кувшину с вином и к чаше рукою тянусь.
Прежде чем рассыплется в прах мой живой сосуд,
Долю взять я от радости каждой земной тянусь.

*В. Державин*

* * *

Хайям, если ты вином опьянен, — благодарствуй судьбе,
Если с возлюбленной уединен, — благодарствуй судьбе.
Конец, истребленье — явлений всех завершенье,
Пока ты смертью не истреблен, — благодарствуй судьбе.

*В. Державин*

* * *

Коль можешь, не тужи о времени бегущем,
Не отягчай души ни прошлым, ни грядущим.
Сокровища свои потрать, пока ты жив:
Ведь все равно в тот мир предстанешь неимущим.

*В. Державин*

* * *

Ты бери свою долю из круговорота времен,
Восседай на престоле веселья, вином опьянен.
Нет заботы Аллаху — покорны мы иль непокорны, —
Здесь возьми свое счастье, вот — смертных извечный закон.

*В. Державин*

* * *

Во сне сказал мне пир: «Покинь свою кровать,
Ведь розу радости нельзя во сне сорвать.
Ты, лежебок, все спишь, а сон подобен смерти.
Встань! Ведь потом века тебе придется спать!»

*В. Державин*

* * *

Ҡар баҙынан әле алған ошо ҡомған
Ҡасандыр бит бер һылыуға ғашиҡ булған.
Тотҡаһы ла тотҡа түгел — валлаһи, ҡул!
Ҡыҙын шулай муйынынан ҡосоп алған.

*31/X—76*

* * *

Ҡараштарым гөлдәй йөҙҙө йотоп туймай,
Бармаҡтарым кәсәгеҙҙе тотоп туймай.
Буй-һындарым тупраҡ менән буталмайса,
Шатлыҡтарым, йәнем һеҙҙе, татып туймай.

*31/X—76*

* * *

Хәйәм! Хәмер эсә алһаң — шөкөр ит һин,
Йәр менән сер сисә алһаң — шөкөр ит һин,
Һәр ни ахыры был йыһанда — юҡҡа сығыу,
Әле ғүмер кисә алһаң — шөкөр ит һин!..

*6/XII—76*

* * *

Донъя ғәмен ҡуйып торсо, килһә ҡулдан,
Өҙгөләмә күңеләңде ундан-һулдан.
Эс, уйна, көл, биш көнлөк был ғүмереңдә,
Бөртөк арпаң гүргә һыймаҫ йыйғаныңдан.

*07/XII—76.* Переделкино

* * *

Бишегеңдән күпме генә ләхетеңә?
Тот та кәсә, ултыр шатлыҡ тәхетеңә.
Баш әйҙең ни, әймәнең ни — Хоҙайға ни?
Тейенеп ҡал донъялыҡта бәхетеңә!..

*07/XII—76*

* * *

Төштә, имеш, бер аҡһаҡал ишек шаҡый:
«Тор — йоҡлап, ти, бәхет гөлө кемгә балҡый?
Әжәлгә тиң хилаф эште ҡылаһың бит,
Эс — гүрҙә лә йоҡларһың, ти, ғүмер баҡый!..»

*07/XII—76*

* * *

Долго ли мне тужить о том, что давно решено,
И хорошо ли прожить мне век мой судьбою дано?
Выдохну я этот вдох или нет — и сам я не знаю,
Ну так скорей в эту чашу чистую налей мне вино!

*В. Державин*

* * *

Открой мне, Боже, дверь твоих щедрот,
Дай хлеб и все, чем дольний прах живет,
И до беспамятства мне дай упиться,
Чтоб никаких не ведал я забот.

*В. Державин*

* * *

Где б ни алел тюльпан и роза ни цвела,
Там прежде кровь царей земля в себя впила.
И где бы на земле ни выросла фиалка,
Знай — родинкой она красавицы была.

*В. Державин*

* * *

Лишь на небе рассвет займется еле зримый,
Тяни из чаши сок лозы неоценимой!
Мы знаем: истина в устах людей горька, —
Так, значит, истиной вино считать должны мы.

*О. Румер*

* * *

Зачем растить побег тоски и сожаленья?
Читай и изучай лишь книгу наслажденья.
Ты пей и все свои желанья исполняй!
Ты знаешь сам давно, что жизнь — одно мгновенье.

*В. Державин*

* * *

Будь осмотрителен — судьба-злодейка рядом!
Меч времени остер — не будь же верхоглядом!
Когда судьба тебе положит в рот халву,
Остерегись — не ешь: в ней сахар смешан с ядом.

*Л. Пеньковский*

***

Ни булыр ҙа, ни булмаҫ, тип ҡайғырғансы,
Ғүмер ҡалай үтер һуң, тип уй ҡорғансы,
Шарап ҡойсо! — Аҡтығымы был һулышың? —
Белмәйһең бит, ауыр һулап, сығарғансы!..

*08/XII—76*

***

Ас, йә рабби, миңә ризыҡ ишектәрен,
Мәхлүгеңдең бөтәштер бар тишектәрен:
Иҫерт мине шундай зәһәр шарап менән —
Онотайым барса хәсрәт вә шиктәрен!..

*08/XII—76*

***

Ҡайҙа ғына тулҡынмаһын яҙ еленән,
Ләлә гөлдәр сәләм әйтмәҫ наҙ иленән:
Миләүшә лә сер бүлешмәҫ шытып сығып
Шаһ ҡанынан, йә йондоҙҙай ҡыҙ миңенән.

*08/XII—76*

***

Бер кем беҙҙе ғәйеп итмәҫ, таңдан торһаҡ,
Бер аҙыраҡ аҡтан да аҡ шарап йотһаҡ.
Берәүҙәр бит хәҡиҡәтте әсе, тиҙәр,
Тимәк, беҙҙең эскәнебеҙ — илаһи хаҡ!

*08/XII—76*

***

Мөһөр итмә йөрәгеңә хәсрәт табын,
Асып ҡуй гел китабыңдың ләззәт бабын.
Йән теләгән бар теләгең алға килһен,
Күпме генә йәшәйһең бар, йә, әйт, тағы?

*08/XII—76*

***

Бел: яҙмыштың эсе тулы мәкер булыр,
Көтмәгәндә, арттан килеп, хәнйәр һуҙыр.
Заманында ауыҙыңа хәлүә һалһа,
Йотма, зинһар, хәлүәһенә зәһәр туҡыр.

*08/XII—76*

* * *

Кто посетил сей мир, тому печаль понятна:
Вернуться должен он в небытие обратно.
Блажен душою тот, кто мир покинул рано,
А кто не приходил совсем — блажен стократно.

*С. Липкин*

* * *

Боже, скуку смертельную нашу прости,
Эту муку похмельную нашу прости,
Эти ноги, бредущие к харабату,
Эту руку, обнявшую чашу, прости.

*Г. Плисецкий*

* * *

Ты, мудрец, не слушай людей, что покорствовать небу велят.
Утешайся чистым вином, пусть красавицы радуют взгляд.
Приходившие в этот мир все ушли — один за другим,
И никто не видел нигде возвратившегося назад.

*В. Державин*

* * *

О живущий в плену четырех стихий и семи планет!
Ты — игралище их, ты влачишь ярмо вереницы лет.
Пей вино! Ведь я тысячу раз тебе повторял:
Коль уйдешь, то уйдешь навсегда — и возврата нет.

*В. Державин*

* * *

И пылинка живого частицей была,
Черным локоном, длинной ресницей была.
Пыль с лица вытирай осторожно и нежно:
Пыль, возможно, Зухрой ясноликой была!

*Г. Плисецкий*

* * *

Этот старый кувшин на столе бедняка
Был всесильным визиром в былые века.
Эта чаша, которую держит рука, —
Грудь умершей красавицы или щека...

*Г. Плисецкий*

* * *

Был зинданға килеп әҙәм ни һуң алған? —
Бәғеренә ҡан һауҙырған да хәлдән тайған.
Был донъянан иртә киткән бәхетлелер,
Әүлиәлер әсәһенән тыумай ҡалған.

*08/XII—76*

* * *

Кисер, Тәңрем, әсир булған йөрәгемде,
Кисерә күр ғәм-сир йыйған күкрәгемде,
Харабатҡа илтеп йығыр был тырмамды,
Мәй тоторға әҙер торған көрәгәмде!

*09/XII—76*

* * *

Тыңлама һин заман-заңға күнгәндәрҙе,
Мәй эс эҙләп, ысҡындырма күркәм йәрҙе.
Килгән китер бер-бер артлы был донъянан,
Бер кем күрмәҫ кире ҡайтып кергәндәрҙе.

*09/XII—76*

* * *

Донъя хасил Уттан-Һыуҙан, Ерҙән-Күктән,
Ете йондоҙ ҡөҙрәтендә йөрөй күптән.
Шул һандарға баш эйәм дә шарап эсәм:
Ҡасыр хәл юҡ тылсымлы был Ете, Дүрттән.

*09/XII—76*

* * *

Был саң да бит теп-тере бер бөртөк булған,
Ҡара толом йәки оҙон керпек булған.
Һаҡ ҡына һөрт ул саңды һин — кем белә һуң —
Әллә Зөһрә миңендәге бер төк булған?

*09/XII—76*

* * *

Иҫке көршәк — бер фәҡирҙең өҫтәлендә,
Ул ҡөҙрәтле вәзир булған үҙ мәлендә.
Мин тоткан был кәсә лә бит мәктәй янған
Бер һылыуҙың ике тулҡын күкрәгендә!..

*09/XII—76*

* * *

Мы по желанью не живем ни дня,
Живи в веселье, злобу прочь гоня.
Общайся с мудрым, — ведь твоя основа —
Пыль, ветер, капля, искорка огня.

*В. Державин*

* * *

Пока в дорогу странствий не сберешься, — не выйдет ничего,
Пока слезами мук не обольешься, — не выйдет ничего.
О чем скорбишь? Покамест, как влюбленный,
Ты от себя совсем не отречешься, — не выйдет ничего!

*В. Державин*

* * *

Вместо сказок про райскую благодать
Прикажи нам вина поскорее подать.
Звук пустой — эти гурии, розы, фонтаны...
Лучше пить, чем о жизни загробной гадать!

*Г. Плисецкий*

* * *

Как жар-птица, как в сказочном замке княжна,
В сердце истина скрытно храниться должна.
И жемчужине, чтобы налиться сияньем,
Точно так же глубокая тайна нужна.

*Г. Плисецкий*

* * *

Много лет размышлял я над жизнью земной,
Непонятного нет для меня под луной.
Мне известно, что мне ничего неизвестно! —
Вот последняя правда, открытая мной.

*Г. Плисецкий*

* * *

Ни зерна надежды на гумне пустом,
Мы с тобой уйдем, покинем сад и дом...
Серебро, вино и хлеб истрать с друзьями,
Или все врагу достанется потом!

*В. Державин*

* * *

Үҙ иркендә түгел икән Әҙәм заты,
Бар, шат йәшә, иҙһәләр ҙә һине ҡаты.
Тыңла, һин кем? — Ер менән Күк, Ут менән Һыу! —
Асылың бит был донъяның түгел яты?

*09/XII—76*

* * *

Дәрүиш йәндәй донъя гизмәй, — бер эш сыҡмаҫ,
Йөрәгеңде ҡанға иҙмәй, — бер эш сыҡмаҫ.
Ниңә бушҡа йәш ҡойорға? Ғашиҡ ише,
Үҙ-үҙеңдән тамам биҙмәй, — бер эш сыҡмаҫ!..

*09/XII—76*

* * *

Ары торһон әкиәттәге йәннәттәрең,
Ҡой тиҙерәк шарабыңдың ҡиммәттәрен!
Зәм-зәм, гөлдәр, хур ҡыҙы тип алданғансы,
Эс кәсәңде — шунда йәшәү хикмәттәре.

*09/XII—76*

* * *

Күҙ күрмәгән Сәмреғоштай Ҡаф тауында,
Хәҡиҡәт сер булһын күңел һандығында.
Мәрйен дә бит мәрйен булып балҡығансы,
Мең йыл ятыр тәрән диңгеҙ ҡабығында.

*09/XII—76*

* * *

Күп уйландым мин был донъя тураһында,
Аңламаҫтай бер ни ҙә юҡ Ай аҫтында.
Белдем бары бер ниҙе лә белмәүемде,
Үҙем аҫкан яңылыҡ тик бына шунда.

*10/XII—76*

* * *

Бөртөгө лә өмөтөңдөң шытмай ҡалыр,
Беҙ киткәндә был баҒ-һарай бошмай ҡалыр.
Алтын-көмөш, мәйен бүлеш дуҫтар менән,
Юҡһа, бары дошманыңа бушлай ҡалыр.

*10/XII—76*

* * *

Мой враг меня философом нарек, —
Клевещет этот злобный человек!
Будь я философ, в эту область горя —
На муки — не пришел бы я вовек!

*В. Державин*

* * *

Нет облегченья от оков мирских,
Безрадостна пустыня дней моих;
Я долго у судьбы людской учился,
Но ловкачом не стал в делах земных.

*В. Державин*

* * *

